ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 май (һабанай) 2024

№17 (1110)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Диктант яҙҙылар...**



4

**Белем - зиһенгә...**

тәрбиә - күңелгә



9

**Сәхнә тураһында...**

кем генә хыялланмай икән!



11

**Хөрмәт төбө - хеҙмәт**



12-13

*"Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн 897 һум 06 тингә баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.*
*Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ХӘТЕРЛӘП...

# "ТЫНЫСЛЫҠ! ХЕҘМӘТ! МАЙ!"

## Был һүҙҙәр ҡоро лозунг ҡына булманы бит

**Беҙ, Совет осоронда тыуып үҫкән быуындар, хеҙмәттең, эштең ни икәнен, уның ауырлыҡтарын да, шатлыҡтарын да, хатта ләззәтен дә бала сағыбыҙҙан тойоп-татып үҫтек. Атайымдың "Родина-47" маркалы радиоалғысы бар ине. Унан һәр көндө Өфө радиоһы концерттар тапшыра - бар ғаиләбеҙ менән мөкиббән китеп тыңланыҡ уны. Хәтеремә уйылып ҡалған бер йыр миңә айырыуса ныҡ оҡшай ине. Бына уның һүҙҙәре: "Яландарҙа эшләп үҫкән егет Дандар алды иген ҡырында. Күкрәгендә балҡый алтын йондоҙ, Йыр йырлайыҡ батыр турында". Эйе, ошондай ҡабатланмаҫ бер заман ине: баҫыу ҡырҙарында, фермаларҙа көнө-төнө ал-ял белмәй эшләгән ябай ауыл кешеләренең фиҙаҡәр хеҙмәте батырлыҡҡа тиңләнде.**

(Дауамы 6-сы биттә).




ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ?

### *Кешене кеше иткән хеҙмәттең баһалары самалы булып китте түгелме бөгөн, нисек уйлайһығыҙ? Был һеҙҙең ғаиләлә йә туғандарығыҙ араһында сағылыш табамы?*

***Рөстәм ФӘХРЕТДИНОВ, Өфө фән һәм технологиялар университетының иҡтисад специальносы буйынса магистранты:*** Күптән түгел миңә Мәскәү дәүләт педагогия университетының Тарих һәм сәйәсәт институты директоры Владимир Шаповаловтың сығышын тыңларға тура килгәйне. "РФ Президенты Владимир Путин хеҙмәтте Рәсәйҙең төп ҡиммәттәренең береһе булараҡ баһаланы", - тигәне хәтеремә ныҡ уйылып ҡалды. Ысынлап та, илебеҙ хеҙмәт кешеһен ҙурлауҙың бай традицияларына эйә. Хеҙмәт һәм эш кешеһе һәр ваҡытта ла йәмғиәттең төп ҡиммәте булды. Хеҙмәтенә күрә - хөрмәте, тигәндәй, ябай эш кешеһенең фиҙаҡәрлеген баһалай ҙа белделәр. Улар лайыҡлы эш хаҡы ла алды, бик күп ябай эшсе һәм колхозсылар Социалистик Хеҙмәт Геройы, шулай уҡ үҙ һөнәрҙәре буйынса "атҡаҙанған" исемдәргә лайыҡ булды. Ябай хеҙмәтсәндәр араһынан Юғары Совет депутаттары ла күп ине. Бөгөн, әлбиттә, Хеҙмәт Геройы тигән почетлы исем яңынан ҡайтарылды, эшсе һөнәрҙәре әҙерләп сығарыусы уҡыу йорттары ла үҫешә, заманына яраҡлаша бара. Иң мөһиме - сәнәғәт предприятиелары тергеҙелде һәм улар бөгөн импортты алмаштырыу өлкәһендә, шулай уҡ оборона заказдарын үтәү буйынса эшләй.

Былар, әлбиттә, ҡыуаныслы, сөнки бөгөн ситтән көтөп ултырырға, юғары хаҡҡа һатып алырға түгел, ә үҙебеҙҙе үҙебеҙ тәьмин итергә форсат тыуҙы. Ә шулай ҙа хеҙмәт баҙарына күҙ һалһаҡ, башҡарылаһы эштәр бик күп әле. Мәҫәлән, һуңғы ике йылда хеҙмәт баҙарында эшһеҙлек кимәле кәмей барыуға ҡарамаҫтан, кадрҙар ҡытлығы килеп тыуҙы. "Коммерсант" үткәргән һорау алыуҙарҙан күренеүенсә, иҡтисад өлкәһендәге бөтөн Рәсәй компанияларында ла кадрҙар ҡытлығы күҙәтелә һәм был бигерәк тә транспорт (водителдәр, склад эшселәре), төҙөлөш, IT компаниялар (программистар), финанс ойошмаларына, хеҙмәтләндереү (автосервис мастерҙары һәм эшселәре) өлкәләренә ҡағыла. Кадрҙарға ихтыяж арта, ә эш эҙләүселәр бәләкәй эш хаҡына бил бөгөргә теләмәй. Редакция һорауындағы "хеҙмәттең баһаһы" тигәндәй, ул хәҙер, ысынлап та, юғары хеҙмәт хаҡына бәйле. Эш биреүселәрҙең байтағы хәҙер үҙ компанияларының эш хаҡы системаһын ҡайтанан ҡарап сығырға мәжбүр.

Әйткәндәй, бөгөн Рәсәйҙә эш хаҡтарының тигеҙһеҙлек кимәле, үкенескә, ярайһы юғары булып ҡала. Был Росстаттың былтырғы йыл мәғлүмәттәренән дә яҡшы күренә. Уртаса эш хаҡы күрһәткестәре буйынса Рәсәй субъекттары араһындағы айырма - 4,4 тапҡыр тәшкил итһә, төрлө һөнәрҙәр араһындағы айырма урыны менән хатта 10 тапҡырҙан да артып китә. Ҡағиҙә булараҡ, айырыуса бюджет өлкәһендә эшләүселәр был йәһәттән "үгәйһетелә". Әлегә тиклем 15 меңгә эшләп йөрөүсе уҡытыусылар, балалар баҡсалары тәрбиәселәре (11 мең), урам һепереүселәр (15-20 мең), кесе медперсонал (15-22), йөк тейәү-бушатыусылар (20-30 мең) бар. Беҙҙе, бөтә төр хеҙмәт тә маҡтаулы һәм баһалы, тип өйрәтһәләр ҙә, әлеге түләү системаһы һаҡланып ҡалһа, киләһе йылдарҙа был эш урындарына килергә теләүселәр ҡалмауы ла ихтимал.

12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

✓ *Әгәр "юғары баһалы" эштә эшләйем, тиһәң, быныҡ өсөн йә IT белгес булырға, йәки нефть һәм газ сәнәғәтендә эшләргә кәрәк, тик был һәр кем өсөн дә мөмкин түгел.*



БЫЛ АЙҘА...



# ИЗГЕ ҒӘМӘЛ ЕҢЕҮ ЯУЛАР

**Был айҙа бөйөк тарихи ваҡиға - яҡты һәм тантаналы байрамыбыҙ - Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү яулап, фашизм тигән ҡара көстө өҙөндә тонсоҡтороп, совет халҡының - атай-олатайҙарыбыҙҙың, әсәй-өләсәйҙәребеҙҙең киләсәк быуындар ғүмерен генә түгел, илебеҙ азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон да һаҡлап ҡалыуына, кешелекте ҡоллоҡ тырнағынан йолоуына 79 йыл тулыуҙы билдәләйбеҙ.**

Был көн бөтөн донъяуи-тарихи әһәмиәткә эйә һәм уның данын, тарихи асылын бер ниндәй алдаҡ та, күрәләтә боҙоп күрһәтергә маташыуҙар ҙа юҡҡа сығара алмаясаҡ, сөнки тарих - үҙе шаһит: 7 миллиондан ашыу совет һуғышсыһы фашистик Германия һәм уның союздаштары баҫып алған территорияла үлемгә - үлем, йөҙгә - йөҙ килеп йәнтәслим көрәштә һәм илебеҙҙе генә түгел, ә оккупацияланған Европа илдәре - Румыния, Польша, Венгрия, Югославия, Австрия, Германия, Чехословакия, Норвегия, Данияны фашистарҙан азат итте. Советтар Союзы был һуғыштан ҡаһарман еңеүсе булып ҡына түгел, Европала иң күп һанлы армия (11млн 365 мең кеше) булып та сыҡты һәм үҙ составына Көнбайыш Украинаны, Белоруссияны, Бессарабияны, Карпат арьяғы Украинаны, шулай уҡ Петсамо менән Кенигсбергты, ә көнсығышта Көньяҡ Сахалин менән Курил утрауҙарын да алып, илебеҙ сиктәрен киңәйтеүгә өлгәште. Донъя илдәре араһында хаҡлы рәүештә Советтар Союзының абруйы үҫте.

Нацистар хакимлығы һәм башбаштаҡлығына әйләнгән Германияны һәм уның ҡуштандарын еңеү, асылда, колониаль системаны еңеү булды. Бөгөн яңынан баш ҡалҡытыусы нацистик көстәр Бөйөк Еңеү ҡаҙаныштарын танымаҫҡа маташыуҙары менән бергә ваҡытында ана шул фашизмдың үлемесле ниәттәрен, тотош илдәрҙе һәм миллионлаған халыҡты юҡ итеүен, ғөмүмән, фашизмдың бөтөн кешелек донъяһына янаған хәүефен, шул уҡ ваҡытта фашистик Германияның нацистик ҡарашлы төп идеологтарын, сәйәсмәндәрен, хәрби начальниктарын, сәнәғәтселәрен, дипломаттарын фашлап биргән Нюрнберг процесын да иҫтәренән сығарып ебәрҙе. Халыҡ-ара хәрби трибунал кешелеккә ҡаршы ауыр һәм һанһыҙ күп яуызлыҡ ҡылғандары өсөн 12 нацист һәм енәйәт башлыҡтары Геринг, Риббентроп, Кейтель, Кальтенбруннер, Розенберг, Франк, Фрик, Штрейхель, Заукель, Йодль, Зейсс-Инкварт һәм Борманды аҫыу юлы менән үлем язаһына хөкөм итте. Ҡалған нацистар ғүмерлеккә һәм төрлө йылдарға иректәренән мәхрүм ителде.

Бөгөн беҙ был ҡанлы алышта Еңеү яулағандарҙың исемдәрен данлағанда ана шул ғәҙел хөкөмгә дусар ителгән ҡара көстәр хаҡында ла оноторға тейеш түгелбеҙ, сөнки улар сәсеп ҡалдырған ағыу бөгөн дә үҙенең емергес ниәтен башҡарырға маташып ята. Тап ана шуларҙың Рәсәйҙе яңынан ҡол итмәксе булып, уны бойондороҡһоҙ ниәтенән алып барылған Көнбайыш һәм АҠШ сәйәсәтенә ҡаршы илебеҙ уҙаллылығын яҡлау маҡсатында бара бөгөн дә көрәш.

Көрәш ике фронтта бара, шуға ла ауырыраҡҡа тура килә бөгөн : тышҡы көстәр - нацизм ҡалдыҡтары менән Махсус хәрби операцияла уландарыбыҙ көрәшһә, терроризм һәм коррупция, башҡа төр ҡаҡшатҡыс енәйәтселек менән ил эсендә лә "күҙгә күренмәгән" алыш бара. Эйе, тарихтың, ысынлап та, ҡабатлана торған ғәҙәте бар, әгәр ана шул тарих онотола йә баһаһын юғалта башлаһа. Әммә кешелек аңын юйып булмағандай, тарихты ла онотоу мөмкин түгел. Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көнөндә совет халҡына Мөрәжәғәттә ант булып яңғыраған "Беҙҙең ғәмәл хаҡ. Дошман юҡ ителәсәк. Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ!" тигән ҡоростай ышаныслы һүҙҙәр бөгөн дә көнүҙәк булып ҡала түгелме? Ул ваҡыттарҙа Бөйөк Еңеүҙе ил халҡының берҙәмлеге, фиҙаҡәрлегә лә яҡынайтҡан. Бөгөн дә беҙгә бик ныҡ кәрәк - берҙәмлек, фиҙаҡәрлек, аңлылыҡ, тәртип һәм тәрбиә. Тарих ҡабатлана. Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ!

**Йәмле май айының ҡояшлы, тормошобоҙҙо йәмләүсе тағы ла иҫтәлекле көндәре байтаҡ, бына улар:**

Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы **(1)**, Бөтөн донъя азат матбуғат, Бөтөн донъя Ҡояш **(3)** көндәре, Пасха, Совет матбуғаты, Халыҡ-ара акушерка **(5)**, Радио һәм элемтә саралары хеҙмәтсәндәре, Рәсәй Ҡораллы көстәре булдырылған **(7)** көндәр, Еңеү көнө. 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡының фашистик Германияны еңеүе **(9 май, 1945 йыл)**, Урман ултыртыу **(11)**, Халыҡ-ара әсә көнө **(12)**, Ҡара диңгеҙ флоты **(13)**, Ха-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

## *Кешене кеше иткән хеҙмәттең баһалары самалы булып китте түгелме бөгөн, нисек уйлайһығыҙ? Был һеҙҙең ғаиләлә йә туғандарығыҙ араһында сағылыш табамы?*

***Айгөл ИШБИРҘИНА, йәмғиәтте өйрәнеү һәм тарих уҡытыусыһы:*** "Хеҙмәт кешене матурлай һәм камиллаштыра," тигән Виссарион Белинский. Бөгөнгө йәмғиәт шарттарынан сығып, мин был бөйөк аҡыл эйәһенең һүҙҙәренә шулай тип өҫтәргә батырсылыҡ итер инем: бөтөн төр хеҙмәт тә түгел һәм бөтөн кешене лә түгел. Эш ниҙә, тейерһегеҙ. Башлайыҡ улайһа, баштан. Бөгөн эш эҙләүсе үҙ юлында ниндәй ҡаршылыҡтар һәм һикәлтәләр аша үтә, беләһегеҙҙер. Айырыуса йәш белгестәр был йәһәттән арып, арманһыҙ булған осраҡтар байтаҡ, үҙемдән беләм. Эш биреүсегә, ғәҙәттә, 20-30 йәштән дә кәм булмаған һәм шул уҡ ваҡытта 3 йәки 5 йыл стажлы йәш белгестәр генә кәрәк. Был аңлашыла ла, сөнки ундай кадрҙы эшкә өйрәтеп, ваҡыт сарыф итеп тороу кәрәкмәй, тип уйлай ул. Уныңса, йәш кеше эшкә алынғас та үҙенең вазифаһын башҡарырға тотона, тик шул уҡ ваҡытта уның коллективта яңы кеше булыуын иҫтә тотоп, был белгескә уның вазифа бурысына инмәгән башҡа төрлө ваҡ-төйәк һәм ойоштороу, йомошҡолға йүгереү кеүек бурыстар ҙа йөкмәтелә башлай. Ә быйдай "ваҡ-төйәк" өсөн, тәбиғи, уға бер тин дә өҫтәп түләнмәй.

Минең үҙемә бер осор ана шундай эшкә барып инеп, үҙ һүҙен генә һүҙ итеп, кадрҙар менән тупаҫ мөғәмәләгә өйрәнгән һәм уларҙың мәнфәғәттәрен һанға ла һуҡмаған бер етәксе ҡулы аҫтында эшләп алырға тура килгәйне, ҡыҙғаныҫҡа. Был етәксенең бар булмышы үҙенән юғарылағы түрәгә ярарға тырышыу ине. Сер итеп кенә әйтәйем, булмаһа, был коммерцияға ҡараған эш урыны түгел, ә нисек кенә ғәжәп булмаһын, дәүләт ойошмаһы ине. Нисек тә шәберәк күренеү һәм тиҙерәк рапорт биреү өсөн ул беҙҙе эш ваҡытынан һуң да, хатта ял һәм байрам көндәрендә лә эшләргә мәжбүр итә ине. Һәм беҙ ни бары 20, ә инде тәнгә 10-11-гә тиклем эшләһәң, 30 мең хеҙмәт хаҡына ла риза булырға мәжбүр инек. Шулай итеп, уҡыған һөнәремә төрҙәш булыуына ҡарамаҫтан, минә был эштән баш тартырға тура килде. Уның ҡарауы, мәктәпте бик яратып бөтмәһәм дә, уҡыта башлағас, минә бында көндән-көн ныҡыраҡ оҡшай бара, сөнки уҡытыусылар коллективы һәм мәктәп мөхите бөтөнләй икенсе донъя, ижади башланғыстарға юл асылып ҡына тора.

Тимәк, эште ойоштороусы, бөгөнгө тел менән әйткәндә, менеджерҙарҙың да үҙ бурыстарын һәм кимәлдә башҡарыуына бәйле теге йәки был төр хеҙмәттең баһаһы. Тик шулай ҙа, Рәсәй Президенты Владимир Путин хөкүмәткә педагогтарҙы "ҡағыҙ" мәшәҡәттәренән бушатыу тураһында һәм уҡытыусыларҙы лайыҡлы эш хаҡы менән тәьмин итеү хаҡында күрһәтмә биреүгә ҡарамаҫтан, үҙгәрештәр әллә ни һиҙелмәй. В. Путин белдереүенсә, илдә уҡытыусыларҙың эш хаҡы ғәҙел булырға һәм аҙ түләнгән төбәктәрҙә эш хаҡы өҫтәлергә тейеш ине. Ғөмүмән, беҙҙә, "яҙылмаған" ҡағиҙә булараҡ, мәктәптәрҙә генә түгел, башҡа өлкәләрҙә лә йәштәргә эш хаҡы бик аҙ түләнә. Уның төрлө нигеҙләмәләре бар, мәҫәлән, тейешле эш стажың булмау. Тик бында, ниңәләр, йәш кешенең хеҙмәт өлөшө, яҡшы күрһәткестәргә өлгәшеүенә "күҙ йомола". Ә бит күңелен биреп эш башлаған кеше лайыҡлы баһа - уны артабан дәртләндереүсе эш хаҡы көтә. Был, дөрөҫөн генә әйткәндә, хеҙмәткә иң ҙур баһа.

Ә һеҙ "Ни өсөн хеҙмәттең баһалары самалы булып китте әле?" тип һорайһығыҙ. Эш хаҡы ниндәй - хеҙмәттең баһаһы ла шундай, сөнки бөгөн кеше шундай йәшәү шарттарына дусар ителгән, бөгөн йәшәү көндән-көн ҡиммәтләнә бара. Элекке совет осорондағыса, ҡоро хеҙмәт энтузиазмы менән генә туҡ йәшәп булмай. Аҡсаң бар икән, һин кеше, юҡ икән, хәйерсе. Ҡайҙа яҡшы түләйҙәр, шунда эшкә баралар - оҡшаймы был, юҡмы кемгәләр. Бөгөнгө хәҡиҡәт шундай. Әгәр "юғары баһалы" эштә эшләйем, тиһәң, быныҡ өсөн йә IT белгес булырға, йәки нефть һәм газ сәнәғәтендә эшләргә кәрәк, тик был һәр кем өсөн дә мөмкин түгел. Кеше күңеленә яҡҡан, ятҡан эшен башҡарырға хоҡуҡлы һәм быныҡ өсөн ул хеҙмәтенә лайыҡлы хаҡын алырға тейеш, шунда ғына хеҙмәттең баһаһы күтәрелер һәм, Белинский әйтмешләй, кеше эше менән матур, шат күңелле булыр, яңы ҡаҙаныштарға өлгәшер.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 10 меңгә яҡын ветеранға Рәсәй Президентынан Еңеү көнө айҡанлы ҡотлау хаттары таратыла. Почтальондар 2 майҙан 8-нә тиклем Владимир Путин ҡул ҡуйған открыткаларҙы тапшыра. "Был байрам көндәрендә Рәсәй почтаһының төп бурысы - Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына Рәсәй Федерацияһы Президенты исеменән ҡотлау хаттарын таратыу. Беҙ беләбеҙ, был хаттарҙы бик көтәләр, һуңынан уларҙы ихтирам билдәһе итеп ҡәҙерләп һаҡлайҙар. Почтальондар был ҡотлауҙарҙы илдең һәр мөйөшөнә ваҡытында илтеп бирә", - тип билдәләнеләр ведомствола.

✓Синоптиктар фаразынса, алдағы көндәрҙә республикала һалҡын һауа торошо көтөлә. 2 майҙа урыны менән бер аҙ ямғыр яуҙы, иртән төньяҡ һәм көнсығыш райондарҙа ҡар ҡатыш. Йома, 3 майҙа, төндә урыны менән, көндөҙ республикала ҡыҫҡа ваҡытлы ямғыр, төндә төньяҡта ҡар ҡатыш ямғыр яуыуы ихтимал. Һауа температураһы төндә 0, +5°С, урыны менән -5°С һалҡынайтып, ҡырау төшөүе ихтимал, көндөҙ +6, +11°С. Шәмбе, 4 майҙа, ҡыҫҡа ваҡытлы, төндә иһә урыны менән ҡар ҡатыш ямғыр яуыуы көтөлә. Һауа температураһы төндә 0, +5°С, урыны менән -5°С һалҡынайтып, ҡырау төшөүе мөмкин, көндөҙ +4, +9°С.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә сәсеү кампанияһының башланыуы айҡанлы аграрийҙарға уңыштар теләне. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда төрлө климат зоналарындағы 37 район хужалыҡтары яҙғы культуралар сәсеүгә төшкән. Бойҙай, арпа, һоло, борсаҡ, кәрешкә, көнбағыш, майлы етен, рапс, шәкәр сөгөлдөрө сәсәләр. Әле йәмғеһе 46 мең гектар майҙанда яҙғы культуралар сәселгән. Шишмә (4,5 мең гектар), Ҡырмыҫҡалы (4,1 мең гектар), Илеш (3,7 мең гектар) районы хужалыҡтары алда бара. Яҙғы баҫыу эштәре быйыл бик иртә - 12 апрелдә үк башланды. Уҙған йылдың көҙөндә 80 проценты иген, ҡуҙаҡлы иген һәм ярма культуралары орлоғо әҙерләнгән.

✓"Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы яугирҙары генерал Шайморатов миҙалдары менән бүләкләнде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указы менән махсус хәрби операция барышында хәрби бурыстарҙы үтәгәндә күрһәткән батырлығы һәм ҡыйыулығы өсөн гаубица артиллерия дивизионы яугирҙары билдәләнде. Гаубица артиллерия дивизионы Авдеевканы азат иткәндә пехотаға контрбатарея уты менән ярҙам күрһәткән, дошман артиллерияһын тар-мар иткән.

***✓ Уларҙы производствоға етәкләп тигәндәй индереп ебәрергә, кәңәштәрең менән ярҙам итергә лә кеше кәрәк бит. Элекке совет осоронда уңыш ҡаҙанған хеҙмәт тәрбиәһе - наставниктар мәктәбе юҡҡа ғына булдырылмағайны шул.***



лыҡ-ара ғаилә **(15)**, Халыҡ-ара һыйышып тыныс йәшәү **(16)** көндәре, Халыҡ-ара музейҙар **(18)**, РСФСР-ҙа пионер ойошмаһына нигеҙ һалынған **(1922)** көндәр, Халыҡ-ара бал ҡорттары **(20)**, Халыҡ-ара сәй **(21)**, Филолог **(25)**, Эшҡыуарҙар **(26)**, Дөйөм Рәсәй китапхана **(27)**, Ил сиге һаҡсылары **(29)**, Бөтөн донъя тәмәкеһеҙ көндәр **(31)** билдәләнә.

**ҺАБАНАЙҘА ТЫУҒАНДАР:**

**6 -** журналист, РФ һәм БР-ҙың атҡаҙанған киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре, республика Хөкүмәтенең Ш.Хоҙайбирҙин премияһы лауреаты **Тәлғәт Шаһмановҡа - 65 йәш** (1959).

**9 -** спортсы, милли көрәш буйынса спорт мастеры, 1991-1992 йылдарҙа Башҡортостан чемпионы, Баймаҡ ҡалаһындағы "Баһадир" физкультура-һауыҡтырыу комплексы директоры **Илшат Хәмитовҡа - 55 йәш** (1969).

**15 -** күренекле ғалим-тарихсы, тарих фәндәре кандидаты, профессор, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Фән һәм техника өлкәһендә БР Дәүләт премияһы лауреаты, Халыҡтар дуҫлығы һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры, Башҡортостан һәм күрше төбәктәр ауылдарының тарихы буйынса китаптар авторы **Әнүәр Әсфәндиәровтың тыуыуына - 90 йыл** (1934-2014).

**18 -** прозаик, журналист, 1988-1995 йылдарҙа БР Яҙыусылар берлегенең идара рәйесе, Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Динис Бүләковтың тыуыуына - 80 йыл** (1944-1995).

**20 -** дәүләт эшмәкәре, иҡтисад фәндәре докторы, 2021-2023 йылдарҙа БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, әлеге ваҡытта 7-се саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары, "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн", Халыҡтар дуҫлығы, Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Илшат Тажетдиновҡа - 55 йәш** (1969).

**24 -** күренекле ғалим-генетик, биология фәндәре докторы, профессор, академик, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Биохимия һәм генетика институты директоры, Рәсәй медицина генетиктары йәмғиәтенең БР бүлексәһе рәйесе, Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Эльза Хөснөтдиноваға - 70 йәш** (1954).

**27 -** Башҡортостандың халыҡ артисы, йырсы, М. Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры артисы **Венер Камаловҡа - 55 йәш** (1969).

**29 -** спортсы, саңғыла йүгереү буйынса Рәсәйҙең спорт мастеры, Рәсәй призеры, өс тапҡыр Башҡортостан чемпионы, Учалы ҡалаһында йәшәүсе тренер, **Бехтерова (Йомағужина) Эльмираға - 50 йәш** (1974).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺЕҘ...

### ? Кешене кеше иткән хеҙмәттең баһалары самалы булып китте түгелме бөгөн, нисек уйлайһығыҙ? Был һеҙҙең ғаиләлә йә туғандарығыҙ араһында сағылыш табамы?

***Ғәлимйән УСМАНОВ, пенсионер, хеҙмәт ветераны:*** Республикабыҙҙағы металлургия йүнәлешле заводтарҙың береһендә 23 йыл фрезлаусы булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡтым. Фрезлаусы металл менән эш итә, әҙерләмәне махсус станокта йышып, ырлап, талап ителгән үлсәмдәрҙә деталдәр етештерә. Ябай эшсе булһа ла ул ниндәйҙер кимәлдә дөйөм белем нигеҙҙәренә эйә буларға тейеш, сөнки был һөнәр чертежды дөрөҫ "уҡый" белеүҙе талап итә, бының өсөн иһә геометрия, черчение нигеҙҙәрен, шулай уҡ металды эшкәртеү теорияһын белергә кәрәк. Тәүҙә өлкән иптәштәрем мине һөнәр серҙәренә өйрәтһә, аҙаҡ үҙемә лә йәш өйрәнсектәр менән эшләргә тура килде. Ошо остазлыҡ эшмәкәрлегем тураһында бер миҫал.

Шулай бер мәл минә йәш кенә бер егетте алып килделәр һәм фрезлаусы һөнәренең "әлеп"тәрен төшөндөрөргә ҡуштылар. Ҡарайым, үҙен бик текә тота был үҫмер. Бер ниндәй эш тәжрибәһе булмаған был йәшелкенсәк, иң беренсе, нисек шундай ҙур заводҡа килеп эләкте икән һуң, тип баш ватам. Ярай, бының кеүектәр минең ҡул аҫтында күп булдылар, бөтәһен дә өйрәтеп сығара торҙом. Күбеһе заводтан тура армия сафына китте һәм хеҙмәт итеп ҡайтҡас, яңынан ошонда килеп эштәрен дауам итә торҙолар. Улар һәр саҡ минең күҙ алдында булдылар, әле лә шулай ир ҡорона инеүҙәренә ҡарамаҫтан, килеп кәңәшләшәләр. Ә инде ҡайһылары ошо уҡ предприятиела төрҙәш һөнәр үҙләштереп, икенсе цехтарға күсһәләр ҙә мине онотмайҙар, килеп хәл-әхүәл белешәләр, рәхмәттәрен әйтеп китәләр - улар өсөн мин бик шатланам һәм киләсәктә лә һынатмаҫынлар өсөн тырышам. Ә инде был малайҙы ла бушҡа яманламаным, сөнки ул заводҡа "блат" менән эләккән булып сыҡты. Ҡыҫҡаһы, эшкә әллә ни барымы булманы. Беренсенән, эшкә бер нисә тапҡыр һуңлап килгәнендә яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алып, уны аралап ҡалырға һәм үҙе менән ныҡ ҡына "ирҙәрсә" һөйләшеп алырға тура килде. Атаһын күреп тә танышып-һөйләшеп алмайынса булманы. Районда ҙур ғына вазифала эшләп, ялға сыҡҡан һәм миңә ҡорҙаш тейешле кешенең иркә генә үҫкән балаһы икәнен белдем. Түләп, Магнитогорскиға уҡырға индергәндәр, ләкин уҡыуын ташлап ҡайтып килгән һәм ярты йыллап уҡымай ҙа, эшләмәй ҙә ятҡан, ә кистәрен оҙаҡҡа юғалып тороп, бер-ике рәт тукмалып ҡайтҡас, насар компаниянан аралау өсөн ошо беҙҙең комбинатҡа урынлаштырғандар. Ни тиһәң дә, комбинаттың урындағы халыҡ араһында абруйы ҙур, уның бай хеҙмәт традициялары бар, бына тиген алдынғы, тырыш йәштәребеҙ күп.

Һәм был баланы миңә ышанып тапшырҙылар. Тимәк, уның киләсәге өсөн мин дә яуаплы булып сығам бит, тинем дә, тотондом быны тәрбиәләргә. Бәхеткә күрә, черчение яратҡан дәресе булып сыҡты бының. Шуның аша эш итергә булдым. Тәүҙә ябай ғына деталдәрҙән башланыҡ. Күрәм: һин дә мин "уҡый" башланы бит деталдәрҙең һыҙмалағы һүрәтләнешен. Аҙаҡ инде эш станокка күсте. Егетте тулыһынса автоматта эшләүсе , йәғни ЧПУ (һанлы программа идараһы менән) станоктар ныҡ йәлеп итте. Йәштәр, ни тиһәң дә, заманса юғары технологияларҙы тиҙ үк төшөнөп тә, отоп та ала - бына шуныһы ҡиммәт. Тик эшләргә теләк кенә булһын да, күңеленә яҡын өлкә булһын. Үҙаллы эшләп сығарған тәүге детале өсөн нисек ҡыуанды ул! Тәүге эш хаҡын алыу ҙа уға ҙур ҡыуаныс булды, ата-әсәһен шатландырып, бүләктәр алып ҡыуандырыуы минең хеҙмәтемә лә ҙур баһа ине. Шулайтып яйлап эштәр алға барҙы. Егетем инде үҙаллы эшләй башлағас ҡына, уға армия сафына повестка килеп төштө, ә мин хаҡлы ялға киттем.

Кәрәк, тиһәләр, әлеләр ҙә әҙермен, сөнки йәштәр менән эшләп, үҙенде лә улар янында йәшерәк, ҡеүәтлерәк, дәртлерәк тояһың. Икенсенән, уларҙы производствоға етәкләп тигәндәй индереп ебәрергә, кәңәштәрең менән ярҙам итергә лә кеше кәрәк бит. Элекке совет осоронда уңыш ҡаҙанған хеҙмәт тәрбиәһе - наставниктар мәктәбе юҡҡа ғына булдырылмағайны шул. Иң мөһиме, йәштәребеҙҙе ҡыҙыҡһындырырға белергә, иғтибарҙарын уларҙың күңеле тартҡан өлкәгә бороп ебәрергә кәрәк, ә былай улар һис тә эштән ҡурҡмай, ҡыҙыҡһыныу бар, ана шуны мәлендә тотоп алып, йүнәлеш биреү мөһим.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## МАҠТАУ КӘРӘК!

# БАШҠОРТ БАЛЫН...



**Башҡорт бал ҡорто һәм башҡорт балы - республиканы танытып тороусы брендтарҙың береһе. Башҡорт балының файҙаһы тураһында әллә күпме хеҙмәттәр яҙылған булһа ла, уның һаман да яңынан-яңы сифаттары асыҡланып тора. Өфө фән һәм технологиялар университеты менән Башҡорт дәүләт медицина университеты әлеге мәлдә ҡыҙыҡлы проект өҫтөндә эшләй. Был фәнни эштең маҡсаты - башҡорт балын микробҡа ҡаршы тәбиғи агент булараҡ өйрәнеү.**

Башҡорт бал ҡорто - ғәжәйеп бөжәк, ул тәүлегенә 17-шәр сәғәт эшләргә һәләтле. Был тоҡомдоң тағы бер үҙенсәлеге - ул һеркәне дарыу үләндәренән йыйыуҙы өҫтөнөрәк күрә. Һөҙөмтәлә, бал ныҡ юғары сифаттарға эйә булып сыға. Әммә башҡорт балы ошо яҡтан насар тикшерелгән. Шуға ла башҡорт балы Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә йыйылған балдан нимәһе менән айырыла һуң, тиген һорау ғалимдарҙы йыш ҡына яңы эштәргә тотонорға этәрә.

Балдың бактерияларға ҡаршы тороусанлығы яғынан ҡарағанда, улар пероксид һәм пероксид булмаған әүҙемлеккә эйә. Башҡорт балының пероксидлы бактерияға ҡаршы әүҙемлеген химия фәндәре докторы, профессор Рифҡәт Фаат улы Талипов етәкселегендәге Өфө фән һәм технологиялар университетының органик һәм биоорганик химия кафедраһы менән медицина фәндәре докторы, профессор Марсель Марат улы Тойғонов етәкселегендәге Башҡорт дәүләт медицина университетының микробиология, вирусология кафедраһы шөғөлләнә. Анализ өсөн башҡорт балының төрҙәре - йүкә, көнбағыш, ҡарабойҙай, бер нисә төрҙән торған ҡандала балы алынды. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, иң пироксидлы әүҙемлеккә көнбағыш балы эйә. Йүкә, ҡандала, төрлө балдар ҡатнашмаһы иһә уртаса әүҙемлек күрһәтә. Ҡарабойҙай балының бактерияларҙы юҡҡа сығарыу сифаты бөтөнләй түбән.

Уҡыу йорттарының был проектына директоры Ревнер Рәфит улы Байтуллин етәкселегендәге Башҡорт Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге Биохимия һәм генетика институты лабораторияһының өлкән ғилми хеҙмәткәре, биология фәндәре докторы Елена Станиславовна Салтыкова ярҙам итә. Был ике учреждение умартасылыҡ өлкәһендә иң әүҙем эшләүселәр, тап улар башҡорт бал ҡортон һаҡлау һәм уның генофондын тергеҙеү йәһәтенән күп көс һала. Ә был проектта иһә башҡорт балының бактерияларға ҡаршы тороусанлығын өйрәнеү экспорт тауары булараҡ "Башҡорт балы" брендын популярлаштырыу өсөн дә бик мөһим.

**Миңлегөл ҠАНСУРИНА,**
**Өфө фән һәм технологиялар университеты доценты, химия фәндәре кандидаты.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров етәкселегендәге делегация Ташкентта "Иннопром. Үҙәк Азия" халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһендә ҡатнашты. Сарала Башҡортостандың Туризмды үҫтереү үҙәге һәм Ташкент өлкәһенең Туризм идаралығы хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Яҡтар Үзбәкстан һәм Башҡортостан туроператорҙары өсөн уҙ-ара мәғлүмәт турҙары үткәреү, белешмә-мәғлүмәт материалдары менән алмашыу, бергәләп туристик маршруттар һәм изге урындарға ғибәҙәт ҡылыу турҙарын әҙерләү тураһында һөйләшеп килеште.

✓2023 йылда Башҡортостан бөтәһе 730 мең тоннанан ашыу агросәнәғәт комплексы продукцияһын экспортҡа сығарған. Был уҙған йылғы кимәлдән 1,8 тапҡырға күберәк. Республика етештереүселәре 44 илгә продукция оҙата. Улар араһында - Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәре, Ҡытай, Һиндостан, Таиланд, Иран, Ираҡ, Сербия, Венгрия.

✓Башҡортостанда 2024 йылда педагогик эшмәкәрлектәге ҡаҙаныштары өсөн иң яҡшы уҡытыусыларға премиялар конкурсына документтар ҡабул ителә башланы. Был хаҡта Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Документтарҙы 13 майға тиклем тапшырырға мөмкин. Конкурста стажы 3 йылдан кәм, эш йөкләмәһе аҙнаһына 18 сәғәттән аҙ булмаған уҡытыусылар ҡатнашырға хоҡуҡлы.

✓Башҡортостандың элекке эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Рөстәм Афзалов "Төбәк фонды" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта 26 апрелдә аҙналыҡ оператив кәңәшмә барышында Радий Хәбиров белдерҙе. "Унда уның белеме кәрәк. "Төбәк фонды"на ошондай энергиялы етәксе, уның уставында яҙылған бурыстарҙы үтәү талап ителә. Шуға күрә был тәғәйенләү өсөн нигеҙ булды", - тине Башҡортостан Башлығы. Рөстәм Афзаловтың 2022 йылдың апреленән билдәгән министр вазифаһын ҡалдырыуы тураһында хәбәр ителгәйне. Ведомство башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп Илнур Тактаев тәғәйенләнде.

✓25 апрелдән "Башҡортостан" милли паркының йылға-күлдәрендә балыҡ торорға ярамай. Был осорҙа балыҡтар ыуылдырыҡ сәсә башлай. Шулай ҙа балыҡ ҡармаҡларға мөмкин, ярҙан тороп бер ҡалҡыуыслы йәки батырғысы ҡармаҡ һалырға ғына рөхсәт ителә, тип асыҡлыҡ индерҙе парк етәкселеге. Ыуылдырыҡ сәсеү участкаларында бөтә төр балыҡ тотоу ҡәтғи тыйыла.

***✓ Башҡортостан Башлығы төбәктең Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә ауыл хужалығы продукцияһын, шул иҫәптән солоҡ балын экспортлау тәжрибәһе булыуы хаҡында һөйләне.***



ҠЫҪҠАСА

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

**23 апрелгә Башҡортостандың ҡайһы бер райондарында дүртенсе класлы янғын хәүефе фаразлана.** Улар - Әлшәй, Бүздәк, Мәләүез, Шишмә райондары, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. "Йыл башынан Әбйәлил һәм Белорет райондарында бөтәһе 1,4 гектар майҙанда ике урман янғыны теркәлгән. Барыһы ла һүндерелгән. Әле янғын осраҡтары юҡ", - тип белдерҙеләр ведомствола. Хәбәр ителеүенсә, 27 апрелдән Башҡортостанда янғынға ҡаршы махсус режим индерелә. Был осорҙа янғын хәүефһеҙлегенә өҫтәмә талаптар ҡуйыла (шул иҫәптән усаҡ ягыу, ҡоро үлән, сүп-сар үртәү тыйыла, граждандарҙың урмандарға барыуы сикләнә һәм башҡалар). Янғын хәүефһеҙлеге талаптарын боҙған өсөн10-20 мең һум штраф ҡаралған.

✓ **Башҡортостанда юл эшселәре ҡайнар асфальт менән соҡорҙарҙы ямау эшенә тотонդо.** Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта асфальт-бетон заводтары асылды. Аҙна һуңына тиклем республика ҡалаларында һәм райондарында тағы 15 асфальт-бетон заводы тулы көскә эшләй башлар тип көтөлә. Тәҙәләш миҙгелендә республикала йөмғеһе 32 завод эшләй, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы үҙенең телеграм-каналында. "Әлегә заводтар эшләмәгән урындарҙа юлдарға һалҡын асфальт түшәйбеҙ. Республика һәм муниципаль-ара юлдарҙағы 17 мең соҡорҙоң 12,5 меңе ямалған. Быйыл ҡыш юл япмаһы һауа температураһы бер түбәнәйеп, бер күтәрелеүҙән ныҡ зыян күрҙе. Йәйләп юлдарҙа тәртип булдырырбыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ **Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығының эпидемиологик күҙәтеү һәм биләмәне санитар һаҡлау бүлеге етәксеһе урынбаҫары Ләйсән Усманова Өфө хакимиәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә миҙгел башынан талпандан тешләнгән 676 кеше, шул иҫәптән 285 баланың медицина ойошмаларына мөрәжәғәт итеүе тураһында белдерҙе.** Әлеге ваҡытта талпан энцефалиты һәм боррелиоз менән ауырыусылар теркәлмәгән. Лабораторияларҙа дүрт энцефалитлы талпан асыҡланған, боррелиоз таратыусылар иһә 11 процент. "Хәҙер парктарҙа, скверҙарҙа һәм башҡа йәмғәт урындарында акарицид ярҙамында эшкәртеү үткәрелә. Планлаштырылған 1000 гектарҙың 80 проценты эшкәртелгән, был эш 1 майға тиклем тамамлана", - тип асыҡлыҡ индерҙе ведомство вәкиле.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МӨМКИНЛЕКТӘР ДОНЪЯҺЫНДА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге рәсми делегация 23-24 апрелдә Дубайҙа "Мөмкинлектәр донъяһы" халыҡ-ара бизнес-форумында ҡатнашты. Был ҙур эшлекле сара эшҡыуарҙар берләшмәһе, власть һәм халыҡ-ара ойошмалар вәкилдәрен берләштерҙе.**

"Форум хаҡлы рәүештә "Мөмкинлектәр донъяһы" тип атала, хәҙерге замандың ысынлап та мөмкинлектәр донъяһы икәнен аңлайбыҙ. Донъяла йөҙәрләгән дәүләт, йөҙәрләгән халыҡ, һәм һәр дәүләт донъя иҡтисадына тос өлөш индерә. Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә юҡҡа ғына килмәнек, беҙ бында партнерҙар эҙләйбеҙ, сөнки, Рәсәй Президенты Владимир Путин әйткәнсә, был ғәрәп донъяһында төп сауҙа партнеры. Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә 6-сы урынды биләй. Былтыр сауҙа күләме биш ярым тапҡырға артты. Беҙ юғары технологиялар, спорт һәм туризм өлкәләрендә бәйләнештәрҙе әүҙем киңәйтәбеҙ. Ошо күләмле форумда ҡатнашыу республикабыҙ өсөн яңы мөмкинлектәр асыр, яңы уртаҡ проекттарға старт бирер, тип ышанам", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Дубайҙа Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренең климат һәм тирә-яҡ мөхит үҙгәреше мәсьәләләре буйынса министры, доктор Амна бинт Абдулла Аль Дахак Аль Шамси менән дә осрашты. Көн тәртибендә - агросәнәғәт комплексының хәләл продукцияһы менән сауҙаны үҫтереү һәм уның өсөн ғәрәп илдәре баҙарҙарына инеү мөмкинлеген киңәйтеү. Әйткәндәй, Башҡортостан етештереүселәре Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып "Хәләл" стандарты буйынса Рәсәй сифат системаһында сертификация үтте. Башҡортостан Башлығы төбәктең Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә ауыл хужалығы продукцияһын, шул иҫәптән солоҡ балын экспортлау тәжрибәһе булыуы хаҡында һөйләне. Республиканың иген, һыйыр ите, үҫемлек һәм рапс майы, бал буйынса экспорт ҡеүәте ҙур, тип өҫтәне Радий Хәбиров. Амна бинт Абдулла Аль Дахак иһә Башҡортостан делегацияһына сәфәре өсөн рәхмәт белдерҙе һәм инвестиция йәлнәтенән хеҙмәттәшлеккә, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау һәм ауыл хужалығы продукцияһын етештереү өлкәһендә уртаҡ ғилми тикшеренеүҙәргә ҡыҙыҡһыныу белдерҙе.

# ҠАРАҒАЛПАҠТАР МЕНӘН...

**Республикабыҙ Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров етәкселегендәге рәсми делегация Ташкентта "Иннопром. Үҙәк Азия" халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһендә ҡатнашты.**

Сарала Ҡарағалпаҡстандың (Үзбәкстан) Министрҙар советы менән Башҡортостан Хөкүмәте араһында 2024-2026 йылдарға иҫәпләнгән хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса "юл картаһы" төҙөлдө. Документка Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров һәм Ҡарағалпаҡстандың Министрҙар советы рәйесе Фарход Эрманов ҡул ҡуйҙы. Был документ ике республика араһында сауҙа-иҡтисади өлкәлә, сәнәғәттә, агросәнәғәт комплексында, шулай уҡ хеҙмәт һәм социаль яҡлау, мәғариф, мәҙәниәт һәм туризм, йәштәр сәйәсәте, физик культура һәм спорт, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау һәм тәҙәләш өлкәләрендә хеҙмәттәшлекте нығытыуҙы күҙ уңында тота. Ҡарағалпаҡстан - Башҡортостан өсөн яҡын һәм туған төбәк, тип билдәләне Андрей Назаров. Башҡорттар менән ҡарағалпаҡтар этномәҙәни яҡтан бер-береһенә бик яҡын. Арал диңгеҙенең көньяҡ ярында бөгөн дә күптән бында күсеп килгән һәм ҡарағалпаҡтар менән туғанлашҡан башҡорт нәҫелдәре йәшәй. "Сәнәғәт кооперацияһын тәрәнәйтеү һәм уртаҡ предприятиелар булдырыу менән ҡыҙыҡһынабыҙ, - тип белдерҙе Башҡортостан Премьер-министры. - Беҙҙең республика - үҫешкән агросәнәғәт комплексы булған төбәк. Башҡортостандан Үзбәкстанға тоҡомло малдар, шәкәр, көнбағыш майы оҙатыла. Үзбәкстандан беҙ емеш-еләк һәм йәшелсә килтерәбеҙ".

Ҡарағалпаҡстандың Министрҙар Советы рәйесе Фарход Эрманов яңы бизнес-бәйләнештәр булдырыу, республикалар араһында тауар әйләнешен арттырыу менән ҡыҙыҡһыныуын белдерҙе. Әле үк ике республика араһында үҫемлекселектә, мелиорацияла һәм малсылыҡта тәжрибә уртаҡлашыу әүҙем барыуы, Үзбәкстандың ауыл хужалығы өсөн биоөҫтәмәләр һәм ашламалар менән тәьмин итеү буйынса үҙ-ара файҙалы сауҙа мөнәсәбәттәре дауам итеүе билдәләнде.

# ДИКТАНТ ЯҘҘЫЛАР...

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Геройы М. Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башҡорт теленән халыҡ-ара диктантта ҡатнашты. Уның менән бергә Белорет һәм Мәләүез райондарынан хәрби йыйынға килгән 10-сы класс уҡыусылары, 10 мәктәп директоры һәм акцияға нигеҙ һалыусылар яҙҙы. Диктант тексын Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев уҡыны.**



Был халыҡ-ара мәғариф акцияһы Башҡортостанда, Рәсәй төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә туған телде өйрәнеүгә киң йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү, тел мәҙәниәтен күтәреү, башҡорт телен таныту һәм популярлаштырыу маҡсатында ойошторола.

- Бөгөн беҙ унынсы тапҡыр башҡорт теленән диктант яҙырға йыйылдыҡ. Был бик мөһим сара, йылдан-йыл диктант яҙыусылар һаны арта. Уны Рәсәйҙең күп кенә төбәктәрендә, хатта сит илдәрҙә яҙалар. Быйыл текстар патриотлыҡ, йәштәр, ғаилә темаһына арналған. Диктантты уңышлы яҙырһығыҙ, тип ышанам. Туған телде шулай һаҡлайыҡ, үҫтерәйек, - тине республика Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Азат Бадрнов, акцияла ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, акция тәүге тапҡыр 2015 йылда Башҡорт дәүләт университетында ойошторолдо. Идея авторы - ул сакта университеттың уҡытыусыһы Рәшиҙә Мәһәҙиева (хәҙер "Ватандаш" журналының баш мөхәррире). Был башланғысты шәрҡиәт һәм башҡорт тел гилеме кафедраһы мөдире Гөлфирә Абдуллина, башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы Риф Әхмәҙиев һәм университет ректоры Николай Морозкин хупланы. Бөгөн улар Башҡортостан Башлығының Рәхмәт хаттары менән бүләкләнде.

2019 йылдан акция халыҡ-ара кимәлгә сыҡты. Шул йылда 69 687 кеше диктант яҙһа, 2023 йылда иһә 340 333 кеше, улар араһында 14 327-һе - Рәсәй төбәктәренән, ә 1298-е - сит илдәрҙән ҡатнашыусылар булған (Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Төркиә, Канада, АҠШ, Ҡытай, Тажикстан, Германия, Бөйөк Британия, Испания, Италия, Польша, Иран, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Аргентина, Индонезия). Быйылғы диктант текстарының авторҙары - шағирә, тәржемәсе, журналист, "Аҡбуҙат" журналы мөхәррире Лариса Абдуллина, прозаик, шағир Мөнир Ҡунафин, уҡытыусы, тыуған яҡты өйрәнеүсе Зифа Илбахтина.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Хакимиәттә Өфөнөң тарихи үҙәгендә Октябрь революцияһы урамын төҙөкләндереүгә бәйле сикләү тураһында иҫкә төшөрҙөләр. 24 апрелдән 3 майға тиклем Совет урамында Октябрь революцияһы менән сиктәш участкала хәрәкәт ябыла. Бынан тыш, Октябрь революцияһы һәм Ленин урамдары сатында транспорт хәрәкәтен сикләү 11 майға тиклем оҙайтыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, әле Ленин урамында иң ситтәге ситке һул һыҙаттар ябылған. Октябрь революцияһы урамында төҙөкләндереүҙең икенсе этабы бара. Эштәр 2025 йылдың ноябрендә тамамланырға тейеш.

✓2024 йылда "Үлемһеҙ полк" акцияһы онлайн рәүештә уҙғарыла. Был турала хәрәкәт штабы рәйесе Елена Цунаевага һылтанма менән РИА Новости хәбәр итә. Йәмғәт именлеге өсөн Рәсәй ҡалалары урамдары буйлап традицион йөрөш ойошторолмай, тип белдерҙе ул 2024 йылда "Үлемһеҙ полк" акцияһы форматтарына арналған матбуғат конференцияһында. Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостанда Еңеү көнөндә салют булмай.

✓Өфөлә 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 79 йыллығына арналған "Георгий таҫмаһы" Бөтә Рәсәй патриотик акцияһы башланды. Баш ҡаланың йәштәр эштәре буйынса комитетында белдереүҙәренсә, Георгий таҫмаһын ҡаланың һәр районында алырға мөмкин. "9 майға тиклем әүҙемселәр ҡаланың төп урамдарында, парктарҙа һәм сауҙа үҙәктәре янында хәтер символын тарата", - тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтендә. Ирекмәндәр өфөләргә таҫманы нисек дөрөҫ тағып йөрөргә кәрәклеген дә аңлата. Уны йөрәк тәңгәлендә генә тағырға рөхсәт ителә. Георгий таҫмаһы - хәрби дан символы, еңеүселәрҙең ҡаһарманлығына хөрмәт билдәһе.

✓Башҡортостандың перинаталь үҙәге Рәсәйҙә иң яҡшыларҙың береһе тип танылды. Республика клиник перинаталь үҙәгенең Дисциплинар-ара репродуктив медицина белгестәре ассоциацияһы версияһы буйынса "Волга буйы федераль округының акушер-гинекология профилендәге иң яҡшы медицина ойошмаһы-2023" исеменә конкурста "III кимәлдәге иң яҡшы акушерлыҡ стационары" номинацияһында беренсе урын яулауы билдәле булды. Номинанттарҙы 18 апрелдә IX "Рәсәйҙең репродуктив потенциалы: Ҡаҙан уҡыуҙары" Дөйөм Рәсәй конгресы барышында бүләкләйҙәр.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# АЙЫҒАБЫҘМЫ?

**Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында "Айыҡ ауыл" республика конкурсы еңеүселәрен бүләкләнеләр. Конкурстың төп маҡсаты - айыҡ һәм сәләмәт йәшәү рәүешен популярлаштырыу, халыҡты йәмәғәт эшмәкәрлегенә ылыҡтырыу, яҡшы ғәмәлдәргә рухландырыу. Сара Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты иҫәбенә һәм төбәк хөкүмәте булышлығында тормошҡа ашырыла.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ул 2019 йылда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башланғысы менән ҡабаттан тергеҙелде. Ошо осорҙа 39 ауыл еңеүсе булды. 2019 йылдан алып унда бөтәһе 3 мендән ашыу ауыл, 30 меңгә яҡын әүҙемсе һәм мендән күберәк ирекмән ҡатнашҡан.

Йылдан-йыл конкурс популярлыҡ яулай бара. Башҡортостан тәжрибәһе менән күрше төбәктәр: Удмурт Республикаһы, Татарстан, Яҡутстан, Һарытау, Свердловск, Ырымбур, Силәбе өлкәләре, Пермь крайы ла ҡыҙыҡһына. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытколова һүҙҙәренсә, конкурстың төп һеҙөмтәһе - ауылдарҙағы ыңғай күренештәр. Конкурста ҡатнашыу һәм еңеү ауыл халҡының йәшәү рәүешен үҙгәртә, уларҙың мәҙәни сараларға, спортҡа ҡыҙыҡһыныуы арта, алкоголгә тартылыу кәмей. Ә иң мөһиме - халыҡ татыуыраҡ йәшәй башлай.

**2024 йылда "Айыҡ ауыл" республика конкурсы еңеүселәре:**
"Әре тораҡ пункттар" номинацияһында:
- I урын - Бөрйән районы Байназар ауылы;
- II урын - Иглин районы Ҡалтыман ауылы;
- III урын - Учалы районы Сәфәр ауылы.

"Ҙур тораҡ пункттар" номинацияһында:
- I урын - Йәрмәкәй районы Әбделкәрим ауылы;
- II урын - Салауат районы Әлкә ауылы;
- III урын - Янауыл районы Байғужа ауылы.

"Урта тораҡ пункттар" номинацияһында:
- I урын - Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылы;
- II урын - Ауырғазы районы Степановка ауылы;
- III урын - Тәтешле районы Сорғолдо ауылы.

"Бәләкәй тораҡ пункттар"номинацияһында:
- I урын - Асҡын районы Төлгәзбаш ауылы;
- II урын - Саҡмағош районы Иҫке Ихсан ауылы;
- III урын - Стәрлебаш районы Түбәнге Аллағыуат ауылы.

Алты миллион күләмендәге приз "Ҙур тораҡ пункттар" номинацияһы еңеүсеһенә тапшырыла. Башҡа номинацияларҙа еңеүселәргә иһә 5, 4 һәм 3 миллион һум аҡса, бүләктең суммаһы ауылдың ҙурлығына ҡарап билдәләнә.

Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

# ЭШКӘ ЯРАҠЛЫЛАР КҮПМЕ?



**Май байрамдары алдынан 2023 йылда республиканың эшләп йөрөүсе халҡы хаҡында яңы мәғлүмәттәр билдәле булды.**

Башстат мәғлүмәттәренә ярашлы, былтыр 1,902 миллион кеше хеҙмәт эшмәкәрлеге менән шөғөлләнгән. Уларҙың 1,255 миллионы ҡалала, 648 мең кеше ауыл ерендә эшләй. Эшләүселәр араһында ирҙәр күберәк - 1,017 миллион, ҡатын-ҡыҙҙар - 885 мең. 17,7 процент кеше сауҙа өлкәһендә, шулай уҡ эшкәртеүсе сәнәғәттә (16 процент). Мәғариф өлкәһендә - 9,2 процент, төҙөлөштә - 9 процент, фәйҙалы ҡаҙылма байлыҡтар өлкәһендә 8,2 процент, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә 6,7 процент халыҡ эшләй.

Дөйөм алғанда, эшкә яраҡлы халыҡтың 57,4 проценты эшләй. Уларҙың 1,467 миллионы ойошмаларҙа тир түгә, 309 меңе (16,2 проценты) физик шәхестәргә, шәхси эшҡыуарҙарға, фермер хужалыҡтарына ялланған. Шәхси эшҡыуарлыҡ өлкәһендә юридик белеме булмағандарҙың һаны 114 мең (6 процент). Үҙ хужалығында мал тотоп, урман хужалығынан, һунарсылыҡтан, балыҡсылыҡтан табыш алыусылар 13 мең кеше (0,7 процент).

Эшкә ярақлыларҙың уртаса йәше 41 йәш. 30 йәшкә тиклемге йәштәрҙең һаны 15,8 процент тәшкил иткән. Күптәрҙең һөнәри белеме бар - 86,3 процент. Уларҙың 30,8 проценты юғары белемле, урта звено белгестәре әҙерләү һөнәри программаһын 27,8 проценты үткән, квалификацияны белгестәр әҙерләүсе махсус программалар буйынса белем алыусылар - 27,7 процент.

2023 йылда эшһеҙҙәр 45 мең кешегә еткән, был эшкә яраҡлыларҙың 2,3 проценты. Уларҙың 23, 7 проценты 30 йәшкә тиклемгеләр. Күп эшһеҙҙәрҙең һөнәри белеме бар. Иҫәпләүҙәр буйынса, былтыр эшләп йөрөүсе кешенең уртаса айлыҡ эш хаҡы 56 720 мең булған. Ҡулланыусылар индексын иҫәпкә алып, 2023 йылда 2022 йыл менән сағыштырғанда эш хаҡы 10,3 процентҡа артҡан. Иң юғары эш хаҡы ҡаҙылма байлыҡтар табыу эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеүселәрҙеке - 89 504 мең һум. Иң түбәне ҡунаҡханалар эшмәкәрлеге һәм йәмәғәт туҡланыуы предприятиеларында - 32 710 мең һум.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠАЛА КҮРКЕ БУЛҒАН...

## фонтандар терелде



**Өфөләрҙең һәм ҡала ҡунаҡтарының яратҡан урындары тағы ла күркәмләнде был аҙнала, сөнки баш ҡаланың күпселек фонтандары эшләй башланы. Йәғни Театр скверындағы "Ете ҡыҙ", шулай уҡ Совет майҙанында, Мостай Кәрим скверында һәм Өфөнөң башҡа урындарындағы фонтандар һыу бөркә башланы.**

Фонтандарҙы асыу үҙе бер тантанаға әйләнде, сөнки улар артистарҙың сығыштары, музыка һәм бейеү менән оҙатып барылды. Театр скверындағы "Ете ҡыҙ" фонтаны сағыштырмаса яңы эшләнеүенә ҡарамаҫтан, барыһының яратҡан ял итеү урыны. Матур, үҙенсәлекле фонтанды асыу тантанаһы ла, ғәҙәттәгесә, сағыу булды. Ҡунаҡтар алдында фонтан ҡыҙҙары "терелеп", бейергә төштө. Легендар "Ете ҡыҙ" бейеүен Сауҙа-иҡтисад колледжы уҡыусылары - "Талария" халыҡ бейеүҙәре ансамбле тәҡдим итте. Шулай уҡ "Мираҫ"тарҙың музыкаль сәләме лә биҙәне был матур ваҡиғаны.

Салауат Юлаев майҙанындағы фонтандың асылыуы һәр саҡ көтөп алынған ваҡиға. "Ҡурай" фонтанын асыу тантанаһында Өфө сәнғәт училищеһы һәм ҡаланың музыка мәктәптәренең йыйылма ҡурай ансамбле менән Өфөнөң башҡа ижади коллективтары сығыш яһаны.

Совет майҙанынан да хәҙер йыл дауамында кеше өҙөлмәй. Ә көндәр йылынып, фонтан эшләй башлағас инде, майҙан иртәнән кискә тиклем балаларҙың шат тауыштарынан гөрләп тора. Шуға күрә бында урынлашҡан үҙенсәлекле, һәр яҡлап уйланылып эшләнгән, ҡаланы биҙәп тороуҙан тыш, эҫе йәйге көндәрҙә айырым бер мөхит булдырған фонтандың асылыуы ла көтөп алынған ваҡиға булды.

Мостай Кәрим скверындағы фонтанға символик стартты шағирҙың ҡыҙы Әлфиә Кәримова бирҙе. Үҙ сығышында ул был урындың уның өсөн ни тиклем ҡәҙерле һәм әһәмиәтле икәнлеген билдәләне. Был байрам тантанаһында ла билдәле йырсыларҙың, балалар музыка мәктәптәре уҡыусыларының һәм башҡа ижади коллективтарҙың сығыштары алҡыштарға күмелде. Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артистары башҡарыуындағы "Беҙҙең өйҙөң йәме" спектакленән өҙөк йыйылыусылар тарафынан йылы ҡабул ителде.

Өфө үҙәгендәге Ленин исемендәге майҙандағы "Сәғәт" фонтаны ла ағымдағы миҙгелен асты. Быйыл әлеге фонтандың эшләй башлауына 5 йыл булды.

Шулай уҡ 26 апрелдә "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркындағы мультимедиалы музыкаль фонтан асылды, ә 1 майҙа "Беренсе май" мәҙәниәт һәм ял паркындағы, "Имәндәр" скверындағы "Бейеүсе торналар" фонтандары эшләй башланы. Яҙ һәм хеҙмәт байрамында өфөләр шулай уҡ "Беренсе май" паркында "Өфө - дуҫлыҡ һәм берҙәмлек ҡалаһы" милләттәр мәҙәниәте фестивалендә ҡатнашты.

Фонтандарҙың эшләй башлауы йылы миҙгелдең килеүен билдәләүсе ҡыуанысты ваҡиға. Улар ҡалаға айырым бер тәҫ бирә, биҙәп тора. Өфөбөҙҙәге фонтандар янында ла көҙгә һалҡындарға тиклем һәр кем ял итә, матурлыҡҡа һоҡлана алаsаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Быуындар шешһә

❖ Быяла һауытты ваҡланған әрем һабаҡтары менән тултырып, бер аҙ һендерә баҫырға һәм өҫтөнән 5-6 сантиметр сыҡҡансы араҡы ҡойорға. Шунан 3 аҙна ҡараңғы урында төнәтергә, ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп болғатып торорға. Шунан ҡара быялалы шешәгә һөҙөп ҡойоп алырға. Йәшкелт һоро төҫтәге, хуш еҫле төнәтмә килеп сыға. Дауаға бер нисә ҡатҡа бөкләнгән марля киҫәген сылатып, ауыртҡан урындарҙы уыурға. Төнәтмәне һалҡын урында һаҡларға. Һөҙөп алынған ҡалдыҡтарын ташлап ҡуймаҫҡа: һыҙлаған урынға башта тирене яндырмаһын өсөн кизе-мамыҡ туҡыма киҫәге ҡаплап, өҫтөнә үләнде йәйеп бәйләргә була.

### Ҡабаҡ

❖ Биттә пигмент таптары булған осрақта сей ҡабаҡ орлоҡтары һәм һыуҙы 1:1 нисбәттә килеләтәйөргә, килеп сыҡҡан иҙмәгә бал ҡушырға. Шуны биткә һыларға һәм ярты сәғәт тоторға. Бит таҙарғансы эшләргә.

❖ Яман шеш (рак) булғанда көнөнә 1-2 стакан ҡабаҡ һутын эсергә, ә йомшағын (мякоть) шешкә ҡаплайҙар. Яман шеш осрағында ҡабаҡ сәскә атҡан мәлдә көн һайын һеркәле 3-4 сәскәһен бер юлы ашарға кәңәш ителә.

### Грипп

❖ Был ауырыуҙы иҫкәртеү өсөн шундай халыҡ әмәле бар: 3 баш һуғанды ваҡ ҡырғыс аша үткәреп, өҫтөнә 300 гр ҡайнатылған йылы һыу ҡойорға һәм ауыҙы ныҡлы ябыҡ һауытта 7 сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 3 таҡҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ярты стакан эсергә. Шулай уҡ ауырыу үҙен яңы һиҙҙерткән осорҙа һәр 2-3 сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ һуған һуты эсеү файҙалы. Балаларға һуған һутына бал ҡатыштырып (1:1) бирергә мөмкин. Шулай уҡ көн һайын иртәнге аштан ярты сәғәт алда бер теш һарымһаҡ ашау ҙа файҙалы.

### Ҡан баҫымы

❖ Ҡыҙыл сөгөлдөр һутына яртылаш бал ҡушырға һәм көнөнә 7 таҡҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һар**

**(Обыкновенный канюк (сарыч)**





Иң билдәле эре йыртҡыс ҡош. Ҡанат йәлпеүе 1 метрға етә. Һоро төҫтә, кәүҙәһенең аҫҡы өлөшө асығыраҡ һәм аҡһыл һыҙатлы. Ҡойроғо ла арҡыры буйҙар менән биҙәлгән. Ҡабырғаларында ҙур таптары бар, йәниһә ҡараҡ төҫтә арҡыры һыҙат үтә. Осҡан саҡта ҡанаты аҫтан ҡараҡ төҫтә булып күренә.

Һыҙып-һыҙып ҡысҡыра, "кьяааа" йәки "ияаааа" кеүегерәк ишетелә.

Евразияның төньяғы буйлап таралған. Беҙҙең төбәктә лә осрай. Иң ғәҙәти йыртҡыс ҡош булараҡ беләләр. Ҡар иреп бөтөү менән үк осоп килә лә, оя ҡора. Ҡош туйы осоронда ата һар һауала тауышланып үҙенә иғтибар йәлеп итә. Ояларын ботаҡтарҙан ҡороп, үлән менән түшәйҙәр. Инә һар 1-5 йомортҡа һала, шулай ҙа уларҙың һаны йышыраҡ 2-4 була, төҫө бысраҡ аҡ. Икәүләп сиратлап баҫалар, был осор 28-35 көнгә һуҙыла. Ата ҡош инә ҡошто ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына алыштыра, инәне ашатыу тулыһынса уның өҫтөндә. Бәпкәләр ҙурая башлағас, инә һар ҙа һунар итә башлай. Кешеләрҙең үҙҙәренә яҡын килеүенән артыҡ һиҫкәнмәйҙәр. 6-7 аҙналыҡ йәш ҡоштар ояны ташлап китә. Араларында каннибализм да осрай. Ҡыр сысҡаны, ваҡ йәнлектәр менән туклана. Шулай уҡ тәлмәрйен, кеҫәртке, ҡош бәпкәләре, бөжәктәр, селәүсен, моллюскыларҙы ла ашай. Ҡорбанын һауала осоп күҙәтә. Ҡуйы урманда һунар итмәй. Сентябрҙә йылы яҡҡа оса, шулай ҙа ҡайһы берҙәре октябргә тиклем ҡала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ХӘТЕРЛӘП...

# "ТЫНЫСЛЫҠ! ХЕҘМӘТ! МАЙ!"

## Был һүҙҙәр ҡоро лозунг ҡына булманы бит

**(Башы 1-се биттә).**

Нисек кенә булмаһын, ул саҡтағы хужалыҡ системаһы хеҙмәт кешеһен, хеҙмәт кадрҙарын алғы сафҡа сығарҙы, был ауыл хужалығында ла, сәнәғәттә лә берҙәй мөһим мәсьәлә итеп ҡаралды. "Кадрҙар бөтәһен дә хәл итә!" тигән лозунг көн үҙәгендә тотолдо, барса уҡытыу-тәрбиә системаһы хеҙмәт тәрбиәһен һәм иртә һөнәри йүнәлеш биреүҙе шәхес формалаштырыуҙың төп принциптарының береһе итеп ҡабул итте. Колхоз һәм совхоздар, йөҙәр меңләгән төрлө кимәлдәге сәнәғәт предприятиелары эшсе кадрҙарына ҡытлыҡ кисермәне. Советтар Союзының иң төпкөлдәге район-ҡалаларында ла төрлө эшсе һөнәрҙәренә өйрәнеп була торған махсуслаштырылған ауыл һәм ҡала профессиональ-техник училищелары асылды. Миллионлаған үсмерҙәр, тулыһынса дәүләт тәьминәтендә уҡып, һөнәри белем алыу мөмкинлеген алды. Бер ниндәй ҙә конкурс булманы уларға уҡырға инер өсөн - тик теләгең генә булһын. Күп йылдар үткәс, мин ошо башланғыс һөнәри белем биреү системаһын дәүләттең иң уңышлы, иң һөҙөмтәле проекты булғандыр тим, ә бит ул тиҫтәләрсә йылдар буйына ғәмәлгә ашырыла килде.

Йәнә шул да иҫкә төшә. Ул күптән үткән йылдарҙа һәр мәктәптең, урта һәм юғары һөнәри белем биреүсе уҡыу йорттарының үҙҙәренә тәғәйенләнгән ер эшкәртеү участкалары, йәшелсә-емеш баҡсалары булды. Йәйге каникулдарҙа миллионлаған мәктәп уҡыусылары, студенттар ошо баҡсаларҙа ихлас эшләне, дөйөм коллектив хеҙмәткә үҙ өлөшөн индерҙе. Әле лә хәтерләйем: сентябрь айының ҡояшлы бер көнөндә, башланғыс класта уҡыған сағымда, беҙгә уҡытыусыбыҙ мәктәп баҡсаһында үҫтерешкән кишерҙәрҙе өләшеп бирҙе - ни эшләптер ошо кишер үҙ баҡсабыҙҙа үҫкәненә ҡарағанда күпкә тәмлерәк булып тойолдо.




Ә урта мәктәптәрҙең тик уҡыусы балаларҙан торған хеҙмәт бригадалары! Улар хаҡында Мәскәүҙә сыға торған гәзиттәрҙә һоҡланғыс һүрәтләмәләр, очерктар баҫыла ине. Улай ғына ла түгел, ошондай мәктәп бригадаларының слеттары ла шаулап-гөрләп үтеүе хәтерҙә ҡалған. Ә студент йылдары хеҙмәттән айырылғыһыҙ булды. Студент төҙөлөш отрядтары хәрәкәте оҙаҡ йылдар буйына миллионлаған совет студенттары ихлас ҡатнашҡан ғәмәли хеҙмәт практикаһына әүерелгәйне. Шәхсән үҙемдең хәтеремдә 1975 йылдың эҫе йәйе Красноярск крайының Ангаралағы Стрелка поселогында мәктәп бинаһын төҙөү барышындағы удар хеҙмәт семестры булып, бөтмәҫ-төкәнмәҫ хәтирәләр ҡалдырҙы. Студенттар ауыр хеҙмәттең татлы емештәрен дә татыны ул саҡта - төҙөлөш отрядында эшләгәнемдең әжере 500 һум совет аҡсаһына тиң булды - студенттың төшөнә лә инмәгән килем бирҙе ябай, әммә ауыр эш башҡарыу. Матди яғы ғына түгел, тәрбиәүи һөҙөмтәләре лә тәрән һәм киң булды ошондай системаның. Ни эшләйһең, хәҙер ошо хаҡта һағынып һөйләргә генә ҡала. Шуға күрә мәктәптәребеҙҙә хеҙмәт тәрбиәһен тергеҙеү буйынса яңы ғына башланып торған эштәрҙе ихлас күңелдән хупларға ғына ҡала.

Йәнә бына ни әйтер инем. Халҡыбыҙҙың алтындай саф аңында хеҙмәтте маҡтаған үә данлаған әйтем-мәҡәлдәр байтаҡ яралған. Шуларҙың береһе - хеҙмәтенә күрә емеше. Еңенде һыҙғанмайынса, зиһенеңде кирмәйенсә, тир түкмәйенсә хәләл ризыҡ та табылмай, ҡыҙыл мал да ишәймәй. Тырышып эшләп тапҡаның татлыраҡ, хеҙмәт емештәренде татыу ләззәтләрәк була.

Йәмғиәт кенә түгел, дәүләт тә ябай кешенең хеҙмәт фиҙаҡәрлегенә юғары баһа бирә белде. Маҡтау грамоталары, орден-миҙалдар, хөрмәт таҡталары, махсус исемдәр, вәкәләтле власть органдарында депутат итеп күтәреүҙәр, ял йорттарына бушлай юлланмалар - һанай китһән, тырыш һәм уңған хеҙмәт алдынғыһын тағы әллә күпме юл-ысулдар менән күтәрмәләй инеләр бит! Хәҙерге осорҙа совет заманына ниндәй генә баһа бирмәһендәр, хеҙмәтсәндәрҙе матди һәм рухи ҡыҙыҡһындырыу уларҙы үҙ өлкәләрендә яңынан-яңы маҡсаттар ҡуйырға, яңы алымдар уйлап табырға, шәхес булараҡ үҫергә булышлыҡ итте. Бына минең тыуған ауылым Иҙристә һуғыш ветераны Хәйбуллин Ғәйнулла бабайҙың Ғәзимулла тигән улы бар ине. Әрме хеҙмәтенән ҡайтҡас, ул Өфө ҡалаһында "Гидравлика" заводында токарь булып эшләй. Хеҙмәт алдынғыһы, уның самолет двигателдәре частарын етештереү буйынса рационализаторлыҡ тәҡдимдәре һәм алымдары Советтар Союзының авиация сәнәғәтендә киң ҡулланыла. Һөҙөмтәлә уға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә, шулай уҡ уны БАССР-ҙың етенсе саҡырылыш Юғары Советы депутаты итеп һайлайҙар.

Әүәл 1 Май совет кешеләренең яраткан байрамдарының береһе булды. Урам тулы халыҡ, демонстрация барышында колонналар тулҡын-тулҡын булып ағыла, ҡыҙыл әләмдәр, транспаранттар, күп кешеләрҙең ҡулдарында төрлө төҫтәрҙәге сәскәләр, репродукторҙарҙан дәртле марштар яңғырай, уға завод хеҙмәтсәндәренең тынлы оркестрҙары ҡушыла. "Тыныслыҡ! Хеҙмәт! Май!" - ул заманда ошо һүҙҙәр ҡоро лозунг ҡына булманы. Тормошобоҙ асылы шулай булды. Хәҙер ҙә ошо һүҙҙәрҙе ҡаттан-ҡат ҡабатлағы килә - тыныс хеҙмәт кенә киләсәк һәр бер яҙҙы, тыуасаҡ һәр бер майҙы ҡыуанyслы һәм бәхетле итә ала.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

**"Бер осрашыу - үҙе бер ғүмер" тип юҡҡа әйтмәгән халҡыбыҙ. Борон-борондан ҡор йыйып, изге башланғыстарға нигеҙ һалғандар, яуланған ҡаҙаныштар аша киләсәккә күҙ һалғандар. Хәйбулла районы халҡы ла ошо күркәм йолаға тоғро. 16 майҙа Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында бик йөкмәткеле саралар ҙы үҙ эсенә алған "Тамырым - Хәйбулланан" тип аталған яҡташтар осрашыуы ойошторола. Әле был осрашыуға ҡыҙыу әҙерлек бара. Беҙ иһә ошо уңайҙан Хәйбулла районы хакимиәт башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Роза Раузат ҡыҙы РӘСЕМБӘТОВАға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



# БЫЛ ФИҘАҠӘРЛЕК...

## юҡҡа сыҡҡанмы?

**➔ "Беренсе Май - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы" тигәнде бәләкәйҙән ишетеп үҫтек, ул ҡасан ғына әле алда торған оло эштәргә фатиха биргән көн дә ине. Заман үҙгәрә, тиҙәр. Роза Раузат ҡыҙы, ә бөгөн халыҡтың хеҙмәт фиҙаҡәрлеге тураһында нимә әйтергә була, был төшөнсә үҙгәрешкә дусар ителәме, юҡмы?**

- Хеҙмәт фиҙаҡәрлегенең йәмғиәттә түгел, ғаиләләрҙә юҡҡа сыға барыуы ҡурҡыта әле. Керле кейемде, ҡашығаяҡты машина йыуа, һыу ташыу-түгеү онотолған, тукмас йәйеү, ойоҡ бәйләү тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Шулай булғас, беҙҙең заманда 1 майҙы өй йыуып-аҡлап ҡаршы алмағас, уның төҫө лә икенселер ул - был төшөнсә үҙгәрешкә дусар ителә, әлбиттә. Хеҙмәт физик төшөнсәгә генә әйә булмаһа ла, беҙҙең генетик хәтер ошо осорҙо тирә-яғынды тәртипкә килтереп, тормоштоң яңы этабын башлауҙы иҫләй. Хәҙер субботниктар күберәк матур фото төшөрөү өсөн генә кеүек. Шулай ҙа ауылдарҙа күмәкләп йылға буйҙарын таҙартыу, зыяратты кәртәләү эштәре был төшөнсәнең барлығын күрһәтәләр. Күмәкләп башҡарған эштәр - рухи байыу сығана-

✓ *Унда Византия императоры Феодосий II дәүерендәге, б.э. V быуатына ҡараған алтын тәңкә табылған. Өфө-II ҡаласығының иртә датаһын билдәләү йәһәтенән ошо тәңкә бәхәсһеҙ раҫлау дәлиле булып ҡабул ителергә тейеш.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Алтынсы бүлек. Башҡорт - урта быуаттарҙағы Башҡортостандың баш ҡалаһы.

Күрәһең, өҫтәрәк бәйән ителгән ҡәберлектәр районында 1828 йылда тағы ла бер бай ҡурған емертелгән, унда Византия императоры Феодосий II дәүерендәге, б.э. V быуатына ҡараған алтын тәңкә табылған. Уның нисек табылыуы һәм ҡәберлектә башҡа табылдыҡтар булыу-булмауы билдәле түгел, әммә ошо тәңкә тураһында ул ваҡытта сыҡҡан бер академик баҫмала ышаныслы мәғлүмәт бар. Өфө-II ҡаласығының иртә датаһын билдәләү йәһәтенән ошо тәңкә бәхәсһеҙ раҫлау дәлиле булып ҡабул ителергә тейеш, әммә әлегә тиклем белгестәр тарафынан уның әһәмиәте тейешле кимәлдә баһаланмаған. Ошондай шарттарҙа беҙ бында ошо хаҡта 1837 йылда баҫылған сығанаҡтан тулы мәғлүмәт килтерергә мәжбүр булдыҡ, ул "Труды и летописи общества истории и древностей российских. Ч. 8. М., 1837" тигән баҫманан алынды:

"Письмо его Высокопреосвещенства Киевского Митрополита Евгения, к его превосходительству, господину Председателю. ... присем прилагаю еще золотую монету Константинопольского Императора Феодосия Юнейшаго, доставленного мне Преосвященным Амвросием, в первых числах сего Марта проезжавшим через Киев из Уфы в Житомир. Монета сия, в сем экземпляре очень хорошо сохранившаяся, известна нумизматикам; но для нас она замечательна тем, что, по сказанию упомянутого Преосвященнаго, найдена в городе Уфе прошлого года в августе месяце, при рытии канавы для фундамента под каменный дом между костями человеческими и конскими и железными вещами, конской сбруе принадлежащими, и при них отрыты соколиные когти. Сию находку предоставляю я кабинету Общества. Киев. 20 марта 1829. Его превосходительству Александру Александровичу Писареву". XX быуаттың 50-60-сы йылдарында Өфө территорияһында емертелгән ҡәберлектәрҙең береһендә башаҡлы массив алтын сылбыр табыла. Ер эштәре барышында уны бульдозерист-тракторист тапҡан була, тик уны бронза сылбыр тип уйлап, инструменттары араһына ташлап ҡуя. Ошо гәзити булмаған сылбыр тураһында Башҡортостандың Милли музейы директоры Р.Б. Әхмәрова әйтәләр, һәм ул уны фән өсөн һаҡлап алып ҡала. Шундай уҡ сылбырҙың көмөштән ҡойолған аналогы Агиҙел йылғаһы тамағындағы Таҡталасыҡ ҡәберлегендә табылған, ул, ундағы башҡа материалдар менән сағыштырғанда, б.э. VII-VIII быуаттарына ҡарай. Ошо хаҡтағы мәҡәлә авторы Таҡталасыҡ сылбырын муйынсаҡ итеп ҡулланылған тип фараз итә. Моғайын, Өфө алтын сылбыры ла шулай ҡулланылғандыр. Өфө ҡурғандарының һирәк осрай торған табылдыҡтары әле һаман үтелгәндәре менән генә сикләнмәй. Уларҙан башҡа элекке С.М. Киров исемендәге завод территорияһындағы емертелгән ҡәберлектән табылған алтын фольга менән тышланған затлы әйәр-өпсөн предметтарын (фалар҆ар, әйәр тышлыҡтары), Башҡорт опера һәм балет театры бинаһы аҫтынан табылған көмөш предметтар йыйылмаһын (ҡайыш таралғылары һәм биҙәүестәре), К. Маркс һәм Мостай Кәрим урамдарындағы ҡәберлектәрҙә табылған әйберҙәрҙе атап үтергә була. Мәҙәни-хронологик планда уларға хәҙерге Ботаника баҡсаһына яҡын урынлашҡан элекке Новиково ауылы янындағы бай ҡәберлек йөнәш, унда ҡош һынландырылған көмөш табаҡ, бик күп көмөш, алтын айылдар, ҡайышҡа беркетелә торған биҙәүестәр, медальондар һәм ҡылыс табылған. Әйткәндәй, табылдыҡтар араһында формаһы буйынса өҫтәрәк иҫкә алынған Өфө биләмәһендәге алтын сылбырға тулыһынса иш булған шундай уҡ алтын сылбыр бар.



Дежнев ҡурған ҡәберлегендә табылған.

Уникаль археологик ҡомартҡыларға бай булған Өфө территорияһы һәр даим һис көтөлмәгән сюрприздар алып килә. Мәҫәлән, ике Византия хәрби етәксеһенең баштан-аяҡ ҡоралы һыны - һөнгө, ҡылыс һәм ҡалҡан менән бронзанан ҡойолған рельефлы медальон шуға дәлил. Яугирҙар тимер менән ҡапланған кейемдә, баштарында торҡа, аяҡтарында итек булыуы самалана. Медальон 1987 йылда "Дуҫлыҡ Монументы" ҡаласығына яҡын булған емертелгән ҡәберлектән алынған, унда турбаҫлы мәҙәниәтенә ҡараған балсыҡ һауыт-һаба фрагменттары ла табылған. Ошондай уҡ икенсе медальон 2005 йылдың көҙөндә турбаҫлы мәҙәниәтенә ҡараған, әүәлерәк емертелгән Октябрь проспектын киңәйткән саҡта ҡаҙылып асылған ҡурғанда баш һөйәге деформацияланған ир кеше ҡалдыҡтары, турбаҫлы балсыҡ һауыты, көмөш таралғы һәм әлегәренә оҡшаш бронза медальон табылған. Медальондарҙың яһалыу ваҡыты, ундағы башҡа предметтар менән сағыштырғанда, б.э. V-VI быуаттарына ҡарай. Ошо Византия медальондары - яугир ҡаһарманлығы билдәләре - Көньяҡ Уралға, өҫтәрәк бәйән ителгән Византия императоры Феодосий II (б.э.V быуаты) алтын тәңкәһе һәм VI-VII быуаттарға ҡараған Византия тәңкәләре хазиналары кеүек үк, Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең Византия һәм Үҙәк Европаның башҡа илдәре, шулай уҡ Кавказ, Иран һәм Урта Азия менән яҡшы көйләнгән сауҙа-иҡтисади һәм мәҙәни-сәйәси бәйләнештәре һөҙөмтәһендә килтерелгән. Һис шикһеҙ, ошо уҡ каналдар буйынса бында алтын һәм көмөштән яһалған барса юғары нәфислек кимәлендәге ювелир әйберҙәрен дә алып килгәндәр.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

ғы. Ысынында беҙ күп эшләйбеҙ, маҡсатыбыҙ - ғаилә ҡарау ғына булмаһын, Тыуған еребеҙ үҫеше хаҡына ла хеҙмәт итергә аҙһын.

➔ **Йәштәрҙең хеҙмәткә мөнәсәбәтен белге килә. Фән үҫеше, сәйәсәт, баҙар мөнәсәбәте, технология ҡаҙаныштары... Һәр дәүер үҙ талаптарын ҡуя. Ниндәй ул бөгөнгө Хәйбулла йәштәре?**

- Баланы бәләкәйҙән эшкә өйрәтеү бөтөп бара. Атай-әсәй бөгөн балаһына эш ҡушмай, буйлата, үҙе эшләй. Эш тә әҙ хәҙер, юҡ эште бар итеп йомшау ҙа юҡ. Яныраҡ бер сарала бер тапҡыр ҙа картуф әрсемәгән һигеҙенсе класта уҡыған ҡыҙҙы осратып аптыраһам, бер проектта ошо уҡ йәштәге тәүгә энә тотҡан ҡыҙ тураһында һөйләнеләр. Әлбиттә, ҡайһы бер эш төрҙәре юғала, тик шулай ҙа хеҙмәт тәрбиәһе ҡиммәтен инҡар итеүебеҙ дөрөҫ түгел. Был системалы проблема. Ысынлап та проблема, сөнки ҡулы менән эшләгән кеше физик яҡтан көслөрәк, сабырыраҡ, коллектив менән аралашырға ла өйрәнә.

Мәктәптәрҙә хеҙмәт тәрбиәһен тергеҙеү - дөрөҫ идея, тик ул ҙур ауырлыҡ менән бара, сөнки класс иҙәнен йыумаған бер нисә быуын үҫеп сыҡты. Шулай ҙа был яңылыҡ ыңғай һөҙөмтәһен бирә башлар, тип уйлайым.

Хәйбулла йәштәре ни, бөтә ерҙәге йәштәр кеүек инде, төпкөл районда йәшәйбеҙ, тип, нимәнәндер артта ятып ҡалмай. Барлыҡ яңы технологияларҙы үҙләштерә. Уҡыуҙа, фәндә, спортта алдынғы йәштәребеҙ күп. Ауыл районында үҫкәс, улар араһында асоциаль күренештәрҙең һирәгерәк булыуы ҡыуандыра. Шулай ҙа йәштәр бөгөн ҡалаға ынтыла - йәш белгестәр районға ҡайтырға ашыҡмай. Йәш белгестәргә ярҙам күрһәтеү муниципаль программаһы (мәҫәлән, уҡыу йортон тамамлап ҡайтҡан врачҡа 200 мең һум түләнә) был проблеманы өлөшләтә генә хәл итә.

➔ **16 майҙа баш ҡалала хәйбуллалар йыйыла. Ҙур сараға әҙерлек бара. Алда торған эштәр тураһында фекер алышыуҙар булыр. Был осрашыуҙың иң ҙур маҡсаты тип ниммәне атарға була?**

- Эйе, 16 майҙа Өфөлә "Тамырым Хәйбулланан" тип исемләнгән сараға әҙерләнәбеҙ. Биш йыл инде Хәйбулланан сыҡҡан өфөләр осрашҡаны юҡ. Баш ҡаланан иң алыҫ ятҡан район өсөн был сара бик мөһим: студенттар, йәштәр үҙҙәренән олораҡ яҡташ ағайҙарын танып-белһен, бер-береһе менән аралашһын, тибеҙ.

Көн дауамында төрлө саралар ҡаралған: спорт ярыштары, студенттар менән осрашыу, яу ҡырында йөрөгән яҡташ егеттәр өсөн кәрәклә әйберҙәр эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре. Район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов йәш яҡташтар ҡатнашлығында стратегик сессия алып барасаҡ. Унда Хәйбулланың бөгөнгө ҡаҙаныштары һәм проблемалары тураһында һүҙ алып барыласаҡ. Был сарала төрлө өлкәлә уңышлы эшләп йөрөгән хәйбуллаларҙан районды артабанғы үҫеше, мәсьәләләрен хәл итеү буйынса яңы идеялар, тәҡдимдәр көтәбеҙ. Был көндөң төп сараһы кискә 18 сәғәттә Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында була - унда ҙур күргәҙмә, һатыу итеү һәм байрам концертында барыһын да көтөп ҡалабыҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА яҙып алды.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

Дошман да тик ятмай, беҙҙең яугирҙар унын 10 контратакаһын кире ҡаға. 58-се гв. атлы полкының 2-се эскадроны Янни тигән ауылға бәреп керә (командиры - гв. өлк. лейтенанты С. Н. Мартынов). Немецтарҙың ике рота һалдаты, танкыларға ышыҡланып килеп, эскадронды ҡамап ала. Беҙҙең атлылар түңәрәк обороnаға күсә, дошмандың 300-ләп һалдат һәм офицерын сафтан сығара. Эскадрон ҡамауҙан сығып өлгөрә. Станковый пулемет тоҫҡаусыһы, гв. рядовойы В. Г. Фирсов бер үҙе 80 дошман һалдатын юҡ итә; гв. кесе сержанты Я. Л. Латыпов, немецтар 50-70 м арауыҡҡа тиклем яҡынлашыуға, бик көслө ут асып, уларҙы йығып һала. С. Н. Мартыновтың эскадроны полктың һәм дивизияның башҡа эскадрондарына Одер аша сығыу мөмкинлеген бирә. Одер ашаһындағы плацдармда 62-се гв. атлы полкы батырҙарса алыша. ПТР тоҫҡаусыһы, гв. сержанты М. В. Щедрин дошман дзоты эргәһенә шыуышып барып, уны гранаталар менән шартлата, немецтарҙың өс тиҫтәгә яҡын һалдаты һәләк була. Ошо батырлығы өсөн М. В. Щедрин Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Гв. сержанты И. К. Попов, үҙенең отделениеһы менән дошмандың ут нөктәләрен урап уҙып, унын ике пулемет расчетын юҡ итә. Улар Янни ауылы артында немецтарҙың бронетранспортерын ҡулға төшөрә. Попов, яраланыуына ҡарамаҫтан, дошманды утҡа тотоуын дауам итә.

Одерҙы кисеп сығыу операцияһы һәм плацдармдағы алыштар бик көсөргәнешле бара. Дошмандың 20-нән ашыу самолеты кисеүҙе һәм көнбайыш ярҙағы бәләкәй генә плацдармды туҡтауһыҙ бомбаға тота. Бомба һәм снарядтарҙан йығылғаның боҙо сәрпәкләнеп, ватылып бөтә. Боҙ өҫтөнә һалынған түшәмәләр ҙә емертелә, башҡа эскадрондар йылға аша сыға алмай.14-се һәм 16-сы атлы дивизияларға ҙур хәүеф янай. Башҡа уҡсы частар килеп еткәнсе ошо плацдарма ҡалыу ҙур юғалтыуҙарға килтерер ине. Ә дошман яңынан-яңы резервтарын килтерә. Фронт штабы бойороғона ярашлы, 30 ғинуарға ҡаршы төнөн корпус плацдармды ҡалдырып, кире көнсығыш ярға сыға. Унан һуң, обороnаға күсеү 33-сө армияның һул флангыһын дошмандан ҡаплау өсөн дә кәрәк була. Корпус Цюллихау, Фюрстенберг, Вельмитц, Гроссен йүнәлешендә хәрәкәт итә.16-сы гв. атлы дивизияһы алдында яңы боевой бурыс ҡуйыла: Одерҙың уң яҡ яры буйлап һөжүм итеп, Ной Ботниц һәм Глебах тигән тораҡ пункттарҙы алырға. 1945 йылдың февраль баштарында Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһы тамамлана.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

*ЗАМАН БӘЛӘҺЕ*

# ҠУЛҒА ЭШ БУЛҺА...

## Себер тип сапмаҫ инеләр

**Әсәйем китә йыраҡҡа,**
**Йыраҡҡа, һыуыҡ яҡҡа.**
**Бик өшөр инде әсәйем,**
**Эшләйем, тиеп аҡса.**

**Гел иланым ҡәҙерлемде**
**Оҙатҡанда Себергә.**
**Үпкәләп тә йөрөгәйнем,**
**Булмайбыҙ, тип гел бергә.**

**Хәҙер ҙур үҫтем. Һағынып**
**Көтәм уның ҡайтҡанын.**
**Беләм аҡсаның һыуыкта,**
**Ҡар аҫтында ятҡанын.**

**Ошо шиғырҙы уҡығанға бер нисә йыл үтте, әммә ул һаман да йөрәгемдән сыҡмай. Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының VII класс (хәҙер үҫкәндәр инде) уҡыусыһы Алһыу Ғилманованың был шиғыры "Йәншишмә" гәзитендә баҫылып сыҡҡайны.**

Ошо юлдарҙы уҡығандан һуң ныҡ тетрәндем. Өс строфалыҡ ҡына был юлдарҙа Башҡортостан ауылдарындағы күп ғаиләләрҙең тормошо сағылған бит. Элегерәк Себер тарафтарына ир-ат ҡына юлланһа, хәҙер ҡатын-ҡыҙҙарҙың да эш эҙләп, һалҡын төбәккә китеүе ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Баланың шиғыр юлдарынан күренеүенсә, әсәһе тәүге йыл ғына йөрөмәй был юлда. Бала әсәһен оҙатҡанда илап ҡалған, гел бергә була алмағанға үпкәләп тә йөрөгән, хәҙер үҫкән инде, аҡсаның һыуыкта, ҡар аҫтында ятҡанын аңлаған ҡыҙыҡай әсәһен, өшөйҙөр инде, тип өҙгәләнә. Был юлдарҙы нисек тыныс уҡымаҡ кәрәк: күпме ғаилә фажиғәһе, күңел тетрәнеүҙәре, күҙ йәштәре, һағыныуҙар, һағыштар унда. Ғәзиз кешеһенән айырылып, интернатта йәшәргә мәжбүр булған бала һәр иртә әсәһенең иркәләп уятыуын, тәмле ҡоймаҡтар менән сәй эсереүен, арҡаһынан яратып мәктәпкә оҙатыуын, йылмайып ҡаршы алыуын теләмәй, тиһегеҙме ни! Үҫмер ҡорона инеп барған ҡыҙҙың әсәһе менән серләшер һүҙҙәре лә барҙыр, кәңәштәрен дә ишетергә теләйҙер бит.

Ә әсә һуң? Уның йөрәге һыҙламаймы ни? Һәр иртә эшенә барғанда, балам ни эшләй, хәле нисек, сирләмәйме икән, тип өҙгөләнмәйме ни? Ғәзиз балаһын тәштөрендә күреп, һағыныуҙан күҙ йәштәрен тыя алмай тиһеңме ни? Шул бала хаҡына тип йөрөй ҙа баһа ул ошо ҡырыҫ тәбиғәтле Себер яҡтарында. Уның киләсәген уйлап, уҡытырға, кеше итергә тип, үҙенең дә һаулығын бөтөрә бит...

**Әгәр ауылда эш булһа,** ирекһеҙҙән бер кем дә шулай күҙ күрмәгән яҡтарға сығып китмәҫ ине.

Рәсәйҙә иғлан ителгән Ғаилә йылында, ниңәләр, иң башта ошолар хаҡында уйландыра. Кемдәргәлер төрлө байрамдар ойошторуу ҙа кәрәктер. Әммә, иң беренсе сиратта, ауылдарҙа йәшәүсе ғаиләләрҙең хәлен хәстәрләү мөһимдер.

Әле беҙ бер ҡыҙ баланың шиғыры аша күңел ғазаптарын киҫерҙек. Ә улар күпме? Ирҙәрен Себергә оҙатҡан ҡатындарға ауылда йәшәү икеләтә ауырға төшә бит. Утынын да, бесәнен дә әҙерләргә, ҡышын, йәйен, яҙын, көҙөн малын ҡарарға, балаларын тәрбиәләргә, бәкса үҫтерергә... Йылдар буйына ирле көйө ирһеҙ йәшәй улар. Ярай ҙа алып ҡайтҡан аҡсаһын ғаиләһенә именаман тотторһа. Ай буйына эсеп ятып, китергә бисәһенән аҡса таптырғандары ла юҡ түгел. Тегендә, Себерҙә, икенсе ғаилә ҡорғандары ла бар. Бында ҡалған ҡатындарҙың да ир назы эҙләп, хәләлдәренә хыянат итеүселәр осрай. Атайлы килеш етем үҫкән балалар аҙмы? Бына ниндәй фажиғәләргә килтерә ғаиләләрҙе ауылдарҙағы эшһеҙлек. Ситтә эшләгән, бигерәк тә Себерҙең ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында: ҡыш өтөп барған һалҡында, яҙҙың әсе елдәрендә, епшек һауала, йәйҙәрен умарта күсе кеүек һырып алған серәкәй, ләпәктәрҙән талана-талана эшләгән ир-ат та, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күпме һаулығын юғалта, ғаиләләрендә балаларын тәрбиәләүҙә ҡатнаша алмай.

**Әгәр ауылдарҙа эш булһа,** ғаиләһен аҫраурлыҡ хеҙмәт хаҡы түләнһә, ирекле каторжан булып китергә кем теләр ине икән!

Ә бит Себергә махсус белемле кешеләр генә юлланмай. Бөтөнләй һөнәре булмағандар ҙа барып эләгә унда. Техника хәүефһеҙлеген белмәү арҡаһында күпме фажиғәләргә осрай ябай ауыл ирҙәре, ҡайһылары хатта шунда мәңгелеккә ятып ҡала. Бер нисә таныштың, яҡташтарҙың, туғандарҙың араһынан Себер тарафтарында эшләүсе кешеләрҙең булыуы сәбәпле, улар һөйләгәндәренән белгәнгә күрә яҙам был юлдарҙы. Ғаилә яҙмыштарының боҙолғаны, атай-әсәй тәрбиәһе күреп үҫмәгәнгә күрә балаларының тайғаҡ юлдан китеүҙәре хаҡында ла аныҡ миҫалдар килтереп һөйләргә булыр ине.

**...Эш юҡ бит үҙебеҙҙә,** тип һылтаныусыларға түбәндәге күҙәтеүҙәремде тәҡдим итмәксемен.

Ҡала буйлап йәмәғәт транспортында йөрөгәс, туҡталыштарҙа оҙаҡлап көтөргә тура килә. Һыуыҡ, ел үҙәккә үтеп өшөттөрә. Ҡайһы бер туҡталыштарҙа ышыҡланыр урын да юҡ. Мәҫәләһән, Дуҫлыҡ монументында ер аҫтынан үткәүел эшләнеләр ҙә, йәйәүлеләр өсөн ел-ямғырҙа күшегеп, буранлдарҙа ҡатып торорға тура килә. Ҡаланың башҡа урындарында ла күп быялалары ватылған ваҡ туҡталыштар. Үҙәк урамдарҙағы матур туҡталыштарҙы күреп, их, бөтә ерҙә лә шулай булһын ине ул, тип ҡуяһың...

Транспорттың насар йөрөүенә зарланып, "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһында оҙаҡ йылдар эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан яҡташ водитель менән һөйләшеп киттек тә, ошо хәлдең сәбәптәрен һораным.

- Предприятиела автобустар теҙелешеп ултыра ул. Эшләргә кешеләре генә юҡ, - тине уҙаман.



- Нисек инде? - тип аптырайым.

- Шулай. Сәғәт иртәнге 4-тән тороп эшкә йөрөргә йыбаналар.

Ысынлап та, ҡала буйлап йөрөгән бөтә йәмәғәт транспортында ла тиерлек электрон таблола йылдар буйына водителдәр һәм кондукторҙарҙы эшкә саҡырған белдереүҙәр "йүгереп" тора. Шул уҡ ваҡытта күптәр эш юҡ тип зарлана.

Сипайловонан Телеүҙәккә йөрөгән 6-сы маршрут автобусына ултырғанда буш урын водитель эргәһендә тура килде. Аҡса алған көндәре булған, ахыры. Ҡәйефе шәп, бер нисә иптәшенә шылтыратып: "Һин алдыңмы әле? Минеке 87 мең булған", - тип һөйләшеп килә. Айлыҡ эш хаҡымы, әллә аванс ҡынамы, тигәндәй, һорашыу уңайһыҙ ине. Нисек кенә булһа ла, әҙ аҡса түгел кеүек тойолдо беҙҙең һымаҡ хаҡлы ялдағы кешеләр өсөн.

Аэропорт ягына йөрөгән 110с маршрутына ла йыш ултырырға тура килә. Журналислыҡ һөнәрем төпсөнөп һорашырға, ҡыҙыҡһынырға сәбәп кенә. Кондукторҙан: "Эш хаҡығыҙ арыумы? Минә бер ҡатын, зарланып, 18-25 мең генә сыға тигәйне", -тим.

- Күберәк эшләһәң, арыу алаһың инде, минең, мәҫәлән, 50 меңдән аша. Әҙ эшләгәндәр шулай зарланырға ярата. Ә водителдәрҙең эш хаҡы 100-150 меңгә барып етә, - тине ул.

- Һеҙ ҙә райондан килдегеҙме? Ғәҙәттә, кондуктор булып ауылдыҡылар эшләй.

- Эйе, мин Дүртөйлө районынан килдем.

- Ятағы ла бар, тиҙәр, шул дөрөҫмө?

- Дөрөҫ.

- Ашарға ла әҙерләргә мөмкинлектәр бармы?

- Бар. Үҙебеҙ сменанан буш ваҡытта ҡайнар аш әҙерләп ашайбыҙ.

Шундай шарттарҙа ла предприятиеға эшкә килергә ашҡынып тороусылар юҡ дәрәжәһендә.

Водителдәр һәм кондукторҙар етмәү сәбәпле, тажик, үзбәк милләтенән булған ир-егеттәрҙе ошо эштә йыш күрергә мөмкин. Һуңғы осорҙа уларға таксиҙарҙа эшләргә лә рөхсәт ителде. Бер осраушыу хаҡында һөйләп үткем килә. Сипайловонан өйгә таксиға заказ биреп ҡайтырға тура килде. Русса арыу ғына һөйләшһә лә, акценты һиҙелә, милләте тажик икән. Һорау бирә-бирә шул асыҡланды. Өфөлә 15-20 йыл тирәһе йәшәй. Тиҙҙән 40 йәш туласаҡ. Хәйер, һүҙҙе үҙенә бирәйек.

- Ҡыш ошолай таксиҙа эшләйем. Машинам үҙемдеке. Фатирым бар. Бер нисә йыл элек 8 миллионға фура һатып алдым. Хәҙер улар 17-18 миллион һум тора.

- Ҡайҙан шул тиклем аҡса һеҙҙә? - тип бүлдерәм аптырап.

- Эшләйем бит, - ти. - Йәй-көҙ шул фурам менән Тажикстандан, Үзбәкстандан, Польшанан емеш-еләктәр ташыйым. Бер рейста байтаҡ аҡса эшләйем. Йәй, көҙ әллә күпме рейстар яһайым.

40 йәштә булғас, ғаиләһе лә барҙыр инде, тип ҡыҙыҡһынам.

- Рус ҡыҙына өйләндем. Ислам динен ҡабул итте. 5 намаҙын уҡый. Бер ваҡытта ла ҡаршы әйтмәй, бөтә нәмәне эшләй. Әрләшеп, ҡул күтәреү түгел, һүгенгәнем дә, насар һүҙ әйткәнем дә юҡ. Ата-әсәһе лә һәйбәт. Ун йыллап торһаҡ та, балабыҙ булманы. Мин үҙебеҙгә ҡайтып, тажик ҡыҙына өйләндем. Уны ла бында алып килдем. Тиҙҙән балабыҙ була. Ике ҡатын бер-береһе менән аралаша.

Бына шундай ғибрәтле лә, фәһемле лә хәл. Ситтәр беҙгә килеп, миллиондар эшләй. Ә беҙҙең ир-егеттәр оҙон аҡса артынан Себергә китә. Мәҫәлән, былтырғы һандар буйынса Рәсәйҙән ситкә китеп эшләүселәр араһында Башҡортостан 1-се урында тора икән. 165,8 мең кеше төрлө төбәктәрҙә тир түгә. 104,3 меңе, йәғни 63 проценты - Төмән өлкәһендә. Сағыштырыу өсөн Татарстанда ситкә китеүселәр 24,3 мең кеше булһа, Рәсәй буйынса улар тәүге ун төбәк исемлегендә лә юҡ.

Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировтың "Өйҙә эшләү - бәхет" тигән өндәмәһенә ҡушылып, ғаилә һәм хеҙмәт министры Ленара Иванова ла республикабыҙҙа эшсе һөнәрҙәргә ҙур ҡытлыҡ булыуы - төҙөлөштә, машиналар төҙөү, ҡара металлургия өлкәләрендә айырыуса эшсе ҡулдарҙың етмәүе, хеҙмәт хаҡының да 100 меңгәсә етеүе хаҡында белдерҙе. Кемгәлер, бәлки, был эш хаҡы әҙ тойолалыр, әммә Себерҙә, ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында, эшләгән аҡсаларын өйҙә бер ай ял иткән ваҡытта бүлеп ҡараһаң, аҙ ҙа түгелдер.

Эштең ояты юҡ. Йәштәр килмәү арҡаһында, консьерж, ҡарауылсы, урам һепереүсе, иҙән йыуыусы булып хаҡлы ялдағы өлкән йәштәге ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙар урынлаша. Хәйер, йәштәрҙең дә төрлөһө бар. Былтыр бер студенттың 5 ерҙә урам һепереүсе булып эшләүе тураһында яҙылғаны хәтерҙә ҡалған. Әле лә исеме билдәле генә ижад кешеһенең хеҙмәт көнөнән һуң ике ойошмаға барып иҙән йыуғанын беләм. Ике баланы уҡытырға, ипотека түләргә тигән мохтажлыҡ йөрөтә ундайҙарҙы. Теләгән кешегә ҡала ерендә эш табырға була барыбер. Бер журналист, мәҫәлән, эштән һуң фатирҙарға бушлай реклама ҡағыҙҙарын тарата, төнгөләккә балалар баҡсаһына дежурға китә. Ҡыҙын түләүле бүлектә уҡытҡас, шулай тырышырға тура килә.

**Ә ауылдарҙа нимә эшләргә һуң, тиһегеҙме?** Бында, әлбиттә, хәлдәр ҡатмарлыраҡ. Әммә йүнселдәр ҡул ҡаушырып ултырмай, рәтен таба. Хөкүмәттән көтөп кенә ултырырға ярамай, ниндәйҙер саралар эҙләргә кәрәк шул. Илебеҙҙең ауылдарға йөҙ менән боролоуы мөһим. Урман өсҡә ишелеп торған төбәктәрҙә урман хужалыҡтары ойоштороп, ауыл халҡы өсөн күпме эш урындары булдырырға мөмкин. Элек ҡырҡыуҙан ҡалған ҡалдыҡтарҙан сувенирҙар ғына түгел, ағас һауытһабалар, ҡалаҡтар, массажерҙар, сыйырсыҡ ояларь, ручкалар, ағас көрәктәр, сана-саңғылар һәм башҡа хужалыҡ кәрәк-яраҡтары етештерәләр ине. Хәҙер супермаркеттарҙа шашлыҡ бешерер өсөн ағас күмерен дә һата башланылар. Беҙҙән һатып алған ағас ҡалдыҡтарын да әрәм итмәй, Ҡытай теш соҡол торған таяҡсаларҙы ҙа үҙебеҙгә тәҡдим итә. "Ағиҙел" производство берекмәһе яһаған сувенирҙың хаҡы иҫ китмәле ҡиммәт. Әллә ҡайҙан килтерелгән уклау, картуф иҙгес, туҡмас йәйер өсөн, ризыҡ турар өсөн аш-һыу бүлмәһенә таҡталарҙы ғына үҙебеҙҙә эшләрҙәр ине бит әгәр урман хужалыҡтарында ошондай цехтар асылһа. Күпме ир-атҡа эш урындары булыр ине.

Ялан яҡтарында кемдер иген үҫтерә, кемдер мал тота, кемдер баҡсасылыҡ менән шөғөлләнә. Һәр ҡайһының үҙе етештергән продукцияһын нисек булдыра, шулай һатырға тырыша. Ярай, машиналары булһа, район үҙәгенә яҡын йәки оло юл буйындараҡ йәшәһәләр, итен, һөтөн, ҡаймағын, майын, картуфын, башҡа йәшелсә-емештәрен һатып аҡса эшләргә мөмкинлектәре булыр ине. Әгәр шуларҙың береһе лә юҡ икән: әйтәйек, үҙенең транспорты булмаған, район үҙәгенән, оло юлдан ситтә йәшәгән ауыл кешеләренең күпме йәшелсә-емеше әрәм-шәрәм булып сереп юҡҡа сыға. Әгәр ҙә берәй ауылда бәләкәй генә консервалар заводы асылһа, яҡынтирәләге халыҡ баҡса уңышын шунда алып барып тапшырыр ине. Югиһә, бөтә Башҡортостанды бер Бүздәк кенә тәьмин итә алмай бит. Йәки ит ыҫлау заводтары асылһа, ауыл кешеләре үҙ ғаиләһенән артыҡ һуғымын тапшырып, аҡса эшләр, кәрәк-ярағына тотоноор ине.

Һис юғында, ауыл хужалығы кооперативтары берләшеп, берәүһе етештерә, икенсеһе эшкәртә, өсөнсөһө һатып алыусыларға еткерә. Бар ул республикабыҙҙа бер нисә шундай кооператив. Тик улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ, шуларҙы күберәк ой-

*✓ Уҡыусыларға бер теләк - тормоштағы еңеүҙәр өсөн белем кәрәк, тик белем арҡылы ғына киләсәк формалаша, ул эш бирә, кешене үҫештерә, яңы үрҙәргә баҫҡыс булып тора. Сибай институты ана шул үҫеш өсөн иң ҡулай урын.*



оштороғанда ауыл кешеләре етештергән продукция ла әрәм булмаҫ, кешеләргә эш урындары ла табылыр ине. Ауылға ысынлап иғтибар иткәндә быйма баҫыу, балыҡ ыҫлау цехтары ла асырға мөмкин, балаҫ, кейеҙ һуғыу, шәл, ойоҡ, бейәләй бәйләү, күпләп ҡаҙ аҫраған кешеләрҙән ҡаҙ мамығын йыйып, мендәр, юрғандар эшләү, тире иләү кеүек шөғөлдәрҙе ойоштороға мөмкин. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡул эштәренә лә, аш-һыу әҙерләргә лә оҫта. Һалма, туҡмас, бауырһаҡ, сәк-сәк, йыуаса кеүек ризыҡтары менән ҡала халҡын һыйлай алырҙар ине бит. Бары ойоштороға, мөмкинлек булдырырға, аҡса бүлергә кәрәк. Ауылында эш ҡайнап торғанда, ситкә китергә теләүселәр табылыр ине микән. Үҙ йортонда балалары менән имен-аман йәшәп ятыуға ни етә!

**...Әгәр кешегә эш булһа,** йәшәү шарттары булһа, кем тыуған төйәген ташлап китһен. Ғаиләкиммәттәрен һаҡларға кәрәк, тип һөйләйбеҙ. Бының өсөн ауылдарҙы бөтөрөргә түгел, киреһенсә, үҫтерергә кәрәк. Ғаилә ҡиммәттәре тигәндә ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған байлыҡты, мал-мөлкәтте, өй-ерҙе, алтын-көмөштө күҙ уңында тотмайбыҙ, ә нәҫел шәжәрәбеҙҙәге алтын бағаналай булған шәхестәребеҙ рухына тоғро ҡалып, уларға хыянат итмәй ғорурланып йәшәүебеҙҙе раҫларға тейешлегебеҙҙе аңлауҙа күрәбеҙ. Үҙ төйәгендә аяғын ерге ныҡ терәп, үҙ байлығына үҙе хужа булып йәшәргә теләй бөгөн ауыл халҡы.

Ғаиләләрҙең проблемалары күп. Инвалид бала үстереүселәр, күмәк бала тәрбиәләүселәр, өлкән йәштәге сирле ата-әсәһен ҡараусылар, үҙҙәре олатай-өләсәй булғас та балалары, ейәндәре менән бергә ҡыҫыҡ бүлмәләрҙә көн күреүселәр, Афғанстан, Чечня ветерандары, Чернобыль фажиғәһендә ҡатнашыусылар, хәҙер килеп МХО яугирҙары... Һәр ҡайһыһының хәл ителмәгән мәсьәләләре етерлек. Әгәр ҙә ошондай мохтажлыҡ кисереүселәргә ниндәйҙер кимәлдә анығ ярҙам күрһәтелһә, Ғаилә йылы үҙ маҡсатына өлгәшер ине.

Һүҙемде үткән Ғаилә йылына арнап (2008 йылда) яҙған шиғырым менән тамамлағым килә.

*Ил тотҡаһы - татыу ғаилә,*
*Һәр ғаилә - бер дәүләт.*
*Шул дәүләттәр имен торһа,*
*Тормош та булыр һәйбәт.*

*Йорт-еребеҙ тыныс булһа,*
*Бишек йыры көйләнер.*
*Быуындарҙан-быуындарға*
*Нәҫел ебе бәйләнер.*

*Атайлы бала - арҡалы,*
*Инәйлеһе - иркәле.*
*Ата-әсә менән сабый*
*Ҡаршылаһын иртәне.*

*Һыйындыра, һөйөндөрә*
*Беҙҙе ғаилә усағы.*
*Наҙ, һөйөүҙән генә тора*
*Әсәйҙәрҙең ҡосағы.*

*Дуҫ-иштәрең йәҙ бороһа ла,*
*Беҙҙе ғаилә аңлай,*
*Кемдәр иҫәпкә алмаһа,*
*Яҡындар беҙҙе һанлай.*

*Ғаиләлә беҙҙең бәхет,*
*Ғүмеребеҙ дауамы.*
*Йөнгә тыныс табыр оя,*
*Күңелебеҙ дауаһы.*

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**1935 йылдың 4 майында хәрби училище бөтөп, офицер званиеһы алған курсанттар алдында сығыш яһаған Иосиф Сталин аҙаҡ киң таралған фразаны әйтә: "Кадрҙар бөтәһен дә хәл итә". Кадрҙар - юғары белемле белгестәр күктән төшмәй, улар ҡайҙалыр уҡырға тейеш. Әлбиттә, уҡыу йорттары әҙ түгел, ҙур ҡалаларҙың һәр береһендә бар. Ә бына бөтөн Урал аръяғы өсөн ундай уҡыу йорто берәү генә. Берәү, әммә берәгәй! Урындағы кадрҙарҙы яңғыҙы әҙерләй, уҡытыу менән бер рәттән, буласаҡ белгестәрҙе тәрбиәләүҙе лә үҙ өҫтөнә алған Сибай институты. Унның директоры Илдар Сәлихйән улы ХӘМИТОВ менән һөйләшкәндә һүҙ шул турала барҙы.**

# БЕЛЕМ - ЗИҺЕНГӘ...

## тәрбиә - күңелгә



– Сибай институты башҡорттар күпләп йәшәгән Урал аръяғы райондарына һәм ҡалаларына кадрҙар әҙерләй. Был маҡсат юғары уҡыу йорто асылған ваҡытта уҡ ҡуйылды һәм киләсәктә лә шулай ҡаласаҡ. Һөнәрҙәрҙең ниндәй генә йүнәлешен алһаҡ та, бөгөнгө көндә вакансиялар бик күп: мәктәптәрҙә төрлө предметтарҙан уҡытыусылар етешмәй, юристар, техник хеҙмәткәрҙәр, иҡтисадсылар кәрәк. Уҡыу йылы аҙағы яҡынлай башлаһа, март-апрелдә үк төрлө ойошмаларҙан шылтырата башлайҙар, сығарылыш курсы студенттарын эшкә саҡыралар. Тимәк, беҙ кәрәк, маҡсатыбыҙ дөрөҫ, был мәсьәләне беҙ хәл итергә тейеш.

Әлегә бакалавриаттар ғына сығарабыҙ, киләсәктә магистратура специальностарын лицензияларға уйлайбыҙ. Ҡайһы берәүҙәр һайлаған йүнәлеше буйынса юғары уҡыу йортон тамамлағас, башҡа һөнәр һайлауҙары ихтимал. Беҙ икенсе юғары белем алырға теләүселәргә лә ҡабул итәбеҙ, уҡытабыҙ.

Институт булғас, уҡытыуҙан тыш, фәнни эштәр менән дә шөғөлләнәбеҙ. Уҡыу дәрестәре күп, әммә фәнни эштәр ҙә бик күп ваҡыт талап итә. Шуны иҫәпкә алып, ике лаборатория булдырҙыҡ: береһе "Биләмәләрҙең тотороҡло үҫешен эҙмә-эҙлекле өйрәнеү үҙәге һәм халыҡтың йәшәү сифаты" тип атала, икенсеһе нейропсихология һәм нейропедагогика буйынса. Был юҫыҡта күп эштәр башҡарыла, мәктәп балалары, уҡытыусылар менән эшләйбеҙ, тикшеренеүҙәр үткәрәбеҙ, төрлө гранттарға заявкалар бирәбеҙ. Былтыр миллион ике йөҙ меңлек грант яуланыҡ, быйыл да заявкалар әҙерләйбеҙ. Улар фәнни йүнәлештәрҙең үҫешенә ярҙам итә, ғилми хеҙмәттәр уҡытыусыларыбыҙҙың кимәлен күтәрә, һөҙөмтәлә, студенттарыбыҙ сифатлы белем ала. Студенттар үҙҙәре лә ғилми конференцияларҙа ҡатнаша, төрлө материалдар әҙерләй, фәнни журналдарға мәҡәләләр яҙа.

Шул эштәрҙең һөҙөмтәһе буйынса йыл һайын "Фән аҙнаһы" исемле ғилми конференция уҙғарабыҙ, быйыл сираттағыһы апрель аҙағында үтә. Ындай конференциялар башта үҙебеҙҙең студенттар өсөн генә үткәрелһә, йәйләп ҡала кимәленә сыҡтыҡ, шунан республика кимәлендә үткәрә башланыҡ, хәҙер бөтә Рәсәй кимәленә күтәрелдек, төрлө төбәк студенттары ҡатнаша башланы. Быйыл, мәҫәлән, Санкт-Петербургтан ике кеше ҡатнашасаҡ. Заман талаптарына ярашлы, әлегә конференциялар онлайн-форматта үтә. Тупланған материалдар буйынса айырым китап баҫылып сыға.

Уҡытыу менән бер рәттән, Сибай институты тәрбиәүи мәсьәләләргә иғтибарлы булыуы менән айырыла.Үкенескә күрә, юғары белем биреү системаһында элек тәрбиә мәсьәләһенә иғтибар буленмәне. Мәҫәлән, колледждарҙа элек-электән тәрбиәүи эштәр буйынса урынбаҫар вазифаһы бар, ә юғары уҡыу йорттарында ул 5-6 йыл элек кенә барлыҡҡа килде. Ә беҙҙә, Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов етәксе булған осорҙа, 1999 йылда уҡ, Рәсәйҙә беренселәрҙән булып социаль-тәрбиә буйынса урынбаҫар штаты булдырылды. Был йүнәлеш буйынса студенттарға төрлө яҡлап ярҙам итеү күҙ уңында тотола, сөнки тормошта төрлө хәлдәр була. Беҙҙең студенттарҙың күбеһе ауылдарҙан килә, быны һәр саҡ күҙ уңында тоторға кәрәк. Махсус социаль-тәрбиә бүлеге йәшәү, уҡыу шарттары ауыр булғандарға социаль стипендиялар бүлә. Йыл һайын 30-40 студент 12-16 мең күләмендә ай һайын шундай матди ярҙам ала.

Тәрбиәүи яҡтан тағы бер әһәмиәтле сара: бөтә студенттарҙы ла йәлеп итеп, һәр аҙна һайын төрлө саралар үткәрәбеҙ. Бөгөнгө көндә илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү беренсе урында тора. Башҡортостандың Рәсәйҙәге, Рәсәйҙең донъялағы урынын һәр кем яҡшы аңларға, белергә тейеш, тыуған яғыбыҙҙы, институтты, республикабыҙҙы данлау - үҙе ҙур маҡсат. Һәр бер студентты үҙ балабыҙҙай күрәбеҙ, ул беҙҙең институтты һайлағас, сифатлы белем һәм тәрбиә алырға тейеш, тип һанайбыҙ, яҡшы һөнәр биреп, киләсәкке тормошонда аҡса эшләргә өйрәтәбеҙ.

Йәмғиәткә файҙалы кешеләр тәрбиәләү һәм уҡыту өсөн беҙҙә бөтә шарттар ҙа бар. Өсөнсө-дүртенсе курстан уҡ беҙ студенттарҙы эшкә урынлаштыра башлайбыҙ, күптәр индивидуаль график буйынса уҡып та, эшләп тә йөрөй. Сибай институтының матди базаһы ныҡ һәм көслө. Дәрестәр, лекциялар өсөн аудиториялар һаны етә, кабинеттарҙы йыл да ремонтлап торабыҙ. Мәҫәлән, һуңғы 2-3 йыл эсендә биш компьютер класын тулыһынса яңырттыҡ, заманса ҡорамалдар алдыҡ. Студенттар өсөн дүрт дөйөм ятағыбыҙ бар, теләгән һәр студентҡа урын бирәбеҙ. Хатта ситтән тороп уҡығандар өсөн айырым ятаҡ бар, сессия ваҡыттарында уларға арзан хаҡҡа бүлмә алыу мөмкинлеге бар. Беҙгә икенсе республикаларҙан, өлкәләрҙән килеп уҡығандарын иҫәпкә алғанда, шундай шарттар улар өсөн бик ҡулай.

Төрлө спорт секцияларының өҙлөкһөҙ эшләп килеүе лә тәрбиәнең бер йүнәлеше. Өс спортзалыбыҙ бер ваҡытта ла буш булмай, төрлө ярыштарҙа ситтән тороп уҡыусыларыбыҙ ҙа ҡатнашып китә. Бейеү ярактандар өсөн "Ете ырыу" һәм "Эдельвейс" исемле ике ансамбль бар: береһендә милли бейеүҙәргә өйрәтһәләр, икенсеһендә заманса бейеүҙәр өҫтөнлөк итә. Йырларға теләгәндәргә вокал студияһы эшләй. Студенттар күңелдәренә яҡын шөғөл һайлап, беҙ бирган мөмкинлектәрҙе бик теләп файҙалана.

Уҡытыусыларға килгәндә, өс-дүрт йыл элек Өфөгә күсенгән осраҡтар булды, хәҙер бөтә специальностар, йүнәлештәр буйынса үҙебеҙҙең кадрҙарҙы туплап алдыҡ. Хәҙер күсенергә теләүселәр юҡ шикелле, киреһенсә, беҙгә килергә теләк белдереүселәр бар. Бөтә уҡытыусыларыбыҙҙың, хеҙмәткәрҙәрҙең үҙ фатирҙары, өйҙәре бар. Студенттарыбыҙ ғаилә ҡороһа, ғаиләләр өсөн тәғәйен дөйөм ятаҡтан айырым бүлмә бирәбеҙ, Сибай мәктәптәренә эшкә төшкәндәргә лә йәшәргә урын табабаҙ.

Шулай йәшәйбеҙ, эшләйбеҙ, институттың киләсәге бар, ул булмаһа, төп маҡсаттарыбыҙҙы үтәмәһәк, йәштәргә, милләттәштәребеҙгә кадрҙар яғынан үҫеш булмаясаҡ. Беҙ бит үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнамайбыҙ, Сибай ҡалаһының, Урал аръяғы райондарының күп саралары беҙҙә үтә. Мәҫәлән, уҡыусыларҙың төрлө олимпиадаларын, уҡытыусыларҙың, медицина хеҙмәткәрҙәренең квалификация күтәреү курстарын үткәрәбеҙ. Әргәләге Сибай институты булмаһа, бөтәһе лә Өфөгә бара аламы? Урал аръяғының үҫеше өсөн баштан уҡ миссия һымаҡ ҡабул ителгән бурыс юғалманы, ул дауам итәсәк. Һуңғы өс йылда 1900 студент иҫәпләнһә, быйыл беҙҙә 2500 студент уҡый! Йыл һайын 300-400 студентҡа диплом бирел, тормош юлына сығарабыҙ. Иҡтисад һәм хоҡуҡ факультетынан башҡа бөтәһендә лә бюджет урындары бар.

Һуңғы йылдарҙа колледж бөтөп килеүселәр һаны артты. Уларға Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре кәрәкмәй, тестар үткәреп һайлайбыҙ, институтта уҡыу ваҡыты ла улар өсөн бер йылға ҡыҫҡара, сөнки улар күптән дипломлы белгестәр, улар менән эшләүе лә еңелерәк. 20 июндән яңы уҡыу йылына ҡабул итеү башлана. Был рәсми рәүештә, ә былай беҙ сентябрҙә үк профориентация буйынса ауылдарға йөрөй башлайбыҙ, ата-әсәләр йыйылыштары ойоштораб ыҙ, район үҙәктәрендә концерттар ҡуябыҙ, Сибай институты тураһында һөйләйбеҙ, уҡырға саҡырабыҙ. Институттың үҙендә асыҡ ишектәр көндәре үткәрелә. Донъя хәлдәренән ситтә тормайбыҙ, махсус операция өсөн гуманитар ярҙамдар ойоштораб ыҙ. Әле коллектив менән аҡса йыйып, квадрокоптерҙар һатып алдыҡ, маскировкалау селтәрҙәре әҙерләнек. Бер хәрби частан рәхмәт хаты килде. Студенттарыбыҙ ҙа әүҙем ҡатнаша ындай саралар ҙа. Элек һәм бөгөнгө көндә уҡыған студенттарыбыҙҙы иҫәпкә алғанда, 34 кеше махсус операцияла ҡатнаша. Ауыр, әммә күптән түгел 5-се элекке студентыбыҙҙы ерләнек. Шул бишәүҙең береһе, Әбйәлил егете Тамерлан Илһамовка Рәсәй Геройы исеме бирелде. Уның иҫтәлегенә таҡтаташ ҡуйҙыҡ, волонтерҙар үҙәгенә уның исемен биҙек. Махсус операцияла ҡатнашҡандарҙың ғаиләләренә төрлө яҡлап ярҙам итәбеҙ. Әлбиттә, еңеүгә ышанабыҙ, теләйбеҙ.

Уҡыусыларға бер теләк - тормоштағы еңеүҙәр өсөн белем кәрәк, тик белем арҡылы ғына киләсәк формалаша, ул эш бирә, кешене үҫештерә, яңы үрҙәргә баҫҡыс булып тора. Ата-әсәләр, бала, тип, улар бәхетле булһын, тип йәшәй, һәр уңышына ҡыуана. Сибай институты ана шул үҫеш өсөн иң ҡулай урын. Хәҙерге йәштәр ҡаршылыҡ иң аҙ булған юлдан барырға тырыша, улар өсөн эш хаҡы беренсе урында. Аңлайым, был мөһим мәсьәлә. Әгәр кеше һөнәрен дөрөҫ һайлаһа, эшен яратып башҡарһа, беренсе эш хаҡтары ҙур булмауына күнә белергә тейеш. Мәҫәлән, үҙем уҡыған саҡта 400 һум стипендия ала торғайным, тәүге эш хаҡым 750 һум булды, әммә мин бит ул эште ташламаным, дауам иттем. Йылап эш хаҡы артты, вазифалар ҙа үҙгәрҙе. Эйе, бөгөн төрлө яҡлап ҙур эш хаҡтары менән ҡыҙыҡтыралар һәм аңын-тоңон аңламаған йәштәр яраткан эшенә бармай, аҡсаға алдана. Күпме генә эш хаҡы алһаң да, барыбер етмәйәсәк, иң мөһиме, һайлаған һөнәрең күңелеңә ятырға тейеш. Һөнәрле, юғары белемле булырға теләгәндәргә беҙ һәр саҡта ла ярҙам итербеҙ - беҙҙең эшебеҙ шул!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аң-белемдең милләте юҡ, әммә милли кадрҙар төшөнсәһе бар. Бик тәрән мәғәнәле һүҙбәйләнеш ул - милли кадрҙар! Илдар Сәлихйән улы менән һөйләшкәндән һуң шул турала уйланылды.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН** яҙып алды.

**✓ Быңдай һөжүмде көтмәгән һуғыш суҡмары бер мәлгә генә албырғаны һәм шул секунд етте Зарифҡа, ул автоматты тартып алды. Әммә "Художник"тың бармағы курокка баҫылған ине - атыу тауышы яңғыраны!**





# ГЕРОЙҘАР ВАҠЫТЫ

Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА

(Хикәйә)

*Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һәм һәләк булған батырҙарға арнайым.*

...Зарифтарҙы асыҡ урманға килтереп ташланылар.

Тәүҙә Мәскәүҙән поезға ултырҙылар. Бер бәләкәй генә станцияла төшөрөп, асыҡ кузовлы йөк машиналарына, хатта ҡайһыларҙы трактор арбаларына тейәп, көнбайышҡа алып киттеләр.

Урман тиһәң, хәтере ҡалыр - һирәк кенә ағаслыҡ. Уларының да башын киҫеп алғандармы ни - ярым-ярты. Снарядтар төрлө ағасты төрлөсә ҡырҡып, ҡайһыларын тотошлай сәрпәкләп, ярып үткән. Тимәк, ҡасандыр бында көслө атыш булған! Эх, Башҡортостандың урманын күрһәләр икән! Үтеп булмаслыҡ шырлыҡты! Ә бында һирәк-һаяҡ ҡына үҫкән ҡарағай, уҫаҡ, ҡайын. Йәшеренер, ышыҡланыр урын да юҡ.

Тәүге аҙнала ҡоро урман араһында йоҡлап йөрөнөләр. Бер кем бер нәмә аңлатмай. Бер ни белмәйҙәр. Взвод командиры итеп һайланған запастағы лейтенант үҙе аптырап йөрөй. Ярай әле, ноябрь башы булыуға ҡарамаҫтан, был яҡта йылы икән. Кемдер палаткала, кемдер үҙенең "йоҡо тоғо"нда төн үткәрә. Нимә өсөн яталар бында, нимә эшләргә тейештәр, ысынлап та һуғышҡа ебәрәләрме әллә учение ғынамы - бер нәмә лә билдәле түгел. Тәүҙә үҙҙәре менән алып килгән сухпакетты ашанылар. Әммә организм йылы аш талап итмәй буламы! Яҡындағы ҡасабаға барып, ҡаҙан, ҡулдан эшләнгән мейес, сәйнүк кеүек кәрәкле йыһаз алып килделәр. Байтаҡ ҡына ашамлыҡ та алдылар. Эсемлектең инде иҫәбе-һаны юҡ...

Көн һайын кискеһен шаулашып-гөрләшеп ултырырға күнеккән иҫерек егеттәр бер көн эләгешеп, һуғышып китте. Уларҙы күмәкләп саҡ айырып алдылар. Отделение командиры итеп һайланған Зариф тап ошо көндә үҙен ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ итеп тотҡаны өсөн иптәштәре алдында ихтирам яулауға тәүге аҙым яһаны шикелле. Дөмбәҫләшеп йөрөп, инде айырҙыҡ тигәндә генә "Художник" позывнойлы йәш һалдат ҡулына автоматын эләктереп алды.

- Тор ошонда! - тине ул үҙен кәмһеткән олораҡ йәштәге "Боксер" позывнойлы көслө иптәшенә. - Тор һәм ҡара! Һинән нимә ҡалыр икән? Ҡара ҡан ғына ҡаласаҡ!

Быңдайҙы көтмәгән "Боксер" тирә-яғына ҡаранып алды ла, яҡында ҡорал күренмәгәс, турайып баҫты.

- Йә, нимә, атмаҡсыһыңмы? Әле берәй ҡасан дошманға атҡаның булдымы? Еңел тип уйлайһыңмы кешене үлтереү?

Уның ҡурҡмауы Зарифҡа ла батырлыҡ өҫтәне. Ул бер секундта ынтылып, боксерҙың алдына баҫып, уны кәүҙәһе менән ҡапланы.

- Автоматыңды ал! - тине ҡаты командир тауышы менән. - Ал һәм урыныңа ҡуй!

- Юҡ! - тип ныҡышты "Художник". - Ул үҙенең һүҙе өсөн яуап бирергә тейеш! Мин "Боксер"ҙан көсһөҙмөн! Эйе, мин боксер түгел! Тик мин үҙемдән көләргә, мыҫҡылларға юл ҡуймам!

- Автоматыңды ал! - тип ҡабатланы Зариф. - Я командир отделения! Слушать приказ: убери автомат на место!

"Художник" ҡымшанманы ла! Автоматтың көбөгө Зарифтың күкрәгенә терәлеп тиерлек тора. Ул уң яғына ла, һул яғына ла йәһәт кенә күҙ йүгертте. Егеттәр уларҙы уратып алған. Автоматты һуғып төшөрөм йә тартып алам тиһәң, кемгәләр пуля эләгеүе мөмкин. Тик өҫкә, һауаға ҡаратып ҡына уны эләктерергә була! Йәшен тиҙлегендәге ошо уй башына килеү менән Зариф, күҙ асып йомған арала ынтылып, автоматты йән көсөнә тартты һәм күккә ҡарай төбәне. Быңдай һөжүмде көтмәгән һуғыш суҡмары бер мәлгә генә албырғаны һәм шул секунд етте Зарифҡа, ул автоматты тартып алды. Әммә "Художник"тың бармағы курокка баҫылған ине - атыу тауышы яңғыраны! Ярай әле пуля бер кемгә лә теймәне, ярым ярты ҡалған ағастың өҫкө олонона инеп китте.

- Разойтись! - тип ҡысҡырҙы Зариф һәм автоматты тотоп, ағас эргәһенә барып ултырҙы. Шул арала тирә-яҡтан улар яғына ҡарай йүгерешкән һалдаттар күҙгә салынды.

- Что за выстрел! Кто стрелял?

Хәлдең айышына төшөнә башлаған иптәштәре таралышып өлгөрҙө.

- Никто, товарищ командир взвода! - тип аяғүрә баҫты Зариф. - Мин, позывной "Лев", автоматты таҙартып ултырғанда яңылыш атылды. Бер кемгә лә теймәне, көбөгө күккә ҡарап тора ине.

- Напишешь объяснительную! - тине комвзвода һөҙә ҡарап тора биргәс. - И такое чтоб больше не повторялось! Отбой! Всем спать кроме постовых!

Лейтенант киткәс, һалдаттар шаулаша башланы:

- Нишләп әйтмәнең, "Лев"!

- Дөрөҫөн әйтергә ине!

- Нимәгә яҡларға "Художник"ты! Үҙенең ҡылығына үҙе яуап бирһен!

- "Штрафбат"ҡа ебәрһендәр! Беҙгә ундай псих кәрәкмәй!

- Иртәгә, бәлки, ул һинең үҙенә ҡорал күтәрер!

- Тихо! - тине "Лев" ажғырып. - Шым! Эйе, беренсе тапҡыр мин үҙемдең отделение һалдатын яҡлап алып ҡалдым! Тик һәр ваҡыт улай булмаясаҡ! Ҡолағығыҙға киртеп ҡуйығыҙ! "Художник"ты яҡланым, һатманым, сөнки уны ошондай хәлгә һеҙ төшөрҙөгөҙ! "Боксер" төшөрҙө! Бында кем эскән, кем һуғышҡан - бөтәгеҙ ҙә гәйепле! Бынан ары эскелекте, спиртлы эсемлектәр һатып алыуҙы тыйыу тураһында ҡарар ҡабул итәсәкбеҙ! Иртәгә үк! Әгәр көн дә ошондай байрам дауам итә икән, беҙ бер-беребеҙҙе ҡырып бөтәсәкбеҙ! Сөнки һәр кемебеҙҙең ҡулында утлы ҡорал. Беҙ кемдән һаҡланырға тейеш - дошманданмы әллә ҡыйығы киткән үҙеңдең иптәшеңдәнме? Аңлашылдымы? Ә хәҙер ятырға! Йоҡларға!

Һалдаттар йоҡларға ятһа ла, шым ғына һөйләшеү, фекер алышыу дауам итте. Тиҙ генә тынысланa алманылар. Уларға ҡарап, тыңлап, оҙаҡ уйланып ятты Зариф. Кемдәрҙең "яға аҫтына һалырға" яратыуын, кемдәрҙең эскелеккә ынтылышы юҡлығын самаланы. Үҙе лә ул яҡҡа битараф булманы бығаса. Бигерәк тә студент саҡта иптәштәре менән йыш ҡына һыра һемереп, коктейль эсеп, күңелләнеп алып, ҡыҙҙар "баҫтырырға" яраттылар. Уҡып бөтөп барғанда ғына градуслы эсемлектең ғәҙәткә әүерелә барғанын тойоп, үҙен тыйырға мәжбүр итә алды. Етмәһә, шулай күңелле бер кистән һуң бер ҡыҙҙың ҡосағында уянып киткәндән бирле... Ғәҙәттәгесә, көләп кенә ҡуйғайны ла, юҡ, әҙемтәһе артынан эйәреп килеп тә етте: "Ауырлымын", - тине ҡыҙ. "Һинең мин беренсең дә, һуңғыһы ла булманым, ахыры", - тип шаяртыуға борҙо Зариф ҡыҙҙың еңел-елпе холҡона төрттөрөп. "Эйе, һинә тиклем булды. Ләкин һинән һуң юҡ, бер кем дә... - тине ҡыҙ. - Өйләнешәйек. Бер-ике айҙан айырылышырбыҙ. Юҡһа, мине атай-әсәйем, ағайҙарым өйгә индермәҫ!"

Был ҡыҙға ҡарата бер ниндәй ҙә йылы хис юҡ ине егеттең күңелендә. Сираттағы күңел асыусы ҡыҙ... Ундайға ҡарата ниндәй тойғо булһын! Нәфсеһен ҡандырҙы ла, күңелле кис үткәрҙе лә - вәссәләм... Ләкин ҡыҙҙың ағалары килеп, муйынынан тотоп, һелкеп һалғас, ризалашмай ҡайҙа барһын! "Әгәр өйләнеүҙән баш тартаһың икән, төрмәгә тығабыҙ! Көсләгәнең өсөн! "- тине береһе. "Ниңә суд юлын тапарға! Эсенә бысаҡ ҡаҙаныҡ та, и ... бөттө-китте!"- тип ҡурҡытты икенсеһе. Уларҙың был һүҙҙәренә бер ниндәй йылылыҡ, кешелеклек юҡ ине. Юлдарына арҡыры төшкәндәрҙе йә төрмәгә, йә теге донъяға оҙатҡан әҙәмдәр икәне йәҙҙәрәнә яҙылғайны. Теләкһеҙ, шау-шыуһыҙ ғына никах уҡыттылар. Килен алып, рәхәтләнеп йомшап ултырырға хыялланған әсәһе генә йәл ине Зарифҡа. Ауылға ҡайтыу тураһында үҙе лә һүҙ ҡуҙғатманы, әҙерәк арлы-бирле генә йәшәп торһалар, икеһе ике яҡҡа китер ҙә барыр... Ләкин һин уйлайһың, Аллаһы Тәғәлә үҙенсә хәл итә шул.

Диплом алғас, Зариф һөнәре буйынса урындағы ҡалала эшкә башланы. Ҡорһағы инде байтаҡ ҙурайған кәләше эшкә урынлашырлыҡ түгел ине инде, ҡуртымға алған фатирҙа ғына торҙо. Унан-бынан ашарға йүнәтеп, ярты көнөн йоҡлап, ярты көнөн телефон экранына теклəп үткәрҙе. Уртаҡ һөйләшер хәбәрҙәре лә юҡ ине, шикелле. Зариф эштән ҡайтҡас, кәләше йүнәткән тамаҡты ашай ҙа, икеһе ике мөйөштә телефонға төбәлә... Гел шулай булыр төҫлө ине: көтмәгәндә донъяға сабый тыуҙы. Улы Замир... Бәләкәс кенә был илаҡ йомғаҡты йүнләп ҡулына ла алманы тәүҙә Зариф. Кәләше менән йәшәргә теләмәгәс, бәпес тыумаҫ элек үк сығып китергә кәрәк булған да бит! Бөтөн нәмәгә битараф ине шул: яратмай өйләнде, яратмай йәшәне, әммә уға уңай ине, сөнки тәмлеме-тәмһеҙме, ашарға әҙер. Ҡайтыр мөйөшө бар, етмәһә, эшенә лә яҡын. Бәлки, шуға ла сығып китеп, үҙенә айырым фатир эҙләп йөрөмәгәндер. Мәшәҡәтенән ҡасып. Сабыйҙың тыуыуы барлыҡ йәшәйештәрен үҙгәртте лә ҡуйҙы. Кәләше, нисектер, йомшарҙы, илаҡҡа әүерелде. Зарифты юҡ-бар йомошо менән ҡаңғыртты. Улы ла мыжыҡ. Теләһә-теләмәһә лә ҡулына алырға мәжбүр булды атай кеше. Уныһы беләк буйы ғына булһа ла, ҡулды беләү - күтәрһәң, тыма. Коляскаһына ҡалһаң, йәнә шарылдай башлай... Ошолай йылдан ашыу йәшәп ташланылар. Һуңғы осорҙа кәләше аҡса далулай башлағас, Зариф Себергә сығып китте. Ике-өс вахта эшләп өлгөрҙө бөтәһе... Күпме дауам итер ине икән был уйһыҙ, хыялһыҙ, тойғоһоҙ тормоштары, әгәр бынау яу ҡупмаһа? Мобилизацияға эләгеп, Махсус хәрби операцияға алып китмәһәләр?

* * *

Кәләше иһә йылғыр булып сыҡты, көтмәгәндә хәбәрһеҙ-ниһеҙ Н. ҡалаһына килеп төштө бит! Зарифтың күҙе дүрт булды.

- Нимәгә килдең? Нимә ҡалған һиңә бында? - тип аптыраны ул әхирәте менән уны эҙләп тапҡан ҡатынына ҡарап.

- Кәрәк булғанға! - тине кәләше. - Әллә күпмегә сығып киттең! Ҡасан ҡайтаһың, ҡайта алаһыңмы, ятып ҡалаһыңмы - кем белә! Беҙ белештек, МХО-ныҡылары бер тотҡарлыҡһыҙ ЗАГС-ҡа ҡуйылар икән. Сәғәт 4-тә беҙ ЗАГС-та булырға тейеш! Һөйләшелгән, килешелгән! Командирыңдан һора ла киттек!

- Нимәгә ул һиңә? Яңы килеп ир кәрәк булдымы? Әллә фамилия үҙгәрткең килдеме? - Зариф көлөп кенә ҡуйҙы.

- Юҡ! Үҙең дә, фамилияң да кәрәкмәй! Әммә... ғаиләгә тейешле аҡсаң килеп торорға тейеш! Малайҙы үҫтерергә аҡса кәрәк!

Тағы бер ауылдашын алып, дүртәүләп барып яҙылышып килделәр. Ысынлап та һалдаттар өсөн бер ниндәй кәртә лә юҡ икән. Йәһәт кенә эшләнеләр ҙә, законлы ир булып, кире палаткаһына ҡайтты Зариф. Йөрәгендә бер ниндәй ҙә үҙгәреш булманы. Ярай, йәнә теләгән - йылан ите ашаған. Ысынлап та мобилизацияға эләккәндәргә вәғәҙә ителгән аҡса түләнә икән, бик яҡшы. Алһын, үҫтерһен улын, йәлме ни уға...

Әле бына алыҫ Украина ерендә, шыҡһыҙ урман араһында ята. Иҫерек иптәштәрен күҙҙән үткәрә. "Артабан былай бармай! - тип уйлай ул. - Араҡыны тыйырға кәрәк! Күмәкләп һөйләшергә лә, башҡаса һатып алмаҫҡа. Былай барһа, бөтөнөбөҙ ҙә эскесегә әүерелеп бөтәүебеҙ бар ҙа баһа! Иртәгә үк егеттәр менән һөйләшергә тура килер. Командирҙы алдан ошо һөйләшеү тураһында иҫкәртергә кәрәк, ул башлаһын. "Выскочка" тигән ҡушамат тағып ҡуймаһындар. Выскочкаларҙы бер ерҙә лә яратмайҙар!"

Иртәгәһен ысынлап та ҡаты ғына һөйләшеү булды. Эсергә яратмағандар байтаҡ ҡына икән. Аҙыҡ-түлек алырға эсмәгән егеттәр йөрөйәсәк бынан ары. Араҡы алыуҙы тыйырға. Тик кәрәкле әйберҙәр генә булырға тейеш. Кем законды боҙа - штрафбатҡа китәсәк. Сәбәбен табырбыҙ! Кисә кис дөмбәҫләшеп, ҡорал то-

тоуға тиклем барып еткән һалдаттар ҙа үҙ гәйептәрен аңланы, булһа кәрәк. "Боксер" ҙа, "Художник" та баштарын аҫҡа эйеп тыңланы был ҡарарҙы. Аҙаҡтан айырым-айырым "Лев"ты күреп, рәхмәт әйтергә үҙҙәрендә көс тапты шулай ҙа.

"Мин разрядлы боксер, - тине "Боксер" позывнойын йөрөтөүсе. - Мин башлап бәрәүгә лә ҡул күтәрергә тейеш түгелмен. Был беҙҙең, спортсыларҙың, ҡанына һеңгән, ҡағыҙға яҙылған закон. Теге юлы мин бәйҙән ысҡындым... Һуғыш бөтһән дә юйыр, ғәфү итер тип уйланым... Бынан ары был хәл ҡабатланмаҫ! Теләһәң, мин һине лә, башҡаларҙы ла ҡул һуғышы алымына өйрәтә алам... Берәй ваҡыт кәрәк булыуы бар. Үҙ-үҙеңде һаҡлау өсөн..."

"Художник" еңел генә көүҙәле, ҡыҙҙар кеүек матур йөҙлө, нәфис һынлы егет. "Мин бала саҡтан бары һүрәт төшөрөү менән мауыҡтым. Художкала уҡыным, худграфты бөттөм. Ҡылҡәләмдән башҡа ҡулыма бер әйбер ҙә алманым, ә ҡорал тотором башыма ла инеп сыҡманы!.. Минә ҙур киләсәк юрайҙар ине... Ғәфү ит, "Лев"! Мин һине алдарға мәжбүр иттем... Мине яҡлашып, үҙеңде ҙур бәлә алдына ҡуйҙың! Рәхмәт, мин был һабаҡты ғүмерҙә лә онотмам!" Шулай итеп ике яңы дуҫы, тоғро дуҫы барлыҡҡа килде "Лев" - Зарифтың...

Яйлап-яйлап взводта тәртип урынлашты. Ҡаты ғына итеп үҙ һүҙен әйтә белгән взвод командиры менән отделение командиры булған Зарифты тынлай башлағандай булдылар. Бер аҙнанан "Окапываться!" тигән команда яңғыраны. Бәләкәй генә сапер көрәктәре бар ине үҙҙәре менән. Тик уның менән үләнле ер ҡыртышын алыуы еңел булһа ла, артабан бик яй ҡаҙыла. Ҡасабанан ябай көрәктәр һатып алып килергә тура килде. Окоптар ҡаҙылды. Төпкә төшкәс кенә кәрәге тейҙе сапер көрәктәренең. Алдан да, арттан да ҡаҙырға кәрәк окопты. Снаряд шартлағанда йөшенеп ҡалыуға унай булһын өсөн. Тура ғына ҡаҙылған окопта тап өҫтөнә генә килеп төшөүе мөмкин үлем ярсығының. Ярай әле бындағы ер ҡаҙырға уңай: өҫтә аҙ ғына ҡыҙғылт-ҡара тупраҡ, ярты метрҙай балсыҡ, унан инде ҡом-таш китә. Ташлы ерҙе ҡаҙыу, балсыҡҡа ҡарағанда, күпкә еңел.

Унан блиндаж эшләнеләр. Ҙур итеп землянка ҡаҙҙылар, өҫтөн ике-өс ҡат ағас менән ҡапланылар. Метрҙан ашыу итеп накат менән тупраҡ өйҙөләр. Ошолай эшләһәң, мина шартлағанда ла тере ҡалыу мөмкин икән. Ағас эшенә оҫта ауыл егеттәре булыуы ярап ҡалды. Ручканан ауыр әйбер тотмаған ҡала малайҙарына ауырыраҡҡа тура килде килеүен. Әммә бында һине әпәүләп торған атай-әсәйең юҡ! Приказ булды - тот балта, тот бысҡы!

**(Дауамы. Башы 16-сы һанда).**

*ИЖАДХАНА*

**Сәнғәттең ниндәй генә төрө булмаһын, нәфис һүҙ сәнғәтеме ул, йыр-бейеүме - һәммәһе лә үҙенә бер ылыҡтырһа, кире ебәрмәй. Бик борондан кешелек тормошонда ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан театр сәнғәте иһә кешене ғүмерлеккә үҙенә йота, сөнки театр - ул тормош, театр - ул йәшәйеш, ул иҫ киткес мөғжизә. Сәхнәлә бәләкәй генә булһа ла роль уйнарға хыялланмаған кеше юҡтыр ул донъяла. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Резеда Риф ҡыҙы САФИУЛЛИНА өсөн сәнғәт төшөнсәһе бала сағынан икмәккә май һылауға бәрәбәр. Өс тиҫтәгә яҡын ул Сибай дәүләт башҡорт драма театрына тоғро хеҙмәт итә. Был ынтылыш, хеҙмәткә тоғролоҡ унда ҡайҙан килә, сәнғәткә юлды нисек ярған? Унан ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап алырға тырыштыҡ.**

# СӘХНӘ ТУРАҺЫНДА...

## кем генә хыялланмай икән!



● Теләк булһа, актер һөнәрен үҙләштерергә булалыр, әммә бының өсөн бала саҡтан килгән хыял, ынтылыш та кәрәктер. Минә ҡалһа, бәләкәйҙән күңелем менән сәнғәт донъяһына тартылдым. Атайымдың бер туған ҡустыһы Милләт ағайым район кимәлендә билдәле оҫта баянсы булды. Атайым гармунда уйнаны, әсәйем йырлай ине, ижадҡа, сәнғәткә ынтылыш быуындан да күсәләр, күрәһең. Өйҙә гармун булғас, тыҫҡылдата-тыҫҡылдата мин дә уйнарға өйрәндем. Бәлки, ул хәтлем үк оҫта гармунсы ла түгелмендәр, әммә бында балаларса ихласлыҡ менән ниәт итеү, ынтылыш мөһим.

Аҫҡы урамда йәшәгән әхирәтемә, атаһы гармун алып биргәс, шуларҙың мунсаһына инеп уйнай торғайныҡ, йәнәһе, өлкәндәр әйтеүе буйынса, мунсала тиҙерәк өйрәнеп була. Бер көн барһам, һыйырҙары быҙаулаған да, шуға йылы булһын, тип, әсәһе аласыҡтарындағы мейесте тоҡандырҙы. Беҙ ни, оҙаҡ уйламай, йылы урында мәж килеп гармун уйнаныҡ. Кискә әхирәтем ҡапҡа төбөндә оҙатып ҡалды. Өләсәйем аҫҡы урамда йәшәй, шуларға киттем, сөнки йыш ҡына уларға йоҡларға бара торғайным. Китеп барам, ниңәлер аяҡ быуындары тотмай башланы, етмәһә, баш әйләнә. Рәшәткәләргә тотона-тотона саҡ-саҡ өләсәйҙең өйөнә килеп еттем. Ишектәрен шар асып ебәрҙем дә, гөлп итеп иҙәнгә ауҙым. Өләсәй нишатыр һымаҡ нәмәһен еҫкәтеп, саҡ иҫкә килтерҙе - ҡыш көнө тәүгә яғылған аласыҡ мейесенең еҫе тейгән икән.

Шулай, гармун уйнайым тип, ҡыҙыҡ хәлдәргә тарыған саҡтар ҙа булды. Ҡолаҡҡа ятышлы "Әпипә" көйөнән башланыҡ уйнарға өйрәнеүҙе, ноталарҙы белмәйбеҙ, өйрәтеүсеһе лә юҡ. Шулай булһа ла, ике ағайым да, һеңлем дә өйрәнде гармунда уйнарға. Оҫта гармунсылар булмағанда, клубта йәштәрҙе бейеткән саҡтар ҙа булды, хатта бер нисә тапҡыр туйға саҡырҙылар. Элек бит ауылда йәшәүе шул тиклем күңелле булды. Саң борҡой башлаһа, клуб иҙәненә һыу һибеп ебәреп бейей инек. Күңелем дә күберәге бейеүгә тартылды. Концерт-маҙар ҡуйғанда ҡыҙҙарға бейеү өйрәтә торғайным хатта.

● Мәктәп йылдарым шулай сәнғәткә бәйле үтте. Кемдер һәләттәрен төрлө яҡлап үҫтерә, кемдер бер йүнәлеште һайлай. Мин бит тағы һүрәт төшөрөргә яратам, ғөмүмән, сәнғәт өлкәһе күпкә ҡыҙыҡһыраҡ ине. Театр ул саҡта уйымда ла юҡ, әммә ҡарамаҡҡа тыныс холоҡло күренһәм дә, тәнәфес ваҡыттарында таҡта эргәһенә сығып, төрлө этюдтар күрһәтеп, класташтарымды көлдөрә торғайным. Күрәһең, ундай һәләтем дә булғандыр инде.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытҡан Фирүзә апай Сафина әҙәбиәткә һөйөү уятты. Бигерәк тә интонация менән матур итеп шиғырҙар ятлата ине ул. Күрше Амангилде урта мәктәбенә барғас, яңы уҡытыусыбыҙ Илүзә апай: "Күрәһегеҙме ана Резеда шиғырҙы нисек уҡый, һеҙ ҙә шул интонация менән ятлап килегеҙ", ти торғайны.

● Театрға эшләү өсөн бер яҡлап ҡына үҫешеү етмәй, мөмкинлегең булһа, йырларға ла, бейергә лә тейешһең, музыкаль яҡтан һәләтең булһа, тағы ла һәйбәт. Үсмерҙәр өсөн мәктәп йылдарында иң ҡыйыны - һөнәрҙе дөрөҫ һайлау. Мин дә, унда барам, бында барам, тип йөрөй торғас, Магнитогорск пединститутының художество-графика факультетына уҡырға барырға булып киттем. Ул саҡта колхоздың парткомы булып эшләгән Булат Юныс улы Исламбаев бер көн өйөбөҙгә килде. "Ҡыҙығыҙҙы йүнәлтмә буйынса Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһына уҡырға ебәрегеҙ", тине ул атай-әсәйемә. Шулай, аңғармаҫтан, атайым мине Стәрлегә алып сығып китте. Барғас, әлеге лә баяғы, ниндәй бүлекте һайларға, тигән уй тыуҙы. Яңы асылған мәҙәни саларҙы ойоштороусы бүлеген тәҡдим иттеләр. Мин бейеү, йә музыка буйынса уҡырға теләгәйнем дә ул, әммә йүнәлтмә буйынса мин колхозға клуб мөдире булып ҡайтырға тейешмен. Уҡыу әллә ни ауыр тойолманы. Актер оҫталығы буйынса ла дәрестәр булды, төрлө этюдтар эшләй инек. Реквизиттар әҙерләргә өйрәндек, яратҡан шөғөлөм буйынса төрлө һүрәттәр төшөрә инем.

● Уҡып бөткәс, "Заветы Ильича" колхозының үҙәге Гусев ауыл мәҙәниәт йорто директоры итеп тәғәйенләнеләр. Нәҡ шул осорҙа ауылда музыка мәктәбе асылды. Яңы эш башлаған йәш белгес булһам да, әлеге көнгә тиклем эшләп килгән был мәктәпте асыуҙа минең дә өлөшөм бар. Өс йыл эшләгәс, Өфө сәнғәт институтының фольклор бүлегенә уҡырға инергә йыйына башланым, әммә шул мәлдә билдәле театр эшмәкәре, режиссер Ғабдулла Ғабдрахман улы Ғиләжевтың Сибайға режиссерҙар курсына абитуриенттар йыйыуын ишетеп, таусылар ҡалаһына юлландым. Күрһәткән этюдтарымды ҡарағас, Ғабдулла Ғабдрахман улы Өфөгә саҡырҙы. Минең уйым ситтән тороп уҡыу ине, ә режиссерҙар бүлегендә ундай мөмкинлек юҡ. Шуға саҡырыуҙан баш тарттым. Сығып барған ерҙән ул кире бороп, ҡаты ғына итеп "Киләһең!" тине. Шулай итеп, имтихандарҙы тапшырып, режиссерҙар бүлегенә уҡырға индем һәм юғары белем алдым.

● Өфө сәнғәт институтында уҡығанда билдәле режиссер, профессор Рифҡәт Вәкил улы Исрафилов, режиссер-педагог Булат Батыр улы Хәйбуллиндар уҡытҡан курсты бөттөм. Шундай шәхестәрҙән дәрестәр алғаныма ҡыуанам һәм ғорурланам. 1995 йылда Айгөл Хәкимова менән (ул актерҙар бүлеген бөткәйне) Мәҙәниәт министрлығының йүнәлтмәһе буйынса Сибай драма театрына эшкә килдек. Киләһе йыл туған театрыбыҙҙа эшләүебеҙгә утыҙ йыл була. Беҙ килгәндә "Ҡоҙаса" спектакле бара ине, беҙҙе күмәк сәхнәгә индереп ебәрҙеләр - шулай башланып китте театр тормошо. Ул ваҡытта артистар етерлек, тота килеп ҙур ролдәр бирмәнеләр. Яйлап-яйлап, тәжрибә туплай-туплай эш алға барҙы. Айгөл менән тәүге ролебеҙ Олег Ханов ҡуйған "Башмағым" спектаклендә булды.

● Ғаиләлә дүрт бала үҫтек: ике ағайым, бер һеңлем бар. Атай-әсәй беҙҙе тәртипле, эшһөйәр итеп, хеҙмәт аша тәрбиәләне. Эштән ҡурҡмау - үҙе ҙур тәрбиә бит ул, бөгөнгө йәштәргә ана шул эш етешмәй. Бала саҡта буш йөрөргә артыҡ ваҡыт та булманы: мал ҡарайһың, һыу ташыйһың, утын яраһың, бесән сабаһың. Атайыбыҙ техниканы яҡшы белә ине, үҙ ҡулдары менән төрлө запас частарҙан трактор эшләп алған кеше бит ул! Кәрәк икән, телевизор ремонтланы, мейес сығарҙы, өй баштарына ҡыйыҡ япты - бөтөн яҡтан да оҫта булды, ауыл халҡы уға ҡарап тора торғайны. Тик тракторына рөхсәт бирмәй тартып алдылар, шуға һаман асыу килә.

● Үҙ ғаиләмә килгәндә, яҙмыштыр инде: институт бөтөп, тормош ҡуреп, яратҡан кешемә кейәүгә сыҡтым. Тик ирем 40 йәшендә генә үлеп ҡалды, мин ул саҡта декрет ялында инем. Өс баламды аяҡҡа баҫтырам, тип йәшәйем. Өлкән улым Магнитогорск ҡалаһында Носов исемендәге күп профилле колледжды бөтөп, армияла хеҙмәт итте. Өйләнде. Мин өләсәй - ейәнсәрем бар. Улым әле эшләп тә, ситтән тороп институтта уҡып та йөрөй. Игеҙәктәрем, улым менән ҡыҙым, шулай уҡ юғары белем алалар - улым Мәскәүҙә Сеченов исемендәге медицина университетында, ҡыҙым Сибай институтының психология факультетында уҡый. Өс студент беҙҙә!

● Сәнғәт донъяһына бер килеп инһәң, ысҡынып сығып китеүе ҡыйын. Бала сағымда, "Кем булаһың?" тиһәләр, һәр саҡ "Әртист булам", тип әйтә торғайным. Хәҙер, әйткәнең юш килде, тиҙәр. Күңелем тартҡан юлдан барам, Аллаһҡа шөкөр. Театр бит ул коллектив эш урыны, күмәкләп тормошто, айырым кешеләрҙең яҙмыштарын сәхнә аша күрһәтәбеҙ, заман өсөн актуаль булған проблемаларҙы күтәрәбеҙ, тамашасыларыбыҙҙы уйландырабыҙ. Шәхсән тормошобоҙҙа ла ярҙам итә театр сәнғәте. Артистар башҡаларҙан айырылып тора, тиҙәр, был хаҡта йыш ишетергә тура килә. Шулай булырға тейеш тә, сөнки беҙ мәҙәни урында эшләйбеҙ. Һөйләү манерабыҙ студент саҡтан уҡ формалаша башлай. Каникулға ҡайтҡан саҡта класташтар башлап иғтибар итте шуға. Беҙҙең өсөн донъяның матди яғына ҡарағанда, рухи яғы, күңел яғы беренсе урында. Хәҙер замана ауыр, тиҙәр, әммә сәнғәт бер ваҡытта ла бөтөргә тейеш түгел. Йыш ҡына, артистар сәйәси ваҡиғаларҙа ҡатнашмайҙар, тиҙәр. Нисек инде ҡатнашмай, беҙҙең урыныбыҙ сәхнәләге сәйәсәттә, айырма шунда ғына.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ**
**яҙып алды.**

***✓ Мостай Кәрим Мәксүт мәктәбенә ҡунаҡҡа килгәнендә уның ҡулынан тотоп, "Был малай киләсәктә ҙур кеше буласаҡ", тип маҡтаған. Ильяс яратҡан әҙибенең күңеленә һалған был өмөтөн ғүмер буйы аҡларға тырыша.***

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОРТ ХАЙУАНДАРЫ ДАУАЛАЙ ҘА

■ Диетологтар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, татлы ризыҡтар сәләмәтлеккә зыян килтермәй. Хатта йыш һәм күп итеп кәнфит ашауысыға ла йөрәк-ҡан тамырҙары сире, һимереү кеүек хәүеф янамай, бында эш туҡланыуҙа ғына түгел, ти ғалимдар. Йәғни, татлы ризыҡ ашау һимереү хәүефе менән бәйле түгел, был турала тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың тән массаһы индексы, бил һәм май ҡатламы үлсәме күрһәткестәре һөйләй. Шулай уҡ уларҙың ҡан баҫымы, холестерин кимәле, инсулин резистентлығы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырыу хәүефе тыуҙырмаған.

■ Һалҡын тейгәндә халыҡ дауаһына өҫтөнлөк биреүселәр әйтеүенсә, эхинацея үҫемлеге экстракты иммунитетты нығытыуға ярҙам итә. Ғалимдар эхинацея нигеҙендәге дарыуҙарҙы тикшергән һәм уларҙың һалҡын тейеүҙән дауалай алмауын асыҡлаған. Шулай ҙа эхинацея препараттарының ауырыуҙы профилактикалауҙа файҙаһы бар. Был тикшеренеүҙәрҙе үткәреүсе белгестәр раҫлауынса, был препараттарҙың күбеһе тикшереү үтмәй һәм аҙыҡҡа биологик өҫтәмә булып тора. Әйткәндәй, киҫкен вируслы ауырыуҙар менән сирләп китеүселәр дарыуға, шул иҫәптән, эхинацея өҫтәмәләренә йылына уртаса 8 млрд доллар исраф итә. Дарыуханаларҙа үҙебеҙҙән илдә етештерелгән ябай эхинацея төнәтмәһе сит илдә етештерелгән билдәле брендтағы дарыуҙарҙан күпкә осһоҙораҡ тора. Барыһының да нигеҙендә эхинацея үҫемлеге ятҡанлыҡтан, уларҙың араһында айырма юҡ, ти белгестәр.

■ Стеналарға, йорт йыһаздарына, текстилгә һеңгән тәмәке төтөнө яман шешкә килтереүе ихтимал. Белгестәр раҫлауынса, үҙе сәләмәт йәшәү рәүеше алып барып та, тәмәке төтөнө һуларға мәжбүр булған кешенең ДНК-һы зарарлана һәм яман шеш барлыҡҡа килеү хәүефе арта. Беркли ҡалаһында урынлашҡан Милли лаборатория хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, тәмәке тартҡанда һауаға 4 мең тирәһе төрлө матдә бүленеп сыға, уларҙың күп өлөшө йыһаздарҙа, стенаға һеңә. Был ағыулы матдәләр канцероген тәьҫиргә лә эйә. Азот һәм азот оксиды органик берләшмәләренән торған нитрозамин төркөмө бигерәк зыянлы. Улар ДНК молекулаһы менән берләшеп, яман шеш күҙәнәктәре үҫешен барлыҡҡа килтерә.

■ Йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә, ти белгестәр. Европа университеттары ғалимдары йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут бығына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып дауалау һәләтенә лә эйә.

*ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ…*

# ХӨРМӘТ ТӨБӨ - ХЕҘМӘТ

**Журналист һөнәренең ни тиклем яуаплы, мәшәҡәтле һәм тынғыһыҙ икәнлеген үҙен шул эшкә арнаған кеше генә яҡшы беләләр ул. Гәзит хәбәрсеһенең, мәҫәлән, ваҡыты тәғәйен билдәләнгән эш көнө бөтөнләй юҡ тиерлек, һис туҡтамай даими сығырға тейешле матбуғат баҫмаһы өсөн ул көнөнә, төнөнә ҡарамай, ал-ял белмәй юл йөрөргә, кәрәкле материалды табып, ваҡытында әҙерләп тапшыра барырға тейеш. Уныһын әҙерләгәс, икенсеһе, өсөнсөһө сиратта тора...Әрме сафтарынан ҡайтып, ике йыл самаһы Йылайырҙа йәшәгән йылдарҙа район гәзитендә эшләгән яҡын дуҫым Ильяс Исмәғил улына ҡарап, шул тиклем ауыр эшкә ҡайҙан көс-ғәйрәт таба икән, тип берсә һоҡлана, берсә аптырай торғайным.**



Ильяс Такалов йәмле Йылайыр йылғаһы буйында ултырған бик боронғо ауылдарҙың береһе Мәксүттә 1954 йылдың 3 мартында Исмәғил Ғәҙелша улы менән Сәлимә Ғүмәр ҡыҙының ғаиләһендә икенсе бала булып донъяға килгән. Атаһы менән әсәһе күп йылдар совхоз фермаһында малсы булып эшләгән, хеҙмәт алдынғылары булған. 1961 йылда Ильяс ауылдың башланғыс мәктәбенә уҡырға бара. Мәктәптә тик "бишле"гә генә уҡый, спорт ярыштарында алдынғылыҡты бирмәй, бигерәк тә бейеү, шиғыр уҡыу менән мауыға. Ул йылдарҙа ауылда балаларға фронтовик яҙыусы һәм уҡытыусы Әмир Моратов белем бирә, Ильяс ул ойошторған әҙәби кисәләрҙә һәм концерттарҙа бик әүҙем ҡатнаша.

1962 йылдың йәйендә халыҡ шағиры Мостай Кәрим Мәксүт мәктәбенә ҡунаҡҡа килгәнендә уның ҡулынан тотоп, "Был малай киләсәктә ҙур кеше буласаҡ", тип маҡтаған. Ильяс яратҡан әҙибенең күңеленә һалған был өмөтөн ғүмер буйы аҡларға тырыша. Шуны ла әйтергә кәрәк, күп заман үткәс, 1991 йылда районда Ш. Бабич көндәре барған осорҙа, тыуған ауылында Мостай ағай менән йәнә осрашырға насип була уға. Халыҡ шағирының: "Хөрмәтле Ильяс туғаным! Бынан 28 йыл элек Мәксүттә мин һине етәкләп йөрөгәйнем, хәҙер һин мине ҡосаҡ йәйеп ҡаршылайың, рәхмәт", - тигән яҙмаһын бик ҡәҙерле иҫтәлек итеп һаҡлай ул.

Ауылдағы башланғыс мәктәпте тамамлағас, атаһы уны Баймаҡ интернат-мәктәбенә уҡырға бирә. Ул ваҡытта мин был уҡыу йортонда бер йыл белем алып өлгөргәйнем инде. Ильяс бындағы белем, тәрбиә биреү кимәленең бик юғары икәнен тиҙ аңланы, уҡыуға бар тырышлығын һалды. Дәрестәрҙән бушаған ваҡытында йәмәғәт эштәрендә, спорт сараларында әүҙем ҡатнашты. Уның төрлө байрамдар уңайынан ойошторолған концерттарҙа дәртле итеп, килештереп бейеүенә һоҡланмаған бала булмағандыр. Бер-ике йыл уҡығас, Баймаҡ район гәзитенең йәш хәбәрсеһе булып китте ул. Гәзит биттәрендә мәктәп тормошо тураһындағы мәҡәләләре, фотоһүрәттәре йыш баҫыла торғайны. Уҡыу алдынғыһы булараҡ, бер тапҡыр ул республика Яңы йыл шыршыһы байрамында ҡатнашты, мәктәптең бейеү коллективы менән Өфө сәхнәләрендә сығыш яһаны. ВЛКСМ-дың ярты быуатлыҡ юбилейы йылында үҙ класында тәүгеләрҙән булып комсомол сафына алынды.

Урта мәктәпте 1971 йылда тамамлағас та Ильяс Исмәғил улы Йылайыр районының "Коммунизм өсөн" гәзитендә фотохәбәрсе булып эш башлай. Бер нисә йылдан уны уңғанлығы, профессиональ оҫталығы өсөн хәбәрсе, бүлек мөдире, унан һуң 25 йәштә мөхәррир урынбаҫары вазифаларына үрләтәләр. Ошо тынғыһыҙ эш араһында ул ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында белем ала. Уҡыуының һуңғы йылында ғалим һәм педагог Әхмәт Сөләймәнов етәкселегендә башҡорт халҡының сәсәнлек традицияһы темаһына диплом эше яҙа һәм уңышлы яҡлай. Диплом етәксеһе уға артабан фән өлкәһендә эшләргә тәҡдим итһә лә Ильяс Исмәғил улы журналистикала ҡалыуҙы үҙ итә.

Редакция һәм типография коллективында тәүҙә комсомол, һуңынан партия ойошмаһын етәкләй. 1976 йылда БАССР һәм СССР журналистар союзы сафына ҡабул ителә. 1986-1988 йылдарҙа КПСС Өлкә комитетының йүнәлтмәһе буйынса Свердловск юғары партия мәктәбендә уҡый. Уны тамамлағас, Әлшәй районының башҡорт, урыҫ, татар телдәрендә сыҡҡан "Ленинизм байрағы" гәзитендә ике йыл баш мөхәррир булып

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# ҒАИЛӘЛӘР ТАНТАНАҺЫ…



**"Тамырым - ғаиләмдә" тип аталды "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалының ошо көндәрҙә Өфөлә үткән ҙур концерты. Ғаилә - ул кешенең тамырҙары. Ағас, тамырынан һут алып, нисек бейек һәм матур булып үҫһә, кеше лә шулай ғаиләһе наҙына төрөнөп, көслө һәм бәхетле булып буй еткерә. "Тамыр" телеканалының концерты Рәсәйҙә Ғаилә йылына һәм Башҡортостанда Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр тураһында хәстәрлек йылына арналды.**

"Тамыр" байрамы йәш тамашасыларҙың йыл һайын иң ныҡ көтөп алған байрамы. Быйыл унда "Тамыр" телеканалының вокал студияһы, "Сулпылар" телевизион конкурсы һәм "Һәләттәр йондоҙлого" һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың ижади конкурсы ҡатнашыусылары, күп балалы ғаиләләрҙән һәләтле кесәйҙәр, республиканың иң яҡшы бейеү коллективтары сығыш яһаны.

- Был ысын мәғәнәһендә ғаилә байрамы, ғаилә ҡиммәттәребеҙ тантанаһы булды, - ти "Тамыр" телеканалының директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Тамашасылар ғаиләләре менән килде. Сәхнәлә һәләтле ғаиләләр сығыш яһаны. Концертты күп балалы ғаилә алып барҙы. Балалар туғандарына ҡарата һөйөү хисе, традицион ғаилә ҡиммәттәре, шәфҡәтлек һәм хәстәрлек тураһында йырланы һәм һөйләнде. Мин ҡуйыусы режиссер Ләйсән Солтанғоловаға, сценарий авторы Гөлназ Ишемғоловаға һәм "Тамыр"ҙың барлыҡ профессиональ командаһына, талантлы балаларға һәм аҡыллы ата-әсәләргә рәхмәтлемен...

Концерт өсөн ундан ашыу балалар йыры махсус яҙылған һәм уларға аранжировкалар эшләнгән. Ойоштороусылар йыл да сифатлы балалар йыры яҙыуға күп көс һала. Туған телдәге йырҙар аша балалар йөрәгенә үтеп инергә, уларҙа барлыҡ туған булған нәмәләргә ҡарата һөйөү тәрбиәләү, туған ҡиммәттәрҙе һеңдереү - бына ниндәй оло маҡсаттар ҡуйған үҙенә "Тамыр" телеканалы командаһы һәм быны 30 йыл дауамында уңышлы атҡарып килә.

Зилә һәм Хәсән Усмановтарҙың, Айым һәм Рим Рәхимовтарҙың ғаиләләренең сағыу сығышы бигерәк тә тамашасыларҙың күңеленә ятты. Зәйнетдин, Гөлсәр Байғусҡарова, Гөлнара Рәшитова балалар менән бергә йырланы. Йәш тамашасылар билдәле актер Шәһит Хамматов башланғысында яҙылған "Арбала" йырын айырыуса яратты. Уны Ринат Рамаҙанов, Заһит Ҡунафин, Заһир Зәйнетди-

***✓ Һеҙ берәй ваҡыт протон ядролы атомдарҙы һәм улар тирәләй әйләнгән электрондарҙың беҙ йыһанда күргән күренешкә оҡшағанына иғтибар иткәнегеҙ бармы? Юҡ, әлбиттә. Беҙ бит тамаҡ тураһында ғына уйлайбыҙ!***



эшләй. Һуңынан, тыуған районына ҡайтып, партияның район комитетында контроль-ревизия комиссияһын етәкләй, аҙаҡ өс йыл район советы башҡарма комитетының мәҙәниәт бүлеге мөдире вазифаһында эшләп ала. 1994 йылдан хаҡлы ялға сыҡҡансы, йәғни егерме йылға яҡын, район гәзите мөхәррире йөгөн тарта. Әле лә, район журналистары берлеге рәйесе булараҡ, редакция эше менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй Ильяс дуҫым. 2004 йылда күп йылдар намыҫлы эшләгән өсөн ул "Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды.

Ошо йылдарҙа бик күп яуаплы йәмәғәт эштәрен дә башҡарырға тура килә уға. Ике саҡырылыш район Советы депутаты булып һайлана, ике тиҫтә йыл самаһы район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, түңгәүер ырыуы башҡорттарының ҡор башы вазифаларын башҡара. Икенсе, өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты була. Түңгәүерҙәрҙең ҡор башы булараҡ, ул тыуған районының данын арттырыу, арҙаҡлы яҡташтарының исемен мәңгеләштереү буйынса байтаҡ саралар үткәрә. Мәҫәлән, ҡоролтай ағзалары менән берлектә Йылайыр ерендә һәләк булған яугир-шағир, ялҡынлы дәүләт эшмәкәре Шәйхзада Бабич иҫтәлегенә ул һуңғы сәғәттәрен үткәргән бинаға таҡтаташ ҡуйҙыртыу, шағирҙың ерләнгән урынын асыҡлап, һәйкәл астыртыу, ауыл урамына уның исемен бирҙертеү кеүек мөһим мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итә. Ҡоролтай башланғысы менән Ҡаҙырша, Сәлим ауылдарында Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның Йылайыр төбәгенән сыҡҡан арҡадаштары иҫтәлегенә стела ҡуйыла. Ошо рәүешле район тарихында яҡты эҙ ҡалдырған бик күп шәхестәрҙең исемдәре тыуған төбәктәрендә мәңгеләштерелә.

Район Советы депутаты булған осоронда Ильяс Такалов тыуған ауылына ҡырсынташ юл һалыу, тәбиғи газ үткәреү, телефон бәйләнеше булдырыу эштәрен дә башлап йөрөй. Халыҡтың һорауы буйынса мәсет астырыу, шәжәрә байрамдарын үткәреү, ауылдашы, арҙаҡлы ғалим, яҙыусы, ҡурайсы һәм йырсы Зәбихулла Исҡужин һәм яугир укытыусы, журналист һәм яҙыусы Әмир Моратов хөрмәтенә яҙыулы стела ҡуйҙыртыу кеүек мәшәҡәттәрҙе лә үҙ өҫтөнә ала.

Әлбиттә, ошондай оло эштәрҙе уңышлы атҡарыу өсөн ныҡлы терәк булыуы шарт. Үҙе әйтеүенсә, Ильяс Исмәғил улы тормош юлдашынан, ғаиләһенән бик уңа. Буласаҡ ҡатыны менән тәүге танышыуы осраҡлы рәүештә тыуған ауылында була. Ауылдаш дуҫының туйына ҡунаҡ булып килгән килен әхирәттәре араһында Баймаҡ ҡыҙы Сәфирә лә булып, Ильясҡа уға шунда уҡ күҙе төшә. Ике йыл тирәһе дуҫлашып йөрөгәндән һуң, 1975 йылдың октябрендә улар гөрләтеп туй үткәреп, ғаилә ҡороп ебәрәләр. Һөйөклө Сәфирәһе район дауаханаһында эшләй башлай һәм хаҡлы ялға сыҡҡансы, 40 йыл ғүмерен балалар һаулығы һағында шәфҡәт туташы булып эшләй. Намыҫлы хеҙмәте тәүҙә "Һаулыҡ һаҡлау отличнигы" билдәһе менән баһалана, ә 2011 йылда уға "Башҡортостандың атҡаҙанған һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем бирелә.

Сәфирә Ғәйнислам ҡыҙы менән улар өс ир балаға ғүмер бүләк итә. Яҙмыш шулай ҡушҡандыр - улдарының өсөһө өс ерҙә тыуа. Тәүге сабыйҙары Илфат 1976 йылдың сентябрендә Йылайырҙа донъяға килә, уртансы улдары Самат 1976 йылда - Баймаҡ ҡалаһында, кинйә малайҙары Илгиз инә 1989 йылда Әлшәй районында йәшәгәндә тыуа. Балалары Йылайыр, Раевка мәктәптәрендә уҡыйҙар, һуңынан барыһы ла ҡасандыр атайҙары тамамлаған Башҡорт дәүләт университетында уҡып, Илфат - юрист, Самат - биолог, физик культура, Илгиз тарихсы һөнәрҙәрен ала. Атанан күргән уҡ юнған, тигәндәй, малайҙар бәләкәйҙән спортты яратып үҫәләр. Өсөһө лә бокс менән ныҡлы шөғөлләнә, Илфат хатта ил беренселегендә ҡатнашып, алтын миҙал ала, Самат менән Илгиз республика турниры призерҙары була. Хоккей, футбол, баскетбол, волейболды ла улар үҙ итә, йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнаша. Бөгөн улар, үҙ ғаиләләрен ҡороп, матур тормош кисерәләр, уңышлы эшләп йөрөйҙәр. Илфат килендәре Айгөл менән биш бала тәрбиәләй, Самат менән Оксана килендәренең ғаиләһендә өс бала үҫә, Илгиз менән Айгөл килендәре - ике улға атай-әсәйҙәр. Һәр тыуған ейән йә ейәнсәр хөрмәтенә йәш алмағас ултыртыу - Такаловтар ғаиләһендә төп йолаларҙың береһе. Хәҙер ҡартатай-ҡәртәсәйҙең баҡсаһын ун төп йәш алмағас йәмләй, тәүгеләре емеш тә бирә башлаған.

2017 йылда "Байыҡ" республика бейеү конкурсының йомғаҡлау концертында Такаловтар, өс быуын ғаиләләре менән ҡатнашып, беренсе урын алып ҡайттылар. Улар түңгәүер ырыуының теләнселәр араһы инеше башында торған ҡан бабалары Тәкәй ҡарттың (халыҡ иҫәбен алыу, ревизия - документтарында урыҫ иҫәпсеһененң хатаһы арҡаһында уның балалары Такаловҡа әйләнеп киткән) бөгөнгө варистары нәҫел намыҫын ошолай лайыҡлы һаҡлай. Быға йәнә бер нисә миҫал итеп шуларҙы ла әйтергә була: ейәндәре Алмаз "Байыҡ - 2017" республика конкурсының Гран-приһын яулаһы, Италияла үткәрелгән халыҡ-ара фольклор фестивалендә ҡатнашты; игеҙәк ейәндәре Айгиз менән Нургиз "Әсә" исемле билдәле башҡорт кинофильмында төп ролдәрҙе башҡарҙылар, кикбоксинг буйынса Рәсәй, Башҡортостан чемпиондары титулын яуланылар; ейәнсәрҙәре Рушана иһә "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса район конкурсында еңеүсе булды.

Шулай Ильяс Исмәғил улы менән Сәфирә Ғәйнислам ҡыҙы гәзиз балаларының, һөйөклө ейән-ейәнсәрҙәренең уңыштарына ҡыуанып, уларҙың ихтирамына һөйөнөп, һәр яҙ аҡ сәскәләргә төрөнөп ултырған алмағастарҙа һоҡланып, тыныс, ҡояшлы көндәргә шатланып, үҙҙәренә яҙған яҙмышҡа шөкөр итеп, Хоҙайға рәхмәттәр уҡып, ғүмер йомғағын һүтә. Үҙҙәренең хәләл көсө менән һалып сыҡҡан күркәм йорттарында, бөртөкләп йыйған донъяларында ишле ҡош-ҡорт аҫрап, бай баҡса үҫтереп, хаҡлы ял рәхәтлеген татып көн итәләр. Йәмғиәт тормошонан да ситтә ҡалмайҙар. Республика, район матбуғаты биттәрендә Ильяс Такалов мәҡәләләре әле лә даими баҫылып тора.

Ильяс Такалов - районда ғына түгел, ғөмүмән, республика кимәлендә киң танылған, абруйлы шәхес. Дандың төбө - хөрмәт, хөрмәт төбө - хеҙмәт, тиелә халҡыбыҙҙың бер мәҡәләндә. Халыҡтың һөйөүен, ихтирамын ул да фәҡәт үҙенең тырышлығы, тынғыһыҙлығы һәм ғүмере буйы башҡарған бихисап изге эштәре менән яулаһы.

**Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ,**
**филология фәндәре докторы,**
**профессор.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Оҡшашлыҡтар ҡануны

"Үрҙә (Йыһанда) булған бар нәмә беҙ Ерҙә әйә булған нәмәләргә оҡшаш".

Хәҙерге фәндең иң ауыр мәсьәләләренен береһе - сикһеҙ бәләкәй һәм сикһеҙ ҙур дәүмәлдәр араһындағы сәйер оҡшашлыҡтарҙы аңлатырға тырышыу. Һеҙ берәй ваҡыт протон ядролы атомдарҙы һәм улар тирәләй әйләнгән электрондарҙың беҙ йыһанда күргән күренешкә оҡшағанына иғтибар иткәнегеҙ бармы: йондоҙло галактика, уртаһында ҡара упҡын һәм улар тирәләй планеталар әйләнеп йөрөй. Юҡ, әлбиттә. Беҙ бит тамаҡ тураһында ғына уйлайбыҙ!

Гений Альберт Эйнштейн ғүмеренең һуңғы йылдарын ошо мәсьәләне сисергә тырышыуға арнай. Ул ядро энергияһы (сикһеҙ бәләкәй дәүмәл) менән гравитация энергияһы (сикһеҙ ҙур дәүмәл) араһында бәйләнеш булдырырға уйлай. Әммә уның был уйы килеп сыҡмай, ләкин ул шундай белдереү яһай: "Мин Аллаһы Тәғәләнең уйҙарын белергә теләйем. Ҡалғандар - ваҡ мәсьәлә". Һеҙҙе донъяның иң бөйөк физиктарының береһе ғүмеренең һуңында Аллаһы Тәғәлә тураһында уйлай башлауы аптыратмаймы?

Оҡшашлыҡ ҡанунына ярашлы, бер сыһанбарлыҡта булған бөтөн нәмә икенселәрендә лә бар. Был символ Таро картаһының беренсе картаһында һүрәтләнә: тылсымсының бер ҡулы өҫкә - күккә күрһәтә, икенсеһе - ергә. Шундай уҡ символ Дауыттың, йәғни Сөләймән мисәтенең алты ҡанатлы йондоҙонда ла йәшеренгән: уның өҫкө өлөшө йыһанға йүнәлтелгән, аҫҡы өлөшө - ергә. Ҡанун беҙгә уйҙарыбыҙҙа һәм эске тормошобоҙҙа булған барлыҡ нәмәнең кәрәк икән тышҡы донъябыҙҙа ла булырға тейешлеген күрһәтә.

## Ижад ҡануны

Бына ҡайҙа "Һорағыҙ - алырһығыҙ" принцибының асылы йәшеренгән. Ижад ҡануны беҙҙең барыбыҙҙың да ижадсылар булыуыбыҙҙы һәм уйҙарыбыҙҙың Йыһандың башҡа өлөшө менән ҡабул ителеүен раҫлай. Материяның ни тиклем буш икәнен күрһәтеү өсөн бер нисә миҫал ҡарайыҡ. Әле һеҙ ултырған ултырғыс юҡ, сөнки ул бихисап молекуланан, ә молекулалар атомдарҙан, атомдар электрон, протон һәм нейрондарҙан тора.

Әстерхән сәтләүеге, ер менән сағыштырғанда, бильярд шары эргәһендәге атом кеүек кенә. Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, ошо атомды алайыҡ һәм уны бейсбол стадионы дәүмәленә тиклем ҙурайтайыҡ. Һеҙәмтәлә атом ядроһы унда ҡом бөртөгө кеүек кенә булып ҡаласаҡ. Әгәр атомды бильярд шары дәүмәленә тиклем бәләкәйләтһәк, уның эсе буш буласаҡ. Бына ни өсөн электрон микроскоп аша ҡарағанда һеҙҙең ҙур ултырғысығыҙ ҙур бушлыҡ булып күренәсәк. Ә хәҙер ҡулығыҙҙы юғары күтәреп, ултырғысығыҙға ныҡ итеп һуғығыҙ. Йоҙроғоғоҙ ултырғыс аша үттеме? Юҡмы ни? Шулай итеп беҙ гәмәлдә бушлыҡтан ҡулға тоторлоҡ, күҙгә күренерлек нәмәләр булдырырға һәләтлебеҙ, йәғни аң ҡеүәте менән юҡтан бар яһай алабыҙ - ысын тылсымсыларбыҙ.

**Пьер МОРАНСИ.**

нов һәм Шәһит Хамматов балалары менән бергә башҡарҙы. Бөтә зал был сағыу тамашаға ҡушылды.

Концертты Ишембайҙан "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" республика конкурсы лауреаты булған Лилиә һәм Фәнзил Әҙелбаевтарҙың күп балалы ғаиләһе алып барҙы. Йософ, Айзель һәм Ибраһим тамашасыларҙың күңелен яуланы - атай-әсәһе менән берлектә өс сәғәтлек концертты матур итеп алып барҙы улар.

Ғаилә - кеше өсөн иң төп ҡиммәт. Ғаиләлә беҙ яратырға, ихтирам итергә, яуаплы булырға, хәстәрлекле һәм шәфҡәтле булырға өйрәнәбеҙ. "Башҡортостан" Дәүләт концерт залының ҙур сәхнәһендә балалар кешелек ҡиммәттәренең иң мөһимен күрһәтте. Йәш тамашасылар туйғансы уйнаны, конкурстарҙа ҡатнашты, бүләктәр һәм тәмлекәстәр отоп кинәнде.

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ АЛИҺӘҺЕ



**Башҡортостан Республикаһының Милли музейында "Башҡорт бейеүе легендаһы - Рәшиҙә Туйсина" тигән күргәҙмә асылды. Рәшиҙә Туйсина - РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы, БАССР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге һәм Ғ.Сәләм исемендәге премиялар лауреаты, Софияла IX Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестивалендә алтын миҙалға лайыҡ булған, Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнгән.**

- "Урал ынйыһы", "Мадам Грация", "башҡорт бейеүе алиһәһе", "башҡорт бейеү корифейы", "башҡорт мәҙәниәте феномены", тиҙәр уның хаҡында. Сағыштырыуҙар күп, ә Рәшиҙә Туйсина берәү генә. Махсус хореография белеме булмаған ябай ауыл ҡыҙы республиканың төп ансамблендә бейей. Илебеҙҙең Кремль һарайында тәүге яңғыҙ сығышы ла алҡыштарға күмелә, - ти күргәҙмә кураторҙары.

"Башҡорт бейеүе легендаһы - Рәшиҙә Туйсина" күргәҙмәһендә күренекле бейеүсенең уңыш һәм йәшлек серҙәре, "Заһиҙә" бейеүенең 62 йыллыҡ тарихы һәм башҡа бик күп ҡыҙыҡлы фактар хаҡында белергә мөмкин. Шулай уҡ легендар бейеүсенең сәхнә костюмдарын, биҙәүестәрен, тарихи фотоларын күрергә була. Ҡунаҡтарҙы Рәшиҙә Туйсина үҙе һәм уның тәрбиәләнеүселәре Салауат Мөхәмәтйәров, Айгөл Әсәҙуллина, Ирада Ҡадирова һәм Зәйнетдин сәләмләне. Күргәҙмә барышында экскурсиялар, оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо. Әлеге күргәҙмә 2024 йылдың 12 майына тиклем эшләй.

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 1 МАЙ - ЯҘ ҺӘМ ХЕҘМӘТ БАЙРАМЫ

**Беренсе Май байрамын Рәсәй империяһында тәүге тапҡыр 1890 йылда Варшавала (Поляк батшалығы) халыҡ-ара хеҙмәтсәндәрҙең теләктәшлек көнө булараҡ 10 мең эшсе ҡатнашыуындағы стачка менән билдәләйҙәр. Ә 1891 йылда - Санкт-Петербургта. Был байрамды 1889 йылда II Интернационалдың Париж конгресы 1886 йылдың 1 майында Чикаго эшселәре сығышы иҫтәлегенә арнап булдыра.**


*"Беренсе маёвка" картинаһы. 1891 йыл.*

1917 йылда Февраль революцияһынан һуң, Беренсе Май байрамын беренсе тапҡыр асыҡтан-асыҡ билдәләйҙәр: миллионлаған эшсе төрлө лозунгылар тотоп урамға сыға. Петроградта Марс майҙанында демонстранттарҙы Александр Керенский сәләмләй. Ә инде Октябрь революцияһынан һуң байрам рәсмиләштерелә. РСФСР-ҙа ул башта "Интернационал көнө" тип атала, аҙаҡ "Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө - Беренсе Май" 1-2 май көндәрендә билдәләнә. Тәүге көнөндә хеҙмәтсәндәр демонстрацияға сыға, хәрби парадтар уҙа, ә икенсеһендә бөтә илдә "маёвка"-лар үтә - күмәк кеше тәбиғәткә йыйылып сыға. Әйткәндәй, маёвка тәү сиратта эшселәрҙең йәшерен йыйындар үткәреү маҡсатынан барлыҡҡа килә. Революцияға тиклемгә Рәсәйҙә маёвкала ҡатнашыусыларҙы полиция эҙәрлекләй.

СССР осоронда Беренсе Май демонстрациялары һәр ҡала-ауылда ойошторола. Халыҡ лозунгылар күтәреп, рухлы йырҙар йырлап, урамдарҙан марш менән үтә, улар алдында етәкселәр сығыш яһай, байрамса саралар ойошторола. Бындай рәсми демонстрация һуңғы тапҡыр 1990 йылдың 1 майында үтә, ә 1992 йылда был көн "Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы" тип үҙгәртелә. Хәҙер был байрамдың ниндәйҙер сәйәси әһәмиәте юҡ, халыҡ уны ер эшенә тотоноу, тәбиғәткә күңел асырға сығыу өсөн өҫтәмә ял көндәре булараҡ ҡына ҡабул итә.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**16-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Болот. Әфлисун. Көймә. Тамсы. Йәйен. Шаһнамә. Ҡарағат. Насар. Ай. Өфө. Өй. Өмә. Аңҡау. Карл. Айыт. Таба. Аршын. Ут. Тбилиси. Нәҫел. Америка. Альпака.

**Вертикаль буйынса:** Ҡармасан. Терегөмөш. Ғәм. Ант. Әтәс. Бумала. Ыштан. Бүләк. Өҫтәл. Итуруп. Йәнтөйәк. Ус. Тиҙәк. Төн. Ара. Йән. Алтын. Атаң. Алма. Нур. Ун. Ил.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 май "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**9 май "Ат уйнатып алдан бара"** (З. Бураҡаева), театрлаштырылған тамаша. 12+
**10 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**11 май Премьера! "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 18.00 16+
**12 май "Килен"** (З. Мусина) драмаһы менән Учалы филармонияһында. 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 май "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим), хикәйәт. 18.00 12+
**7 май "Звезда Героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 15.00 12+
**8 май "Униженные"** (З. Биишева), драма. 18.00 12+
**9 май "Звезда Героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**9 май "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00 0+
**"Живи!"** (Р. Сванидзе). Еңеү көнөнә арнала. 15.00 12+
**10 май "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 18.00 0+
**11 май "Вечно эта 345-я!"** (Ж. Кусаинова). 12.00, 15.00 0+
**12 май "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+
**"Вот так репка!"** (И. Токмакова). 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 май "Билдәһеҙ һалдат"** М. Кәрим шиғырҙарына кантанта. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**6 май "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 12+
**11 май "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 13.000+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**7 май "Память в объятиях моих"** (З. Усманова), пластик спектакль. 12+
**8 май "Фронтовичка"** (А. Батурина), драма. 12+
**9 май "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 май Премьера! "Мы за ценой не постоим"** музыкаль-әҙәби лекторий. 15.00 6+
**8 май Премьера! "Гөлнара"** (Ф. Бүләков), драма. 12+
**9 май "Трагедия в Сокольниках"** (А. Рева), концлагерь тотҡондары балалар хәтирәләре. 14.00 6+
**10 май "Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+
**11 май "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 18.00 16+
**12 май "Как Петух мир спасал"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12.00 0+

## БР Милли музейы

**8 май "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы"** күргәҙмәһе буйлап экскурсия. 15.00 12+
**9 май "Еңеү көнө"** акцияһы. 12.00 0+

АФАРИН!

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры "МИТЕМ" Халыҡ-ара театр фестивалендә уңышлы сығыш яһаны. Был сара Венгрияның баш ҡалаһы Будапештта 6-28 апрелдә үтте. Башҡорт артистары Венгрия милли театрының төп сәхнәһендә Мәжит Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр" повесы буйынса Айрат Абушахманов ҡуйған спектаклде уйнаны. Тамашасы уны бик йылы ҡабул итте, алҡыштар оҙаҡ тынманы, ә һуңынан театрыбыҙға һәм уның баш режиссеры Айрат Абушахмановҡа һоҡланыуҙарын белдерҙеләр. Һүҙ - фестивалдә ҡатнашыусыларға.**

# ВЕНГРИЯЛА ЛА БУЛДЫҠ БЕҘ!



***Аттила Виднянский, режиссер, Венгрия милли театры директоры:*** Беҙҙең халыҡ-ара проекттарҙың координаторы һәм әҙәбиәт бүлеге етәксеһе Андраш Козьма 2015 йылда һеҙҙең спектаклде ҡараған һәм шунан бирле уны үҙебеҙҙең сәхнәлә күрһәтеү ниәте менән янды. Бөгөн уның теләге тормошҡа ашты! Һеҙҙең спектакле Венгрия тамашасыһы менән бергә ҡарай алыуыма бик шатмын. Башҡорт театры Европала шундай юғары һәм профессиональ кимәлдә күрһәтелеүе айырыуса беҙҙең, ойоштороусыларҙың, күңелебеҙгә ятты, сөнки был Фестивалебеҙгә лә мәртәбә өҫтәне. Тетрәндергес булды, йөрәктәребеҙҙе ауланығыҙ. Спектаклдәрегеҙҙе үҙегеҙҙең туған башҡорт телендә уйнауығыҙ өсөн айырыуса рәхмәт, хөрмәт менән алдығыҙҙа баш эйәм, сөнки бөгөн туған телде, халыҡтың мәҙәниәтен һаҡлау һәм тамырҙарҙы онотмау бик мөһим. Артабан да ике яҡлы хеҙмәттәшлегебеҙ артыр, һеҙҙең спектаклдәрҙе Венгрия театры сәхнәһендә тағы ла күрербеҙ, тигән ышаныста ҡалам.

***Андраш Козьма, халыҡ-ара проекттар координаторы:*** Театрҙар йөшәй һәм аралашыуҙы, тәжрибә уртаҡлашыуҙы дауам итеүе һөйөндөрә. Былтыр октябрь айында Башҡортостан театры Рәсәйҙән берҙән-бер вәкил булараҡ, "Джут" спектакле менән бөтә донъянан йөҙәрләгән театрҙар йыйылған Халыҡ-ара театрҙар олимпиадаһында ҡатнашты. Был юлы һеҙ беҙҙе тағы ла нығыраҡ таң ҡалдырҙығыҙ - театр өсөн сиктәр һәм тел ҡаршылыҡтары юҡ. Хәҙер беҙ һеҙҙең театрҙы беләбеҙ, киң фекер йөрөткән һәм театрын ҡайһы юлдан алып барырға белгән баш режиссерығыҙ Айрат Абушахманов менән дә яҡшы танышбыҙ һәм хөрмәт итәбеҙ. Яңы үрҙәр һәм үҫеш теләйбеҙ театрығыҙға. Беҙҙең өсөн һеҙ гел көтөп алынған ҡунаҡ!

***Иршат Фәйзуллин, М. Ғафури исемендәге БАДТ директоры:*** Донъя театраль майҙанында беҙ республикабыҙҙы, Рәсәйҙең һөнәри театраль сәнғәтен күҙәләндерәбеҙ һәм репертуарыбыҙҙа үҙебеҙҙең башҡорт тамашаһына ла, венгрҙарға ла берҙәй ҡыҙыҡлы спектаклдәр булыуы яҡшы. Венгриянан коллегаларыбыҙға айырыуса ҙур рәхмәт: үҙебеҙ менән тик спектаклдә кейгән костюмдарҙы ғына алып килдек, ә декорация һәм реквизиттарҙы Венгрия театры белгестәре әҙерләне. Коллектив исеменән республикабыҙ етәкселегенә һәм Башҡортостандың мәҙәниәт министрлығына рәхмәтемде белдерәм. Ижади коллектив өсөн бындай сәфәрҙәр кәрәк һәм мөһим, сөнки артистарҙы һәм режиссерҙарҙы яңы спектаклдәргә, проекттарға дәртләндерә.

***Тәнзилә Хисамова, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы:*** Төркөмдә мин иң олоһо, һигеҙенсе тиҫтәне ҡыуып барам һәм коллегаларым шаяртып әйтмешләй, "Венгрияны яуланым". Яҙмышыма һәм коллегаларыма рәхмәтлемен - был сәфәр бик үҙенсәлекле булды, Венгрия тамашасыһы беҙҙе көслө алҡыштарға күмде, мин республикабыҙҙы лайыҡлы күрһәтә алыуыбыҙ менән ғорурмын.

***Илһөйәр Ғәзетдинова, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы:*** Беҙҙең "Ҡара йөҙҙәр" спектакле миңә бик яҡын, сөнки мин 44 йыл элек төп героиня - Ғәлимә булып уйнаным, ә бөгөн уның әсәһе ролен башҡарам. Ошо бәхет түгелме ни? Беҙҙең спектакль, беҙҙең театр бөгөн талап итерлә: беҙҙе беләләр һәм саҡыралар, һәр ваҡыт тамашасы һөйөүенә ҡойонабыҙ. Октябрь айында "Ҡара йөҙҙәр" спектакленең юбилейы, ул сәхнәлә ун йыл дауамында аншлаг менән бара.

***Гөлнара Ҡаҙаҡбаева, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:*** Фестивалдәрҙә сығыш яһауы һәр саҡ тулҡынландырғыс һәм яуаплы. Әммә беҙ булдырҙыҡ! Спектаклебеҙҙең яҙмышы матур - мин ун йыл инде Ғәлимә ролен башҡарам һәм һәр саҡ үҙем өсөн ниндәй-ҙер яңылыҡ асам, спектаклдәге мөхит, күңелгә ятышлы моң, рәхмәтле тамашасылар - барыһы ла мине яңы хистәргә байыта. Был сәйәхәт бик оҡшаны, Венгриянан мин илһамланып, театрыбыҙҙың яңы спектаклдәре менән бында тағы ла кире килергә тигән теләк менән ҡайтам.

***Артур Кәбиров, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы:*** Барыбыҙ ҙа арыһаҡ та, күңелебеҙ күтәренке. Бөтә күңелем менән залдың энергетикаһын, уларҙың геройҙар өсөн борсолоуын тойҙом. Беҙ үҙебеҙҙең халыҡты, театрҙы сит илдә тейешле кимәлдә күрһәтә алдыҡ, тамашасыларҙың рәхмәтле йөҙҙәре һөйөндөрҙө - ижади миссиябыҙ үтәлде.

***Лилиә Ғәлина, Ғәли исемле малайҙы уйнаусы актриса:*** Спектакль башланырҙан алда мин бик тулҡынландым, сөнки беҙ башҡортса уйнайбыҙ, ә бында төп телдәр - венгр һәм инглиз телдәре. Әммә борсолоуҙарым бушҡа булған, барыһы ла яҡшы үтте. Ҡунаҡсыл Будапешт, матур мөнәсәбәттәге тамашасы, оҙайлы алҡыштар, Дунай яры буйлап йөрөүҙәр - бына ниндәй онотолмаҫ матур хәтирәләр алып ҡайтабыҙ беҙ был фестивалдән.

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының фестивалгә сәйәхәте тамамланды, ә яҡын киләсәктә беҙҙе тағы ла ҡыҙыҡлы бер проект көтә - "Туғанлыҡ" Милли театрҙарының халыҡ-ара фестивален ойоштороуҙа ҡатнашасаҡбыҙ. Ул Өфөлә 16-23 майҙа үтә.**

**Динара ҠӘЙҮМОВА,**

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының баш мөхәррире.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ДУҪЫҢ КҮП БУЛҺА...

### дошманың үҙе үлер

Дошман менән дуҫ булһаң, билеңдә балтаң булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тел торошона ҡарап был телдә һөйләшеүсе халыҡтың нисек йәшәүен аңларға була.

**(Хулио Кортасар).**

Кешеләрҙең бер-береһенә таш ташлауын һүгенеү һәм әр һүҙҙәре менән алыштырған тәүге кеше цивилизацияны ижад итеүсе булған.

**(Зигмунд Фрейд).**

Тормош эре планда ҡарағанда - трагедия, йыраҡтан ҡарағанда - комедия.

**(Чарли Чаплин).**

Барыһын да ярат, айырым кешеләргә генә ышан, бер кемгә лә яуызлыҡ эшләмә.

**(Уильям Шекспир).**

Һәр кем үҙ фекерен әйтә ала, ләкин закон барыһы өсөн дә берәү.

**(Теренций).**

Үткәндәге хаталарҙы төҙәтеүгә ҡарағанда... тәнҡитләү еңелерәк.

**(Джованни Бокаччо).**

Түҙемлек һәм көндәмлек янында асыу һәм ҡыҙыулыҡ юҡ.

**(Франциск Ассизский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Яҙыу өҫтәлендә бер өйөм таҙа ҡағыҙ биттәре ята. Ләкин берҙән-бер көндө кемдер бер ҡағыҙ битен алып, уны арҡыры-буйға һыҙғылап, һүрәттәр төшөрөп, нимәләрҙер яҙғылап һалып ҡуя. "Ниңә һин мине шундай мыҫҡыллауҙарға дусар иттең? - тип һорай йәне әрнеп ҡағыҙ бите ҡәләмдән. - Минең аҡ ҡына йөҙөмдө һин ҡара буяуың менән бысраттың. Хәҙер мин кемгә кәрәк булам инде?.." "Улай уҡ борсолма әле һин, - ти уға ҡәләм. - Һине бөрәү ҙә мыҫҡыл итмәне һәм бысратманы ла, ә яҙыуҙар ярҙамында кәрәкле мәғлүмәттәр теркәне, һүрәттәр яһаны. Хәҙер һин ябай ғына ҡағыҙ кисәге түгел, ә кешенең аҡылын, фекерен һаҡлаусы - ошонда инде һинең бөтөн ҡиммәтең..."**

**Ҡәләм хаҡлы булып сыға. Эш өҫтәлен йыйыштырған саҡта кеше ваҡыт үтеү менән һарғайған таҙа ҡағыҙ биттәрен күреп ҡала һәм йыйып алып, уларҙы мейескә ырғытырға итә. Шул саҡта ҡағыҙ өйөмө араһында баяғы ниндәйҙер яҙыуҙар яҙылған, һүрәттәр төшөрөлгәнен күреп ҡала һәм уны башҡаларынан айырып алып, һаҡ ҡына өҫтәл тартмаһына һалып ҡуя. Кеше аҡылын һаҡлаған ҡағыҙ шулай юҡ ителеүҙән ҡотолоп ҡала..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идараһында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24017

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА, Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
2 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111806